ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11-17 май (һабанай)

2019

№ 19 (853)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Уҡыйһың икән,**

тимәк... фекерләйһең



3

**Хеҙмәткә һөйөү...**



кеше итте уларҙы 7

**Атлы халыҡ беҙ!**

Әммә беҙҙең ошо даныбыҙға яҫҡыналар...



8-9

**Тоғролоҡ**



12

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!***

***Әлеге мәлдә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 2019 йылдың икенсе яртыһына - 624 һумға, абонент йәшнигенә - 594 һум 06 тингә; Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I-II группа инвалидтары - 563 һум 40 тингә, абонент йәшнигенә - 539 һум 46 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур баҫмалар һәм Башҡортостан "Юлдаш" радиоһы фонды аудиокитабы менән бүләкләнер. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Ошо араларҙа ил күләмендә урындағы үҙидаралыҡ көнө билдәләнде. Бөгөн йәмғиәтебеҙҙә үҙидаралыҡ мөмкинлектәрен нисек файҙаланалар?

***Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА, Белорет район хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлеге белгесе:*** Нимә генә тиһәк тә, бөгөнгө ҡатмарлы заманда лайыҡлы тормош булдырыу, дәүләт программаларын уңышлы тормошҡа ашырыу, власть менән халыҡ араһында тығыҙ бәйләнеш булдырыу йәһәтенән үҙидаралыҡ органдарының хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Был йәһәттән бигерәк тә хакимиәт башлыҡтарының эшен айырым билдәләп китергә мөмкин, сөнки таяҡтың иң ауыр өлөшө нәҡ улар иңенә төшә. Биләмәне үҫтереү, халыҡты ут-һыу, газ менән тәьмин итеү, көнкүреш ҡалдыҡтарын утилләштереү, уңайлы һәм сифатлы йәшәү рәүеше булдырыуҙан тыш, медицина, мәғариф, мәҙәниәт учреждениеларын сафта тотоу, халыҡтың һаулығы, белем алыуы һәм ял итеүе кеүек мөһим мәсьәләләрҙе лә иғтибар үҙәгенән ысҡындырмаҫҡа тура килә уларға.

Үкенескә күрә, бөгөн ауыл башлыҡтарының хеҙмәтенә лә бер яҡлы ғына баһа биреп, был эштең ниндәй кимәлдә яуаплы булыуын аңлап етмәүселәр ҙә бар. Башлыҡ вазифаһына үрләп, үҙенекен һүҙ итеп, барыһына ла баш булып, бойороҡ ҡына биреп йөрөргә теләүселәр ҙә юҡ түгел. Ә бит идара итеү өсөн, тәү сиратта, муниципалитеттарҙың маҡсатын, бурысын яҡшы аңлау мөһим. Бында юғары белемгә, бер нисә дипломға эйә булыуың ғына ярҙам итмәй. Ниәтеңә ирешеү өсөн әллә күпме тупһаларҙы тапарға, дөйөм мәсьәләләрҙе хәл итеүҙең уңайлы юлдарын табырға, халыҡ менән уртаҡ фекерле, берҙәм булырға ла, үҙ эшмәкәрлегеңә ябай граждандарҙы йәлеп итә лә белергә тейешһең.

Йәшереп торорға түгел, бөгөн халыҡ менән уртаҡ тел табыу еңел булмаған оҙайлы эш. Ике арала тығыҙ бәйләнеш булдырыу өсөн йылдар буйы эшләргә кәрәк. Әммә был эштең файҙаһы ҙур, тырышлыҡ үҙен аҡлай. Бергәләшеп эшләүҙе хуп күргән, был эште яйға һалған хакимиәт башлыҡтарына биләмәнең социаль-иҡтисади үҫешен нығытыу, урындағы ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итеү ҙә еңелгәрәк төшә. Шуға ла ауыл старосталары, депутаттар, урындағы эшҡыуарҙар муниципаль берәмектәрҙең төп таянысы, уң ҡулы булып тора ла инде. Улар менән иҡтисад өлкәһен үҫтереү өсөн генә түгел, биләмә киләсәге өсөн дә кәңәшләшеп эшләргә була.

Әлбиттә, бар проблемаларҙы ла бер көндә, анһат ҡына хәл итеп булмай. Бер төн эсендә күпер төҙөп, юл һалып ҡуйырға тылсым таяғы юҡ. Үҙебеҙҙең әкиәт донъяһында түгел, ә ысынбарлыҡта бары тик хәләл көсөбөҙгә генә таянып йәшәүебеҙҙе лә оноторға ярамай. Әммә, күңелендә ғәме, сәме булған хакимиәт башлыҡтары үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртмай, ә үҙ төйәгенең ысын патриоты булып, ауылына ҡағылышлы дөйөм проблемалар уртаһында ҡайнап йәшәй. Ундайҙар төрлө дәүләт программаларын да уңышлы файҙалана белә. Шул арҡала һуңғы йылдарҙа ғына "Реаль эштәр", "Урындағы инициативаларға ярҙам итеү", "Уңайлы ҡала мөхите" программалары ярҙамында бик күп социаль объекттарға капиталь ремонт яһалды, әллә күпме юлдар, күперҙәр төҙөлдө, балалар майҙансыҡтары булдырылды. Ошо башҡарылған эштәрҙән сығып ҡына ла үҙидаралыҡ органдары - ауылдың ғына түгел, ә бөтә илдең киләсәге, тип әйтергә ныҡлы нигеҙ бар. Нәҡ ошо системаның уңышлы эшләүенә, үҙ биләмәһенең йәшәйеше, граждандарының тормошо менән нисегерәк идара итеүенә бөтә илдең яҙмышы бәйләнгән.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ТУҠТА, МӘЛ!*

* * *

***Илем буйлап атлай Үлемһеҙ полк,***
***Еңеүселәр килә, ҡарағыҙ!***
***Бөгөн улар барыһы ла иҫән,***
***Бөгөн улар имен, яраһыҙ.***

***Ветеранды, уның балаларын***
***Ошо парад бергә тупланы.***
***Оркестрҙар өндәй бер тауыштан:***
***"Тыныс атһын илдең һәр таңы!"***

***Үлемһеҙ полк!***
***Һиндә тарих шаңы,***
***Яу кисергән ялан күҙҙәре,***
***45-тән иҫкән елдәр шауы,***
***Тол ҡатындың терелгән йөрәге,***
***Ышаныс һәм өмөт саткылары,***
***Осрашыуҙың көтөп алғаны...***
***Үлемһеҙ полк булып илде иңләй***
***Совет һалдаттарының даны.***

***...Киң майҙандан бара еңеүселәр,***
***Үткәндәрҙән сәләм бирәләр...***
***Әйтерһең дә,***
***Улар Еңеү яулап,***
***Яуҙан яңы ҡайтып киләләр.***

**Олеся ӘХМӘТРӘХИМОВА.**




12+

*✓ Әлбиттә, күп ауылдарҙа хәҙер ҡатын-ҡыҙ башлыҡтар ысын мәғәнәһендә уңған хужабикә генә түгел, ә һәләтле ойоштороусы ла икәнлеген күрһәтеп өлгөрҙө.*



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

**Мин Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға бер ай ҙа өс көн үткәс тыуғанмын. Үҙ-үҙемде белеп, донъяны аңлы рәүештә ҡабул иткән мәлдә балалар йортонда тәрбиәләнә инем инде. Һирәк-һаяҡ йөшел үлән йөҙгән "аш" тип аталған ризыҡ ашағаным, яҙын бик хәлһеҙ булыуым арҡаһында мине тауҙар араһына йыуа йыйырға алып бармауҙары хәтеремдә уйылып ҡалған.**

# ИКМӘКМЕ?

## Ул ҡәҙерле ризыҡ булыуҙан туҡтамай

Еңеү килгәс, күп балалар йорттарын Өфөгә күсерҙеләр. Ошо ҡалала туҡлыҡ, бөтөнләккә тейендек. Икмәкте лә туйғансы ашай башланыҡ. Һабаҡташтарыбыҙ менән был мәлдәрҙе "бәхетле бала саҡ" тип иҫкә алабыҙ. Тик мәктәпте тамамлап, төрлө юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингәс, һуғыштан һуң тыуған быуын балаларына ҡарағанда сағыштырмаса бәләкәй буйлы икәнебеҙҙе күреп, ҡаушап ҡалғайныҡ. Шул саҡ арабыҙҙа Римма тигәнебеҙ: "Кайғырмағыҙ, беҙ бит әкиәттәге гномиктар кеүек, матур, теремектәрбеҙ", - тип йыуатҡайны. Бала саҡтың нәҡ үҫә торған мәле аслыҡҡа тура килгән шул, ни ҡылаһың инде. Дөрөҫөн әйтәм, Рәлис Ураҙголовтың "Киске Өфө"лә лә баҫылған, китап булып та сыҡҡан "Аслыҡ. Ҡорбандар. Һабаҡ" мәҡәләһен уҡырға йөрәк етмәне. Йырҙа йырланғанса, "Бит былай ҙа йөрәк яралы..." Нервылар түҙган инде. Хистәр нескәргән. Йөрәктәр ҡаҡшаған. Аллаға шөкөр, беҙҙе яуыҙ дошманды еңеүсе яугирҙарҙың балалары булыу тойғоһо ғорур йәшәтте, тормош юлын эшләйәр, әүҙем булып үтергә ярҙам итте. Ниндәй генә ваҡытта йәшәһәк тә, икмәк беҙҙең өсөн иң ҡәҙерле ризыҡ булып ҡалды.

Магазиндарҙағы икмәкте лә һайлап ҡына һатып алабыҙ хәҙер. Әммә иң ҡәҙерле ризыҡты ла һатыуға һәйбәтләп бешереп сығармайҙар бит ҡайһы саҡта. Бөгөн кем күгәргән, йә таң атыуға еҫләнгән, йә ҡамыры төйөрләнгән икмәкҡә юлыҡмаған икән! Яландарҙа тырышып, тирләп-янып, һыуһап, арып-талып үҫтергән алтын бойҙайҙы нисек итеп, гонаһтан ҡурҡмай, әүеш-тәүешләп бешерергә була? Ошоға ҡағылышлы радио аша тапшырылған бер хикәйә иҫкә төштө. Ҡошсолоҡ фермаһында "Пасха" байрамы алдынан йомортҡалар буйынса план тулмай башлаған. Ферма мөдире хеҙмәткәрҙәрен үҙенә саҡырып алып, был хәлдең сәбәбен асыҡларға булған. Тәүҙә ферманың йылылығы, таҙалығы, һунынан аҙыҡтарҙың сифаты өсөн яуап биргән технологтарҙы тыңлаған. Бөтә эш тейешенсә башҡарыла икән. Уйлана торғас, директор әле күптән түгел генә уҡыу йортон тамамлап эшкә килгән уҡыусыйға һүҙ биргән дә былай тигән: "Һеҙ - йәш белгес, бәлки, беҙгә билдәле булмаған сәбәптәрҙе әйтерһегеҙ?" Ҡыҙыҡай ҡаушап ҡыҙарынған да: "Юҡ, ағай, мин йоморҡаларҙы йәшереп өйөмә алып ҡайтып китмәйем", - тип илап ебәргән. Бына шул хикәйәләге кеүек, мин дә беҙҙең икмәкҡә нимә ҡушып, ә нимәһен ҡушмай алып ҡайтып китәләр икән, тип уйланам.

Әлбиттә, майын, ыуылдырығын һылап ҡапҡан кемдәргәләр икмәктең сифаты тойолмайҙыр ҙа. Ә кемдәргәләр бөгөн икмәк тағы ла берҙән-бер ҡиммәтле ризыҡҡа әйләнә бара икәнен дә оноторға ярамай.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ошо араларҙа ил күләмендә урындағы үҙидаралыҡ көнө билдәләнде. Бөгөн йәмғиәтебеҙҙә үҙидаралыҡ мөмкинлектәрен нисек файҙаланалар?

**(Башы 1-се биттә).**

***Йомабай МӨХӘМӘТКОЛОВ, педагогия хеҙмәте ветераны:*** Урындағы үҙидаралыҡ өлкәһе мәсьәләләре менән әллә ни таныш булмаһам да, ҡасандыр ауыл, ҡала Советтары булып, хәҙер инде икенсе һүҙ - муниципалитет берәмегә тип аталған органдар эшен барыбер бер ни тиклем сырамыта алам, тип уйлайым. Шуға күрә лә был өлкәгә ҡағылышлы ҡайһы бер фекерҙәрем менән уртаҡлашҡым килә. Исемен үҙгәртеүҙән был органдарҙың есеме үҙгәрмәне барыбер. Әлбиттә, матур итеп яҙалар, һөйләйҙәр был турала. Йәнәһе лә, урындағы үҙидаралыҡтар - халыҡҡа Рәсәй Конституцияһы һәм федераль закондар сиктәрендә үҙ власын бойомға ашырыу, башҡарыу өсөн бирелә. Ябайыраҡ итеп әйткәндә, халыҡ власы булып сыға инде. Ғәмәлдә иһә, был ысынбарлыҡҡа тулыһынса тап килә тип әйтеп булмай, сөнки йәмғиәт менән дәүләт мәнфәғәттәренең уртаҡлығына тоткарлыҡ итеүсе сәбәптәр бар. Иң беренсе сәбәптәрҙең береһе, минеңсә, муниципаль идара өлкәһе өсөн махсус әҙерлек үткән кадрҙарға мохтажлыҡ. Ошо сәбәпкә ентекләберәк туҡталғы килә. Үҙегеҙ ҙә күреп тораһығыҙҙыр: бөгөн ауыл биләмәләре башлығы вазифаһы кеүек яуаплы был бурыс әүҙем рәүештә ҡатын-ҡыҙ иңенә ауҙарыла башланы. Ниндәй генә ауыл хакимиәтен алма - унда ҡатын-ҡыҙ башлыҡ булып ултыра хәҙер. Уларҙы, әлбиттә, бер нисә кандидатура араһынан бик һайлап, эш һәм кешелек сифаттарына ҡарап алаларҙыр, моғайын, сөнки уларҙың күпселеген дөйөм эш өсөн янып торған, эшлекле, дәртле кешеләр тип беләм. Мин, әлбиттә, ҡаршы түгел, рәте-теләге бар икән - эшләһен әйҙә, тик эшенән халыҡҡа ла файҙаһы булһын. Тик бына кисәге мәктәп директоры йә башҡа һөнәр эйәһенән компетентлы муниципаль етәксе дәрәжәһенә еткәнсе ни ғүмер үтеп китә бит. Әлбиттә, күп ауылдарҙа хәҙер ҡатын-ҡыҙ башлыҡтар ысын мәғәнәһендә уңған хужабикә генә түгел, ә һәләтле ойоштороусы ла икәнлеген күрһәтеп өлгөрҙө. Ә шулай ҙа муниципаль органдар эше - һалым йыйыу менән ойоштороу - мәҙәни саралар ғына түгел икәнлекте лә онотоп ебәрергә ярамай, был вазифаны "шоу-мен"лыҡҡа әйләндереп ебәреүҙән һаҡ булырға кәрәк. Халыҡ һеҙҙән эшлекле, етди аҙымдар ҙа көтә. Дәүләт властары алдында халыҡ мәнфәғәтен ныҡышмалыраҡ яҡлау, урындағы үҙидаралыҡ органдарының шәхси килемле нигеҙен булдырыу юлы менән абруйын һәм статусын күтәреү, дәүләт власының федераль һәм төбәк органдарынан кәмһенеүле финанс бәйлелектән мөмкин тиклем азат булыу юлдарын да ҡайғыртыу кәрәктер бөгөн, тигән фекерҙәмен.

***Айгөл БАЙРАМҒОЛОВА, Баймаҡ районы Темәс ауыл биләмәһе башлығы:*** Элек тә шулай булды, бөгөн дә: ауыл кешеһе үҙен борсоған ниндәйҙер мәсьәләне асыҡлау, уны хәл итеү йә берәй төрлө ярҙам, кәңәш алыу өсөн урындағы төп үҙидаралыҡ органы булып торған ауыл хакимиәтенә, йәғни беҙгә килә. Һәм беҙҙең уны яуапһыҙ сығарып ебәрергә хаҡыбыҙ юҡ, сөнки урындағы үҙидаралыҡ органдары ул ысын мәғәнәһендә халыҡ мәнфәғәттәрен яҡлаусы, халыҡ иркен һәм ихтыярын сағылдырыусы башҡарма орган. Беҙҙең Темәс биләмәһе - районда иң ҙуры, ул үҙе менән бергә яҡын-тирәләге һигеҙ ауылды: Ишей, Бетерә, Әмин, Күнзавод, Һаҡмар, Үрге һәм Түбәнге Таһир ауылдарын берләштерә, унда барлығы 7420 кеше йәшәй. Биләмәбеҙ ҙур, проблемаларыбыҙ күп, тип бойоғоп ултырмайбыҙ былай. Әлегәсә, республика Башлығы Р. Хәбиров әйтмешләй, "Күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй", тибеҙ ҙә тотонабыҙ бергәләп. Был йәһәттән мин һәр эшебеҙҙә лә таянысыбыҙға әйләнгән Ир-егеттәр ҡоро эшмәкәрлеген билдәләп китергә теләйем, сөнки бөгөн ауылдарҙа көнүҙәк мәсьәләгә әйләнгән айыҡлыҡ өсөн көрәшкә тап улар бер төптән күтәрелеп сыҡты. Ауылдарҙа йәшертен рәүештә арзан һәм сифатһыҙ алкоголле эсемлек, көмөшкә эшләп һатып ятыусы намыҫһыҙ әҙәмдәрҙең өйҙәренә барып, фаш итеп, исемдәрен "Ҡарғыш таҡтаһы" на индереп, былдай аҫтыртын яуызлыҡҡа сиҡ ҡуйырға тырышып йөрөгән Ир-егеттәр ҡоро агзаларының тырышлығы баһалап бөткөһөҙ, рәхмәт уларға! Әле бына улар таш сығарыу буйынса рәхсәтһеҙ карьерҙарҙы ла ныҡлы контролгә алды. Ир-егеттәребеҙ ҡыш буйы үҙ транспортында карьерҙарға рейдтар яһап, уның тейелгеһеҙлеген тәьмин итеп торҙо. Был йәһәттән беҙгә район прокуратураһы ныҡ ярҙам итә: закон боҙоусыларға ҡаршы нисек итеп хоҡуҡи нигеҙҙәргә таянып көрәш алып барыу юлдарын өйрәтә. Башҡа проблемаларҙы ла коллегиаль рәүештә хәл итергә тырышабыҙ.

Ауылда бөгөн йылҡы аҫрауселар күбәйеп китте. Ҡырҙа үҙ иркенә йөрөгән йылҡы малы, үкенескә, сәсеүлектәр һәм сабынлыҡтарҙы, кешеләрҙең пай ерҙәрен тапай, юҡҡа сығара. Шунлыҡтан, ауылдарҙа сход йыйылыштары үткәрелеп, аттарҙың хужаларына малдарын ауыл биләмәләренән алыҫҡараҡ алып китеп, өйөрҙәренә көтөүселәр тәғәйенләү бурысы йөкмәтелде. Ауылдарҙы төҙөкләндереү буйынса ла эштәр бара. Ошоға тиклем беҙҙә бер генә мәктәп ине, Темәстең "Леспромхоз" тип йөрөтөлгән бистәһендә 90 урынлыҡ мәктәп, спортзал асылды, төҙөләш ойошмалары менән килешеүҙәр нигеҙендә юлдар төҙөкләндерелә, күперҙәр һалына. Башҡортостан Республикаһы автономияһының 100 йыллығына Темәстә Еңеү аллеяһы асырға йыйынабыҙ, 1420 гектар ерҙә ағас ултыртыласаҡ.

Һуңғы осор ауылдарыбыҙ халҡы шәхси хужалығында мал аҫрауға дәртен һала. Ә мал һуйыу өсөн 60 саҡрымдағы район үҙәгенә барып йөрөү бик яйһыҙ һәм сығымлы. Шуға күрә хәҙер үҙебеҙҙә мал һуйыу пункты булдырыу буйынса эш алып барыла. Был да халыҡ мәнфәғәтен яҡлауҙы талап иткән мәсьәләләрҙең береһе бит.

Эйе, заманыбыҙ урындағы үҙидаралыҡ органдарына бөгөн матди-финанс йәһәттән табышлыраҡ эшләү юлдарын эҙләү бурысын да йөкмәтмәксе. Әлегә беҙ был йәһәттән урындағы әүҙем эшҡыуарҙарыбыҙға таянырға тырышабыҙ, ә улар, шөкөр, һынатмай. Әлеге көндә Темәс ауыл биләмәһендә 26 пилорама эшләп тора һәм хакимиәт һәр төрлө ойоштороу-мәҙәни сараларында уларҙың эскерһеҙ ярҙамына иҫәп тота ала, тип ышанысла әйтәм.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров указы менән Башҡортостандың 42 районында ужымдың һәләк булыуы сәбәпле 29 апрелдән 19 майға тиклем ғәҙәттән тыш хәл режимы индерелде. 30 майға тиклем республиканың Ауыл хужалығы министрлығы Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығына культураларҙың һәләк булыуынан килгән зыян һәм уларҙы үҫтереү өсөн сығым тураһында документтар тапшырырға тейеш, тиелә документта.

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Өфөлә төрки телле театрҙарҙың VI "Туғанлыҡ" халыҡ-ара фестивален үткәреү тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. 23-30 майҙа республиканың баш ҡалаһына Башҡортостандан, Татарстандан, Әзербайжандан, Ҡаҙағстандан, Ҡырғыҙстандан, Тыванан, Ҡырымдан, Хакасиянан, Төркиәнән, Үзбәкстандан, Алтайҙан һәм Ғағаузиянан төп театр коллективтары йыйыла. Фестиваль барышында халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция үткәреү, уның материалдары буйынса мәҡәләләр йыйынтығын сығарыу күҙаллана.

✓Мәскәүҙең Шереметьево аэропортында "Аэрофлот" компанияһының Мәскәү-Мурманск рейсын башҡарған Мостай Кәрим исемен йөрөткән Superjet 100 самолетында янғын сыҡҡан. Бынан алда самолеттың һауала йәшен һуғыу сәбәпле, экипаждың аэропортҡа кире ҡайтырға хәл итеүе хаҡында хәбәр ителде. Һауа судноһын ултыртҡан саҡта ҙур көс менән ергә һуғылып, янғын сыға. Бортта 73 пассажир һәм биш экипаж ағзаһы булған, 41 кешенең ғүмере өҙөлгән.

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Шереметьево аэропортындағы авиафажиғәлә һәләк булғандарҙың ғаиләләренең, туғандарының һәм яҡындарының ҡайғыһын уртаҡлашты.

✓Рәсәйҙә бушлай һәм иркеле диспансерлаштырыуҙың яңы ҡағиҙәләре үҙ көсөнә инде, тип яҙа федераль киң мәғлүмәт саралары. Хәҙер 40 йәше тулған һәр кем йыл һайын диспансерлаштырыу үтергә мөмкин, уларға онкология сирҙәрен иртә асыҡлау өсөн скрининглар тәғәйенләнә. 18-39 йәшлектәр өсөн өс йылға бер тапҡыр уҙғарыу тәртибе һаҡлана, ләкин улар йыл һайын профилактик медицина тикшереүе үтергә хоҡуҡлы. Ҡануниәт эш биреүсенең хеҙмәткәргә диспансерлаштырыу үтеү өсөн бер көн бирергә тейешлеген күҙ уңында тота.

ИШАРА

**Мин кешелек тарихы ике ҙур эпоханан тора, тип иҫәпләргә баҙнат итәм. Уның тәүгеһе Ерҙә әҙәм заты барлыҡҡа килгәндән һуң күпме дауам иткәндер, аныҡ ҡына билдәләп тә булмай, әммә тап боронғо кешеләрҙең яҙма тел уйлап табыуы менән бергә цивилизация тип атап булырҙай яңы дәүер башлана. Аралашыу, һөйләү теленән айырмалы рәүештә, яҙма тел өр-яңы сифатҡа эйә, ул кешеләр танып белгән бар нәмәне мейе ҡабынан тышҡы матди мөхиткә сығарып, быуындан-быуынға тапшырып булырҙай итеп, теркәп ҡуйыу һәм күп быуаттар буйы һаҡлау мөмкинлеген бирә. Әйткән һүҙендә яҙма билдәләргә әйләндереү мөмкинлеген асҡан тәү кешене мин кешелектең бөйөк революционеры, тип атар инем.**

# УҠЫЙҺЫҢ ИКӘН,

## тимәк… фекерләйһең



Әбйәлил районы Рәхмәт ауылы ағинәйҙәре "Киске Өфө" уҡый.

Яҙыу тигән төшөнсә нисек боронғо булһа, уның менән йәнәш торған уҡыу ҙа шулай: яҙғанды уҡып булмай икән, унан бер фәтүә лә юҡ бит. Уҡыу-яҙыу булғас, уға өйрәтеүселәр - уҡытыусылар ҙа кәрәкле булып, улар йәмғиәттең бик абруйлы ҡатламын, хәҙергесә әйткәндә, тәү быуын интеллигенцияһын барлыҡҡа килтергән. Шулай итеп, уҡыу-уҡытыу даирәһе, киңәйгәндән-киңәйә барып, кешеләрҙең, тотош йәмғиәттең йәшәйеш торошон, үҫешен тәьмин итеү өсөн төп шарттарҙың береһенә әйләнгән.

Тәүҙәрәк уҡыу уҡый-яҙа белергә өйрәнеү менән генә сикләнһә, был төшөнсә бөгөн белем алыу, төрлө һөнәрҙәргә өйрәнеү, аң ҡеүәһен үҫтереү, төплө һәм ижади фекерләү мөмкинлегенә эйә булыуҙы аңлата. Тормошобоҙҙо уҡыуҙан, йәмғиәт һәм дәүләтебеҙҙе уҡыу-уҡытыу өсөн мөмкинлек тыуҙырған мәғарифтан башҡа күҙ алдына килтереп булмай. Боронғосараҡ әйтһәк, уҡымышлы шәхестәрҙән торған йәмғиәт кенә бөгөнгө халыҡ-ара конкуренция көсәйеп, бер үк ваҡытта глобалләшеү процестары барған осорҙа ил һәм милләттәргә үҙ-үҙен һаҡлап ҡала алыу мөмкинлеген бирә.

Бөгөн илебеҙҙә уҡыу хәлдәре нисегерәк тора һуң? Ни эшләп ошо кеше аңын, уның шәхесен биҙәп, уны мәҙәни бейеклеккә күтәрә ала торған уҡыуға, белемгә ынтылыш көсө кәмегәндән-кәмей бара? Ошондай һорауҙар бер мине генә борсомайҙыр ул. XIX быуатта йәшәгән мәғрифәтсебеҙ Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк, арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк" тигән саҡырыуы көн талабына әйләнгәндәй тойола миңә. Буш һүҙ булмаһын, тиһәк, бер-ике миҫал килтерәйек. Хәҙерге заман урта мәктәбен тамамлап, эшкә инер өсөн өлгәнән күсереп (!) ғариза яҙған бер егетебеҙ ошо ҡағыҙ киҫәгендәге ике һөйләмдә биш-алты хата ебәргән. Үҙ күҙем менән күрмәһәм, ышанмаҫ та инем. Наполеонды немец генералы тип белеүселәр ҙә юҡ түгел бөгөн. Бындай осраҡтарҙы иҫәпләп-һанап, осона сығырлыҡ та түгел. Ысынлап та, ун - ун бер йыл буйы мәктәп парталары артында ултырып та, йәштәребеҙҙең ҙур бер өлөшө тома наҙан ҡала түгелме һуң? Был һығымта менән, бәлки, килешеп тә булмаҫ ине, әммә ысынбарлыҡты матурлап-биҙәп кенә яҡшыртып булмай шул. Мәктәптәрҙә уҙғарылған Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре шаҡ ҡатырырлыҡ насар булһа ла, ошоно күрмәмеш тә белмәмеш булыусылар (ә ундайҙар мәғариф системаһында эшләүселәр араһында ла бихисап) бер ниндәй анализ һәм һығымталар эшләргә ашығып бармай.

Бөтә нәмә сағыштырыу аша дөрөҫ баһалана, тиҙәр. Уҙған быуатта, хәҙерге осорҙа яманаты сығарылған совет дәүерендә, мәғариф мәсьәләләрен ил етәкселеге иғтибар үҙәгенән ысҡындырманы, уҡыу-уҡытыу торошон көйләү, уның сифатын күтәреү өсөн мәғариф хеҙмәткәрҙәре күп көс һалды. Һөҙөмтәлә быуат башында халҡы ярым наҙан булған ил 40-50 йыл эсендә атом серҙәрен аса алып, йыһан киңлеген үҙләштерә алырлыҡ ҡеүәтле индустрияһы һәм, иң мөһиме, донъя кимәлендә танылыу тапҡан ғалимдары булған алдынғы державаға әйләнде. Был үҙе үк мөғжизәгә тиң ине.

Уйлап ҡараһаң, ул ваҡытта мәктәптәр һәйбәт йыһазландырылмаған, уҡыу әсбаптары ла етешмәгән, техник саралардан микроскоп-фильмоскоптан башҡа әллә ни булмаған, электроника хыялда ғына йөрөгән заман булған бит инде. Ә һөҙөмтәләр - иҫ китерлек! Мин шәхсән ошоға сәбәп итеп тик бер генә нәмәне күрһәтер инем. Ул - уҡыу, һәм уҡыуға ынтылыу. Хәтерегеҙҙәлер: ул саҡтарҙа үҙенә кәрәкле һәйбәт китапҡа эйә булыу өсөн кеше ваҡытын да, аҡсаһын да һис йәлләмәҫ булды. Хатта илдә үҙенә күрә китап ҡытлығы булды, тип тә әйтергә була. Студент сағымда тик алдан яҙылыу буйынса ғына һатыуға сығарылған махсус баҫмаға эйә булыр өсөн (яҙылыусыһы килеп алмаған осраҡта) ун биш көн буйына Мәскәүҙең бер китап магазинына барып йөрөгәнем хәтерҙә ҡалған. Китап уҡыу ошо замандың иң күркәм сифаттарының береһе булды. Советтар Союзы халҡы рәүештә китап уҡыусылар иле, тип нарыҡланды.

Хәҙер мәғлүмәт сығанаҡтары элеккеләре менән сағыштырырлыҡ түгел, әлбиттә. Интернетта йөҙөп йөрөп, йәнеңә ни теләйһең, шундай мәғлүмәтте "һә" тигәнсе табырға була. Әммә... әммә наҙанлыҡ ҡайҙан килә һуң?

Минеңсә, кеше мәғлүмәтте төрлөсә үҙләштерә, сөнки ул төрлө формаларҙа һәм төрлө ысулдар менән бирелә. Телевидениенан, радионан тапшырыла торғандары махсус рәүештә эшкәртелеп, кешелә мотлаҡ билдәле бер эмоциональ кисереш булдырыу нигеҙендә ҡорола. Дөрөҫөн әйткәндә, бында кеше мейеһен, уның аңын билдәле бер мәғлүмәти программаға көйләү барлыҡҡа килә, мин быны телебәйлелек, тип атар инем. Күптәрегеҙ иғтибар иткәндер: беҙҙә бимазалаған телевизион реклама хатта кескәй генә балаларҙың иғтибарын тулыһынса үҙенә йәлеп итә алыу көсөнә эйә. Телевидение аша беҙҙең менән марионеткаларҙай идара итәләр, беҙ ошоно аңлап ҡына еткермәйбеҙ...

Ә уҡыуға килгәндә, бында бөтөнләй икенсе механизмдар әҫтөнлөк итә. Иң мөһиме, һин был процесс менән үҙең идара итәһең. Телевизор ҡарағанда кешене хис-кисереш биләһә, китап уҡығанда фекерләү процестары әүҙемләшә. Тап шуның өсөн дә беҙ уҡығанда ваҡыты-ваҡыты менән пауза эшләйбеҙ, уҡылғанға кире әйләнеп ҡайтабыҙ һ.б. Кемделер тыңлағанда кеше пассив позицияла булһа, уҡыу барышында ул үҙ-үҙе менән эстән генә идара итә, уға эске әүҙемлек хас була. Бына ошолар уҡыу процесының кеше аңын үҫтереү өсөн үтә файҙалы булыуын күрһәтеп тора.

**Әйткәндәй, гәзит-журнал уҡыусылар ҙа ныҡ һирәгәйҙе арабыҙҙа. Был беҙҙең мәҙәни хәлләтебеҙҙе түбәнәйтеп, әле бөйөн ителгән эске торошобоҙҙо фәһемле мәғлүмәт менән байытыу мөмкинлегенән мәхрүм итә. Китап, гәзит-журнал уҡып үҫмәгән балаларҙың аң ҡеүәһе аҡрын үҫешә икәнлеген дә ололарға онотorға ярамаҫ ине. Үҙегеҙ гәзит-журналдарға яҙылып, даими уҡый барып, балаларығыҙға кескәй саҡтарынан уҡ өлгө булыу зарур. Уҡыу менән бәйле ошо уй-фекерҙәремде туғантыумасаларығыҙға, дуҫ-иштәрегеҙгә, таныш-белештәрегеҙгә "Киске Өфө" гәзитен алдырып уҡыуҙың да ни тиклем файҙалы һәм фәһемле булыуын аңлатһағыҙ ине, тигән саҡырыу менән тамамлайым.**

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Ветеринар һәм фитосанитар күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт белгестәре Хәйбулла районы баҫыуҙарында 3,3 мең гектарҙы тикшереү һөҙөмтәһендә ҡара синерткәнең иҫән ҡалыу мөмкинлеге 40 процент тәшкил итеүен асыҡлаған. 75 гектарҙа ҡороткостоң ҡарышлауығы табылған. Ҡара синерткәнең үрсеүе һауа шарттарына бәйле. Ҡороткос эҫене һәм ҡоролоҡто ярата, яуым-төшөмһеҙ осорҙан һуң бер-ике йыл үткәс, уларҙың күбәйеүе күҙәтелә.

✓Башҡортостанда 15 майҙа билдәләнгән Халыҡ-ара ғаилә көнөндә эш көнөн ҡыҫҡартыу тәжрибәһен дауам итергә ниәтләйҙәр. Республиканың ғаилә һәм хеҙмәт министры вазифаһын башҡарыусы Юрий Мельников, Башҡортостандың Профсоюздар федерацияһы рәйесе Марат Хөсәйенов һәм Эш биреүселәр союзы рәйесе Владимир Шолом ҡул ҡуйған мөрәжәғәт эш бирeүселәргә ебәрелгән. Мәғлүмәткә ярашлы, был сара ғаиләле хеҙмәткәрҙәрҙең эш көнөн бер сәғәткә ҡыҫҡартыуҙы күҙ уңында тота.

✓Сибайҙа һуңғы 30 йылда тәүге тапҡыр Мария һәм Денис Ивановтарҙың ғаиләһендә өс игеҙ бала донъяға килгән. Сибай ҡалаһының ЗАГС бүлегендә һуңғы өс игеҙ бала 1989 йылда теркәлгән, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитетында. 2019 йылдың башынан Башҡортостанда бөтәһе өс тапҡыр өс игеҙ бала тыуыуы теркәлгән.

✓Башҡортостан Хөкүмәте 30 апрелдән республикала янғынға ҡаршы махсус режим индереү тураһында ҡарар ҡабул итте. Бойороҡта уның 2019 йылдың 13 майына тиклем дауам итеүе тураһында әйтелә. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының рәсми сайтында талаптар, тыйыуҙар һәм боҙоуҙар хаҡында хәбәр ителә. Төрлө статьялар буйынса, янғында ғәйепләләр 2 меңдән алып штраф йәки 90 тәүлеккә тиклем ҡулға алына.

✓Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты президиумы ултырышында оҙаҡ йылдар дауамында мөфтиәткә етәкселек иткән Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының үҙәк дини ойошмаһы рәйесе Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин рәсми рәүештә вәкәләттәрен һалды. Хәбәр итеүҙәренсә, рәйес вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп мөфтөй урынбаҫары, имам Айнур хәҙрәт Биргәлин һайланды. Республикала 1 300 мосолман мәхәлләһенең 737-һе Башҡортостан мосолмандарының Диниә назаратына ҡарай.

✓ Ғәмәлдәге нормаға ярашлы, бер нисә шартты үтәгәндә, шәхси участкала һыуҙы бушлай файҙаланырға мөмкин. Бының өсөн скважинаның тәрәнлеге - 30 метрҙан, ә сығарылған һыуҙың күләме 100 кубометрҙан артмаҫҡа тейеш.



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҒАРИЗА БИР!

**Дәүләт Думаһы депутаттары "Ер аҫты байыҡтары тураһында"ғы законға төҙәтмәне ҡабул итте. Уға ярашлы, баҡсасылыҡ ширҡәттәре һәм коммерцияға ҡарамаған ойошмалар 2020 йылдың 1 ғинуарына тиклем тейешле ғариза биреп, бушлай лицензия алһа, ер аҫты һыу сығанаҡтарын файҙаланған өсөн һалым түләүҙән азат ителә.**

Ошо датанан һуң ширҡәткә лицензия алыу мәжбүригә әйләнә, сөнки, законға ярашлы, ер аҫты байлыҡтарын файҙаланған өсөн түләргә кәрәк. Хәҙер ер аҫты һыуҙарын көнкүреш маҡсатында ҡулланыу өсөн лицензия 7,5 мең һум тора, ул 25 йыл ғәмәлдә була. Ғәмәлдәге нормаға ярашлы, бер нисә шартты үтәгәндә, шәхси участкала һыуҙы бушлай файҙаланырға мөмкин. Бының өсөн скважинаның тәрәнлеге - 30 метрҙан, ә сығарылған һыуҙың күләме 100 кубометрҙан артмаҫҡа тейеш (әгәр был һыу эшҡыуарлыҡ өсөн тотонолмаһа). Әгәр баҡсасылыҡ ширҡәттәре 2020 йылдың 1 ғинуарына тиклем ошо алымдан файҙалып өлгөрһә, мәсьәлә оҙаҡ йылдарға хәл ителә. Юҡ икән, ширҡәт, ҡатнашыусыларҙан аҡса йыйып, лицензия алырға тейеш.

# ҠАСЫП КИТМӘ!

**Рәсәй Президенты Владимир Путин юл-транспорт ваҡиғаһы урынынан ҡасҡан водителдәрҙең енәйәт яуаплылығын көсәйтеү тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы.**

Әгәр аварияла кешеләр зыян күрһә, ҡасҡан водителгә 3 йылға тиклем мәжбүри эштәр тәғәйенләнә йәки ул 4 йылға тиклем иркенән мәхрүм ителә. Кешенең ғүмере өҙөлһә, уның 2-7 йылға ирекtән мәхрүм ителеүе мөмкин. Һәләк булыусылар икәүҙән күберәк икән, 4-9 йылға тиклем ирекtән мәхрүм ителеү янай. Быға тиклем авария урынынан ҡасҡан өсөн 1-1,5 йылға водитель танытмаһын тартып алыу йәки 15 тәүлеккә тиклем административ ҡулға алыу ҡаралғайны. Элегерәк Дәүләт Думаһына иҫерек килеш үлемесле юл фажиғәләренә килтергән өсөн 15 йылға тиклем ирекtән мәхрүм итеү тураһында закон проекты индерелде. Документ авторҙары бындай аварияларҙы аңлы рәүештә кеше үлтереүгә тиңләргә тәҡдим итте. Ҡәтғи сара иҫерек водителдәр ғәйебе менән юл-транспорт һәләкәте ҡорбандарын кәметер тип көтөлә.

# ИМТИХАНДАР ЕТӘ...

**2019 йылға Берҙәм дәүләт имтиханы, төп дәүләт имтиханы һәм дәүләт сығарылыш имтиханы теҙмәләре раҫланды.**

Быйыл Берҙәм дәүләт имтиханы өс этапта уҙғарыла: ваҡытынан алдағы (20 марттан 10 апрелгә тиклем), төп (27 майҙан 1 июлгә ҡәҙәр) һәм өҫтәмә (3-20 сентябрҙә). Имтихан осорҙарының һәр береһендә резерв көндәр ҡаралған. Документтар менән раҫланған һәм дәүләт имтихан комиссияһы ҡарарына тап килгән етди сәбәптәр булһа ғына Берҙәм дәүләт имтиханын икенсе ваҡытта тапшырырға рөхсәт ителә. Резерв көндәрҙә рус теленән һәм математиканан йәки ҡабаттан ошо фәндәрҙең береһенән насар билдә алған сығарылыш уҡыусылары база кимәлендәге рус теле һәм математика буйынса Берҙәм дәүләт имтиханын өҫтәмә (сентябрь) осорҙа бирергә тейеш. Туғыҙынсы кластар өсөн төп дәүләт имтиханы ла өс этапта үткәрелә: ваҡытынан алдағы (22 апрелдән 14 майға тиклем), төп (24 майҙан 2 июлгә ҡәҙәр) һәм өҫтәмә (3-21 сентябрь).

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЮЛДАР, ЮЛДАР...

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Транспорт сәғәте"ндә республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетына Өфө - Аэропорт автомобиль юлын төҙөкләндереүгә бәйле хәлде асыҡларға ҡушты.**

Уның һүҙҙәренсә, баш ҡалала йәшәүселәр был трассаның торошо һәм унда даими барлыҡҡа килгән тәгәрмәс эҙҙәре буйынса тулыһынса нигеҙле һорау бирә. Республика етәксеһе киләһе кәңәшмәлә юлдың әлеге участкаһын ремонтлау өсөн күпме аҡса тотонолғаны, төҙөкләндереү менән шөғөлләнгән ойошмаларҙың етәкселәренә ҡарата ниндәй административ йәки башҡа саралар күрелгәне тураһында еткерергә, шулай уҡ асфальт-бетон япмаһына лаборатор анализ үткәрергә һәм подрядсының Өфөнө аэропорт менән бәйләгән автомобиль юлында ниндәй эштәр башҡарырға ниәтләүе хаҡында һөйләргә ҡушты.

"Башинформ" агентлығы хәбәр иткәнсә, ағымдағы йылда Өфө - Аэропорт автомобиль юлын төҙөкләндереүгә 291,8 миллион һум тотоноу күҙаллана. Әле унда ЮХХДИ ҡушыуы буйынса юлдағы тәгәрмәс эҙҙәрен бөтөрөү өсөн асфальттың өҫкө ҡатламын алалар. Юлсылар ремонт эштәрен 13 майҙа башларға ниәтләй. 2017 йылда Өфө властары дәүләт һатып алыуҙары сайтында Өфө - Аэропорт трассаһын төҙөкләндереүгә хаҡы 143 миллион һумлыҡ заявка урынлаштырҙы. Техник эшкә ярашлы, подрядсы Салауат Юлаев проспектынан алып М-5 "Урал" автомобиль юлына тиклем юл участкаһын ремонтларға, шулай уҡ юлсылар Ағиҙел күперендәге асфальтты яңыртырға тейеш ине. Бынан алда Башҡортостандың киң мәғлүмәт саралары 2012-2015 йылдарҙа Өфө - Аэропорт трассаһын ремонтлауға 1,5 миллиард һум самаһы аҡса бүленеүе тураһында яҙып сыҡты. Һуңғы ете йылда юлдың ошо участкаһына яҡынса 2 миллиард һум тотонолған.

# ЙӘШТӘР ХӨКҮМӘТЕ ТӨҘӨЛӘ

**10 июндә Башҡортостандың Йәштәр хөкүмәтенә һайлап алыу өсөн ғаризалар ҡабул итеү башлана.**

Кандидаттарҙы һайлап алыуҙы Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы ойоштора. Ул ике этапта уҙғарыла - ситтән тороп (проекттар конкурсы) һәм шәхси осрашыу. Конкурста Башҡортостанда даими йәшәгән 18-30 йәшлек граждандар ҡатнаша ала. Мотлаҡ шарт - кандидат дәүләт йәки муниципаль хеҙмәттә тормаҫҡа тейеш. Ғариза биреү өсөн Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығына (Өфө, Ленин урамы, 10) ғариза, үҙең хаҡында мәғлүмәттәр, 3х4 фотоһүрәте менән тултырылған анкета, проект (талаптарға ярашлы башҡарылған), паспорт, белем тураһында документ күсермәһен, уҡыған йәки эшләгән урындан белешмә, хөкөмгә тарттырылмау тураһында документ, наградалар, дипломдар күсермәһен һәм шәхси мәғлүмәттәрҙе эшкәртеүгә ризалыҡ ҡалдырырға кәрәк. Еңеүселәрҙе республиканың дәүләт власы органдары, йәмәғәт берләшмәләре һәм йәштәр ойошмалары вәкилдәренән торған конкурс комиссияһы билдәләй. Икенсе этап әңгәмәләшеү һәм проектты яҡлау форматында уҙғарыла. Тулыраҡ мәғлүмәт менән положениела танышырға мөмкин. Иң күп балл йыйған 19 ҡатнашыусы Йәштәр хөкүмәтенә ағза итеп алына. Шулай уҡ кандидаттарҙың резерв исемлеге төҙөлә. Йәштәр хөкүмәте йәштәрҙең башланғыстарын хуплау, уларҙы сәйәси һәм иҡтисади мәсьәләләрҙе хәл итеүгә ылыҡтырыу, власть структуралары өсөн кадрҙар әҙерләү өсөн ойошторола.

# ГРАНТТАР КЕМГӘ?

**Башҡортостан Башлығының дәүләт һәм республика халыҡтары телдәрен һаҡлауға, үҫтереүгә йүнәлтелгән гранттары конкурсын үткәреү буйынса комиссия 2019 йылғы еңеүселәрҙе иғлан итте.**

Мәҙәниәт министрлығы сайтында хәбәр ителеүенсә, 31 проект дәүләт ярҙамына лайыҡ булды. Грант ярҙамы менән "Мосафир" этник музыка форумы, "Һаумы, һаумы, әкиәт!" донъя халыҡтары әкиәттәрен йәш башҡарыусыларҙың төбәк-ара конкурсы, Балаҡатай районында халыҡ байрамдары һәм йолалары фестивале, милли туй йолалары республика фестиваль-конкурсы һәм башҡа проекттар ойошторола. Республиканан ситтә Ҡоролтай Башҡорт мәҙәниәте һәм мәғарифы көндәрен уҙғара.

Өфө районының Ҡыҙыл Яр ауылы мәктәбе профилле лингвистик лагерҙың тәжрибә майҙансығында "Рус телен туған тел итеп уҡытыуҙың этномәҙәни аспекты" тигән сара үткәрелә, Мордва милли-мәҙәни үҙәге мордва халҡының күренекле мәғрифәтсеһе Авксентий Юртовҡа арналған сара әҙерләнә. Заманса мәғариф проекттары айырыуса ҡыҙыҡһыныу уята. Улар - "Балалар" өйрәтеүсе интернет-порталы, башҡорт телен үҙаллы өйрәнеү өсөн "Интерактив башҡорт теле" веб-ресурсы, Android платформаһында башҡорт телендәге һүҙҙәрҙе иҫтә ҡалдырыу һәм өйрәнеү өсөн мобиль ҡушымта. Грант аҡсаһына "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрендә һуҡырҙар өсөн мультителле аудиокитаптар", "Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары: тел, тарих, мәҙәниәт" фәнни-популяр китаптар серияһын сығарыу күҙаллана.

# ТОРАТАУ ҺАҠЛАНА

**Башҡортостанда республика әһәмиәтендәге алты тәбиғәт ҡомарткыһы, шул иҫәптән Торатау һәм Йөрәктау өсөн һаҡлау зоналары булдырыла.**

Тейешле ҡарар проекты Башҡортостандың Экология министрлығында баҫылған, документҡа экспертиза үткәрелә. Шулай уҡ Охлебинин мәмерйәһе (Иглин районы), Ҡарлыман мәмерйәһе һәм Оло Ҡалпаҡ ҡаяһы (Ҡырмыҫҡалы районы), Туғар-Һалған күле (Торатау итәгендә урынлашҡан, Ишембай районы) һаҡлауға алына. Ведомствола әйтеүҙәренсә, һаҡлау зонаһында һәр төрлө производство эшмәкәрлеге һәм сүп-сар ҡалдырыу, ә күлдә малға һыу эсереү тыйылған. Бынан тыш, Торатау тирәләй ташҡа әүерелгән ҡалдыҡтар, гербарийҙар өсөн үҫемлектәр һәм энтомологик коллекцияларға бөжәктәр йыйырға, Йөрәктау янында мал көтөргә ярамай.

# НИҢӘ ТЫУЫМ АҘ?

**Башҡортостанда әлеге ваҡытта алты мең пар түлһеҙлек буйынса иҫәптә тора. Ошо осраҡтарҙың яртыһында ир-егеттәрҙең репродуктив функцияһы боҙолоуы сәбәпсе.**

Башҡорт дәүләт медицина университетының баш табибы урынбаҫары Рита Вәлиева һөйләүенсә, тыуым кәмей бара, статистикаға ярашлы, республикала һуңғы өс

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө хакимиәтендә 6 майҙа йылытыу миҙгелен тамамлау тураһында ҡарар ҡабул ителде. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, әлеге йылытыу миҙгеле 28 сентябрҙә башланды. Нормативтарға ярашлы, кәмендә биш көн уртаса тәүлек температураһы +8 градустан юғарыраҡ булһа, йылы биреү туҡтатыла.

✓11 майҙа, Өфөнөң "Аҡбуҙат" ипподромында "Терра Башҡортостан" ат-спорт турнирының өсөнсө этабы уҙғарыла. Ярышта Бөрйән, Дүртөйлө, Ейәнсура һәм Саҡмағош райондарынан иң оҫта жокейҙар ҡатнаша. "Терра Башҡортостан" турниры этаптары октябргәсә дауам итә, унда бөтә 54 район да ҡатнашырға тейеш. Финал 2019 йылдың 11 октябрендә була - ул Башҡортостан Башлығы призына жокейҙар чемпионаты итеп уҙғарыла.

✓Өфөлә В.И.Ленин исемендәге майҙанда фонтан төҙөлөшө дауам итә. Ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, конструкцияны монтажлау эштәре тамамланған, һыу, электр менән тәьмин итеү системаһы тәртипкә килтерелгән. Хәҙер ҡала хеҙмәттәре биләмәне төҙөкләндереү менән шөғөлләнә. Вандализм осраҡтарын булдырмау өсөн видеокүҙәтеү системаһы ҡуйыла. Фонтанды Ҡала көнөндә - 12 июндә асыу күҙаллана.

✓Ҡатын-ҡыҙҙар хоккейы буйынса донъя чемпионатын 2021 йылда Өфөлә үткәреү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров "Ағиҙел" командаһы етәкселеге һәм хоккейсылары менән осрашыуҙа ошо турала хәбәр итте. Чемпионатты үткәреү ихтималлығы уҙған йылда уҡ, "Ағиҙел" тарихта тәүге тапҡыр Ҡатын-ҡыҙҙар хоккей лигаһының төп трофейын яулағас, тикшерелгәйне.

✓Башҡортостанда Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 74 йыллығы уңайынан 37 мендән ашыу ветеранға Рәсәй Президенты Владимир Путиндан ҡотлау открыткаһы тапшырылды. Открыткалар 2-һенән 9 майға тиклем таратылды, тип хәбәр иттеләр Рәсәй почтаһының матбуғат хеҙмәтендә. Төп осорҙа открытка алмаған ветерандарға почта уларҙы почта элемтәһе бүлексәләрендә бер ай ятҡандан һуң ҡабаттан тарата.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *"Әле күп балалы ғаиләләр өсөн ипотека буйынса льгота бар, улар 6 процент түләй, ҡалғанын дәүләт субсидиялай. Ләкин льгота 3 йәки 5 йыл ғәмәлдә. Льгота ипотека кредитлауы осоронда ғәмәлдә ҡалһын тигән тәҡдим индерәм", - тине Путин.*



йылда был күрһәткес 12 процентҡа кәмегән. Сәбәптәре - бала тыуҙырыу йәшендәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың аҙайыуы, уларҙың үҙ-үҙен тотошоноң үҙгәреүе (Европа йоғонтоһо). Хәҙер Башҡортостанда гүзәл заттарҙың яртыһы беренсе балаһын 40 йәштәр тирәһендә таба. "Башинформ" агентлығының Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың һүҙҙәренә һылтанма менән хәбәр итеүенсә, 2018 йылда республикала 2012 йыл менән сағыштырғанда 13 меңгә аҙыраҡ сабый тыуған. "Йәғни тотош тораҡ пункт юҡҡа сыҡҡан", - тип һығымта яһай төбәк етәксеһе.

Бөгөн властар демографик хәлде махсус программалар ярҙамында төҙәтергә тырыша. Рәсәй Президенты Владимир Путин әйткән милли проекттарҙа ҙур "Демография" блогы бар. Шулай уҡ илдә беренсе бала өсөн социаль түләүҙәр индереүҙәре ихтимал. Әлеге мәлдә икенсе һәм артабанғы балалар өсөн "Әсәлек капиталы" программаһы эшләй.

# ҺУҢҒЫ ҠЫҢҒЫРАУ

**Башҡортостанда быйыл сығарылыш кластары өсөн "Һуңғы ҡыңғырау"ҙар 23 (туғыҙынсылар өсөн) һәм 25 майҙа (ун беренселәр өсөн) яңғырай. Барлыҡ ҡала һәм райондарҙа 19 меңгә яҡын ун беренсе һәм 42 меңдән ашыу туғыҙынсы класс уҡыусылары өсөн байрам саралары ойошторола, тип хәбәр иттеләр Мәғариф министрлығында.**

Шәмбе, 25 майҙа, Өфөлә һигеҙенсе йыл рәттән "Яҙғы бал" уҙа. Башҡортостандың баш ҡалаһында мәктәп тамамлаусылар байрамын, гәҙәттәгесә, Совет майҙанында ҡаршылайҙар. 23 һәм 25 майҙа - "Һуңғы ҡыңғырау" уҙғарылған көндәрҙә - Башҡортостан магазиндарында алкоголь һатыу тыйыла. Был тыйыу республика биләмәһендә 2017 йылдан алып ғәмәлдә. Уны боҙған өсөн штраф ҡаралған. Продукцияны тартып алыу йәки унһыҙ штраф вазифалы кешеләргә - 20-40 мең һум, юридик берәмектәргә 100-300 мең һум тәшкил итә. "Һуңғы ҡыңғырау" көнөндә спиртлы эсемлектәр һатыуҙы тыйыу профилактик маҡсатҡа эйә һәм үҙен тулыһынса аҡлай, тип иҫәпләй республика властары. Шуға бәйле, Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров республиканың теге йәки был районында һабантуй уҙғарылған көндә алкоголь һатыуҙы тыйырға тәҡдим итте.

# БӨРЙӘНДӘ...

**"Хевел" компаниялар төркөмө йыл аҙағына тиклем Рәсәйҙә энергия һаҡлағыстар менән ҙур гибрид ҡояш электр станцияһын төҙөй. Дөйөм ҡеүәте 10 МВт тәшкил иткән ҡояш генерацияһы Башҡортостандың Бөрйән районында була, тип хәбәр итеңә компанияның сайтында.**

Бөрйән ҡояш электр станцияһы селтәр менән параллель рәүештә лә, автономлы режимда ла эшләй. Шулай итеп, электр станцияһы бөтә районға электр энергияһы бирергә, ә аварияға өҙөү йәки электр тапшырыу линияһында ремонт эштәрен башҡарыу осрағында автономлы режимда дауахаṉаларҙы, мәктәптәрҙе, балалар баҡсаларын электр менән тәьмин итергә тейеш. Бынан алда компанияла Бөрйән проектына инвестициялар 800 миллион һумға баһаланды, станцияны 2020 йылда сафҡа индереү күҙалланды, тип хәбәр итә "Коммерсант-Башҡортостан" баҫмаһы. Һаҡлағыстарҙы иҫәпкә алып, проект 1 миллиард һумға тиклем ҡиммәтләнде. "Хевел" компанияһы Башҡортостанда Бүребай (ҡеүәте 20 МВт), Бөгөлсән (15 МВт), Иҫәнғол (9 МВт) станцияларын төҙөнө. Компания республиканың Хәйбулла һәм Көйөргәҙе райондарында тағы дүрт ҡояш электр станцияһы төҙөргә ниәтләй.

# УҠЫТЫУСЫЛАР КӘҢӘШЛӘШӘ

**Башҡортостанда 2019 йылдың 11-12 апрелендә Өфөлә үткән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезы йомғаҡтары буйынса зона конференциялары бара. Конференциялар башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына фәнни-методик ярҙам күрһәтеү, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезында ҡаралған көнүҙәк мәсьәләләрҙе һәм тәҡдимдәрҙе тикшереү өсөн уҙғарыла.**

7 майҙа башҡорт теле уҡытыусылары Өфөнөң 159-сы мәктәбенә йыйылды. Конференцияла ҡатнашыусылар һәм беренсе съезд делегаттары Радий Хәбировтың лингвистик гимназиялар асыу, Башҡортостан Башлығының "Туған тел" премияһын булдырыу, башҡорт телен өйрәнеү буйынса интерактив программалар әҙерләү тәҡдимдәрен һәм башҡа ҡыҙыҡлы идеяларҙы хуплауын белдерҙе. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереүҙең яңы концепцияһын әҙерләргә, белем биреү программаһының мотлаҡ өлөшөндә туған телде һәм әҙәбиәтте өйрәнеүҙе һаҡлап ҡалырға тәҡдим итте. Шулай уҡ Алдынғы уҡытыусы-методистар мәктәбен булдырыу, иң яҡшы уҡытыу методикаларын әҙерләгән алдынғы уҡытыусыларға грант ярҙамы күрһәтеү, тыуған яҡты өйрәнеү буйынса яңы уҡыу ҡулланмалары сығарыу хаҡында тәҡдимдәр яңғыраны. 35-се белем биреү үҙәгенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Эльза Толомбаева нисек башҡорт теле дәрестәрен ҡыҙыҡлыраҡ итеү тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Өфөләге 64-се гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гүзәлиә Һамарбаева тиҙҙән "Китап" нәшриәтендә урта һәм өлкән кластар өсөн башҡорт теленән яңы уҡыу ҡулланмалары донъя күрәсәге хаҡында әйтте.

6 майҙа Урал арьяғының башҡорт теле уҡытыусылары - Баймаҡ районының Темәс ауылына, төньяҡ-көнсығыш райондар иһә Дыуан районының Мәсәғүт ауылына йыйылды. Киләһе зона конференциялары 14 майҙа - Нефтекама ҡалаһында, 15 майҙа - Ҡырмыҫҡалы һәм Бәләбәй райондарында, 16 майҙа Стәрлетамаҡ ҡалаһында уҙа. Конференциялар башҡорт телен уҡытыу ойошторолған күрше төбәктәрҙә лә була. 26 апрелдә Башҡортостандың Мәғариф министрлығы делегацияһы Силәбе өлкәһендә булып ҡайтты, Ырымбур өлкәһендә конференция 21 майҙа үткәрелә.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЕТЕМДӘРГӘ...

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Опекундарға (попечителдәргә) баланы ҡарауға аҡса түләү тәртибе һәм күләме тураһында" республика законының 6-сы статьяһына үҙгәрештәр индереп, опекун ғаиләләрҙәге етем балаларҙың мәктәпте тамамлағанға тиклем пособие алыуға хоҡуғын нығытҡан тейешле закон ҡабул итте.**

"Закон етем балалар тәрбиәләнгән ғаиләләргә ҡарата социаль ғәҙеллек билдәләй, - тине республика парламенты спикеры Константин Толкачев. - Һүҙ, атап әйткәндә, ошондай ғаиләләргә ай һайын түләнергә тейешле аҡса тураһында бара. Әлеге ваҡытта ғәмәлдә булған ҡануниәткә ярашлы, әгәр 18 йәше тулған бала мәктәптә уҡый икән, был аҡса ағымдағы уҡыу йылы тамамланғансы түләнә. Ләкин етем балаларҙың унынсы класта уҡығанда уҡ балиғ булыу осраҡтары бар, өҫтәүенә, хәҙер мәктәптә белем биреү 10 йыл урынына 11 йыл дауам итә. Шуға ярашлы, бала ун беренсе класҡа еткәс, бындай ғаиләләр пособиеға хоҡуғын юғалта. Яңы закондың көсөнә инеүе ошо ғәҙелһеҙлекте бөтөрөргә тейеш. Аҡса бала мәктәпте тамамлағансы түләнә". Константин Толкачев билдәләүенсә, опекундарға һәм попечителдәргә аҡса ғариза яҙыу тәртибендә бирелә. Түләүҙең суммаһы даими индексациялана. Әлеге ваҡытта ул, район коэффициентын иҫәпкә алып, өс йәшкәсә балаға 6 350 һум һәм өс йәштән өлкән балаға 6 106 һум күләмендә билдәләнгән.

# ИНВАЛИД БАЛАЛАРҒА...

**Башҡортостанда инвалид балаларҙы тәрбиәләү буйынса түләүҙәр ике тапҡырға тиерлек арттырыла.**

Рәсәй Президенты ҡул ҡуйған указға ярашлы, ағымдағы йылдың 1 июленән инвалид балаларҙы һәм бала саҡтан беренсе төркөм инвалидтарын ҡарау буйынса пособие 10 мең һум була. Әле был сумма 5,5 мең һумға тиң. Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, республикала, Урал коэффициентын иҫәпкә алып, эшләмәгән ата-әсә өсөн бала саҡтан беренсе төркөм инвалидын тәрбиәләү буйынса айлыҡ түләүҙең күләме 11 мең 500 һумға тиклем арттырыла. Хәҙер пособие 6 мең 200 һум тәшкил итә. Пенсия фонды белдереүенсә, ошо түләү тәғәйенләнгән бөтә ата-әсәләргә һәм опекундарға бер ҡайҙа ла мөрәжәғәт итергә кәрәкмәй, уның күләме автоматик рәүештә яңынан иҫәпләнә. Әлеге ваҡытта республикала 16 мең 600 инвалид бала йәшәй.

# ТАШЛАМА БУЛА

**Рәсәй Президенты Владимир Путин 2020 йылдың 1 ғинуарынан беренсе һәм икенсе балаға түләүҙәр планкаһын ике йәшәү минимумына тиклем күтәрергә тәҡдим итте. Бынан тыш, ул беренсе һәм икенсе балаға пособиеларҙы йән башына уртаса килеме ике йәшәү минимумынан кәмерәк булған ғаиләләр алырға тейешлеген билдәләне.**

Президент Үҙәк банкка ипотека ставкаһын 9 процентҡа тиклем, ә һуңынан 8 процентҡа ҡәҙәр кәметеү буйынса сараларҙы тәьмин итергә ҡушты. "Әле күп балалы ғаиләләр өсөн ипотека буйынса льгота бар, улар 6 процент түләй, ҡалғанын дәүләт субсидиялай. Ләкин был сара менән дә һирәк файҙаланалар, сөнки льгота 3 йәки 5 йыл ғәмәлдә. Льгота ипотека кредитлауы осоронда ғәмәлдә ҡалһын тигән тәҡдим индерәм, - тине Путин. - Илдәге макроиҡтисади хәлдең тотороҡлоғон иҫәпкә алып, өсөнсө һәм артабанғы балаһы тыуған ғаиләләр өсөн өҫтәмә ярҙам, атап әйткәндә, ошондай ғаиләләр өсөн 450 мең һум ипотека бурысын ҡаплау сараларын индереү мөмкин тип иҫәпләйем". Владимир Путин ағымдағы йыл бюджетында уҡ ошо сараларҙы яңынан иҫәпләргә һәм күҙ унында тоторға тәҡдим итте.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығыҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Иртәнге ашҡа ни зыянлы?

❖ Ас ҡарынға ашалған өс ризыҡ зыянлы:

1. Яңы әҙерләнгән елек-емеш һуты - уны ашағандан һуң, ҡайнаған һыу менән шыйығайтып эсергә кәрәк.

2. Ҡәһүә - ашҡаҙанда әселек бүленеүгә килтерә, уны ла ашағандан һуң ғына һөт йәки һөт өҫтө ҡушып эсергә кәрәк.

3. Ыҫланған ризыҡтарҙың зыянын бөтөрөү ҙә мөмкин түгел: уларҙа яман шештәр барлыҡҡа килтереүсе матдәләр бар. Уларҙы ашағас, үт күп бүленә, ә үт ашҡаҙанға эләгеп, уны ауырттырырға мөмкин.

## Күтән сығыу

❖ Күтән сығыу (геморрой) сире менән яфаланыусыларға даими рәүештә кишер япрағы сәйен эсергә кәрәк. Уға алабута япрағын ҡушыу ҙа файҙалы.

## Күҙҙәр ауыртҡанда

❖ Кишер һутын дарыу кеүек эсергә.

## Ҡабаҡ

❖ Ашҡаҙан йәки бөйән эсәге йәрәхәте күҙәтелһә, йә уларға бәйле сирҙәр көсәйһә, ҡабаҡ йомшағын бешереп йә сей көйөнә ашарға кәрәк.

## Эс йомшартыу

❖ 15 г ерек тубырсығына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, һауыты менән ҡайнап ултырған кәстрүлдә 15 минут торға. 45 минут һыуытҡас, һөҙөргә һәм тәүге күләменә еткәнсе һыу өҫтәргә. Төнәтмәне көнөнә 2-3 тапҡыр, ашарҙан ярты сәғәт алда 1/3 стакан эсергә.

## Теш һыҙлаһа...

❖ Прополисты 30 %-лы спиртта төнәтергә һәм мамыҡты сылатып, һыҙлаған тешкә ҡуйырға.

## Экзема

❖ Тигеҙ күләмдә үҫемлек майы, йөҙөм йәки алма һеркәһе алып болғатырға, даими рәүештә экземаға һөртөргә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

## ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

**Тамъян башҡорттарында ҡыҙыл-һары-көрән төҫтәр өҫтөнлөк иткән. Һары йәки көрән төҫтәге буйҙы ике яҡ ситләп йәшел төҫ тә ҡулланылған. Ғәҙәттә, балаҫ - өс, һирәгерәк дүрт төҫтән торған. Төҫтәрҙе һәм балаҫ һуғыу техникаһын дөрөҫ ҡулланыуҙан балаҫтар һәр саҡ яңыса балҡыған.**

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ



*Балаҫ һуғыу оҫтаһы М. Мигранова һәм уның буй балаҫтары. Белорет районы Шығай ауылы. 1976 йыл.*

1976 йылда Белорет районы Шығай ауылы оҫтабикәләренән йыйылған материалдар башлыса ошондай өлгөләрҙән тора.

● Көрән ерлеккә киң итеп һалынған ҡыҙыл һәм һары буйҙарҙан торған балаҫ. Төҫлө буйҙарҙың эске яғынан үткән көрән төҫтәге тешле тар линия биҙәүес булып тора.

● Ҡара-көрән буйҙары сағыу һары төҫ менән ҡаймаланған буялмаған аҡ йөндән һуғылған балаҫ.

● Төп өс (көрән, һары, ҡыҙыл) һәм өҫтәмә алһыу зәңгәр төҫтән торған балаҫ. Һүрәт раппортында йәйәләр менән ҡушылған буйҙарҙағы йөн комбинацияһы бирелгән; һандар бер төҫтәге ҡайһы бер буйҙарҙың яҡынса киңлеген аңлата (башҡа осраҡтарҙа буйҙарҙың киңлеге тигеҙ - көрән буйҙың 1-2 киңлеге):

//ҡыҙыл-һары-ҡыҙыл-һары-көрән (0,5)-[ҡыҙыл (ҡайма) - һары - ҡыҙыл (ҡайма)] - көрән (1,0) - [һары - алһыу зәңгәр - һары] - ҡыҙыл//

● Башлыса ҡыҙыл һәм һары йөндән һуғылған балаҫ. Ҡыҙыл буйҙар тоташтырыла. Ҡыҙыллы-һары балаҫта һәр буйҙың уртаһынан көрән төҫлө һыҙыҡ үтә. Раппортта бар буйҙар ҙа беренсе ҡырға тиң:

//ҡыҙыл (0,3) - һары - ҡыҙыл - һары - [ҡыҙыл - көрән - ҡыҙыл] - һары - ҡыҙыл - һары - ҡыҙыл (1,0)//

● Ете киң ҡара-көрән буйҙан торған орнаментлы балаҫ. Уртаһы һары төҫтәге ике яҡлы тешле тар линия һәм йәшел ҡайма менән байытылған. Пунктирлы һары линия араһында сейә төҫөндәге фон күренеп ҡала.

Төньяҡтараҡ, ҡатайҙар йәшәгән Аҙналы ауылында традицион төҫтәрҙәге буйҙарҙың (ҡыҙыл, көрән, һары, һирәгерәк йәшел йәки күк) нигеҙ ебе тигеҙ алынған. Ҡыҙыл төҫтең өҫтөнлөк итеүе шуның менән бәйле, балаҫты ҡыҙыл менән башлап, ҡыҙыл менән тамамлап ҡуйғандар. Шуныһы ла бар, ҡыҙыл төҫ буйҙарҙы айырып торған, бер юлы бөтөн төҫтәрҙе композицион яҡтан бер епкә теҙгән.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

## АФАРИН!

# БАЛАЛАР...

## ғаилә тарихын яҙҙы

**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың 23-сө мәктәбендә уҡыусыларҙың "Ил һәм ғаилә тарихы көҙгөһөндә Башҡортостан тарихы" тигән республика фәнни-ғәмәли конференцияһы уҙҙы. Беренсе тапҡыр үткәрелгән сарала Белорет, Ғафури, Йылайыр, Көйөргәҙе, Миәкә районДарынан, Өфө һәм Сибай ҡалаларының төрлө белем усаҡтарынан 82 уҡыусы ҡатнашты.**

Быға тиклем уҡыусылар араһында Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте буйынса республика кимәлендәге фәнни-ғәмәли конференция үткәрелгәне булмаған. Шуға, ойоштороусылар сараға әҙерлекте көҙҙән башлаған, һайлап алыу турында 120 уҡыусының эшен тикшергән һәм 82 мәҡәләне йыйынтыҡҡа индергән. "Фәнни-ғәмәли конференцияны БР Фәндәр академияһы һәм Башҡорт дәүләт университеты менән берлектә үткәрәбеҙ. Бөгөн уҡыусылар дүрт төркөмгә бүленеп сығыш яһай. Тикшерелгән эштәрҙең тематикаһы бик киң булды, шулай ҙа ҡатнашыусыларҙың 70 проценты Бөйөк Ватан һуғышы, Афған һәм Чечен һуғыштарында ҡатнашҡан туғандары тураһында яҙған, - тип аңлатты 23-сө мәктәп директоры, тарих фәндәре кандидаты Наил Әминев. - Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы, "Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте" предметы киләһе уҡыу йылынан ата-әсәләрҙең ғаризаһы буйынса уҡытыла башлай. Шуға конференцияны был предметтың әһәмиәтен, балалар өсөн файҙалы булыуын аңлатыу, күрһәтеү өсөн үткәрәбеҙ".

Конференцияла ҡатнашыусыларға етди өмөттәр бағланыуы, тыуған төйәктең тарихын белеү һәм ғилемгә ынтылыуҙың мөһимлеге тураһында сараның асылыу тантанаһында БР Фәндәр академияһы вице-президенты Айтуған Аҡманов, тарих фәндәре докторы, БДУ профессоры Марат Ҡолшәрипов, БДУ-ның Тарих һәм дәүләт идараһы институты директоры Әминә Уразова һәм ошо институттың БР тарихы, археология һәм этнология кафедраһы доценты Нурислам Ҡалмантаев сығыш яһаны. "Бындай сара бик кәрәкле, беҙ 5-6-сы синыф уҡыусылары яҙған тарихты уҡып, аптырап ултырҙыҡ хатта, - тине профессор Марат Ҡолшәрипов. - Әле уҙҙәренең ғаиләһе, һуғыштарҙа ҡатнашҡан туғандары, тыуған төбәгенең тарихы тураһында яҙһалар, киләсәктә шулай йәйләп фәнгә ылығырҙар. Уйлап ҡараһаң, был тәрбиәүи йәһәттән дә бик файҙалы һәм ғалимдар менән осрашыу ҙа уҡыусылар өсөн эҙһеҙ ҡалмаҫ".

Әйткәндәй, уҡыусылар үҙҙәре лә фәнни-ғәмәли конференцияның илһөйәрлек тәрбиәләүҙә роле ҙур булыуын аңлап тора. "Был хәрби-патриотик тәрбиәнең бер өлөшө, бөгөн беҙ бик күп ҡаһарман яугирҙар тураһында тарих тыңланыҡ. Миңә бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яҡташтар тураһындағы докладтар оҡшаны. Беҙҙең М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында "Хәрби дан музейы" бар һәм килгән ҡунаҡтарға дуҫым Эдуард Саргаев менән экскурсия ойошторабыҙ. Шуға тап ошо осорҙоң хәл-ваҡиғалары, тарихи мәғлүмәттәрен ҡыҙыҡһынып өйрәнәм. Киләсәктә үҙем дә хәрби кеше булырға хыялланам", - тине Ислам Зөлҡәрнәев.

Ә бына Белорет районының Манышты ауылынан килгән апалы-һеңлеле Диниә һәм Әминә Сәғитовалар конференцияла башҡортса сығыш яһаған. "Мин йүкә ағасынан эшләнгән әйберҙәр, ә һеңлем Әминә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемдәре тураһында һөйләнек. Элек йүкәнән септә, арҡан, нуҡта, сабата эшләгәндәр, хәҙер сабатаны байрамдарҙа ғына кейеп күрһәтәләр. Септә атҡа яба торған әйбер, ул да һирәк кенә ҡалған инде", - тип саф башҡортса яуап бирҙе Диниә Сәғитова.

- Һуңғы осорҙа балалар үҙ быуындарының тарихын белмәй, тип хәүефләнәбеҙ. Ә был конференция уҡыусыларҙың донъяға ҡарашын киңәйтергә ярҙам итте. Бына минең ейәнсәрем Гөлмирә Кинйәбаева ҡарт олатаһы Шәһишәриф Ишбирҙиндең фронтта яҙған көндәлеге буйынса тикшереңеү эше яҙҙы, тарих менән бик ҡыҙыҡһынып китте. Башҡаларҙа ла, моғайын, шундай уҡ ҡыҙыҡһыныу уянғандыр, китаптар уҡырға ынтылыш тыуғандыр", - тип баһаланы сараның әһәмиәтен өләсәй Филүзә Ишбирҙина.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ил һәм ғаилә тарихы көҙгөһөндә Башҡортостан тарихы" уҡыусыларҙың республика фәнни-ғәмәли конференцияһында енеүселәр дүрт секцияла айырым билдәләнде. Уҡыусыларҙың ғилми-тикшеренеү эштәрен, докладтарын Башҡорт дәүләт университетының БР тарихы, археология һәм этнография кафедраһының ғилми хеҙмәткәрҙәре тикшереп гәҙел баһа бирҙе. Ҡатнашыусылар бер ғаилә яҙмышы тотош ил, милләт тарихы менән нисек тығыҙ бәйләнештә булыуын аңлап, шәхестәре менән ғорурланып ҡайтты. Ә ойоштороусылар киләһе йыл конференцияны Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 130 йыл тулыуға бағышларға ниәтләп ҡалды.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ

# ТАНЫТТЫЛАР ҺӘМ...

## ишеттерҙеләр

**Ошо көндәрҙә Өфөләге "Торатау" Конгресс-холл бинаһында "V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Йәштәр советы" халыҡ-ара йәштәр форумы уҙғарылды. Унда Башҡортостандың төрлө төбәктәренән, Ҡаҙан, Санкт-Петербург, Сургут, Яңы Уренгой ҡалаларынан, Ырымбур өлкәһенән, Ҡаҙағстан һәм Франция илдәренән 200-гә яҡын кеше ҡатнашты. Республиканан ситтә йәшәүсе милләттәштәр өсөн видеобәйләнеш булдырылды. Сарала Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Данир Ғәйнуллин, Республика Башлығы Хакимиәтенең ижтимағи-сәйәси үҫеш идараһы начальнигы урынбаҫары Азат Бадранов, БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибов ҡатнашты.**

Форумда йәштәр йәмғеһе һигеҙ майҙансыҡта фекер алышты, шуларҙың икеүһе Мәскәү һәм Силәбе ҡалаларында ойошторолғайны. Эш барышында делегаттар төрлө актуаль мәсьәләләрҙе тикшереп, айышына төшөнөп һәм уларҙы хәл итеү юлдары буйынса фекер алышып, уртаҡ ҡарарға килгәс, тәҡдимдәрен Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһына тәҡдим итте. Һөҙөмтәлә бик күп мөһим эш йүнәлештәре буйынса төплө фекерҙәр, аныҡ тәҡдимдәр яңғыраны. Мәҫәлән, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды директоры Гөлназ Йосопова алып барған майҙансыҡта ҡатнашыусы делегаттар башҡорт теленә ҡағылышлы мәсьәләләрҙе, уның ышанысла киләсәген тәьмин итәсәк проекттар булдырҙы. "Арғымаҡ" этнотөркөмө солисы Ринат Рамаҙанов етәкселегендәге "Глобаль мәҙәни экспансия стратегияһы" тигән майҙансыҡта эшләгән йәштәр бөтә идеяларын "Урал батыр иле" проектына берләштерҙе. Башҡортостандан ситтә йәшәгән милләттәштәрҙе берләштергән майҙансыҡта ватандаштарға ярҙам итеүгә ҡоролған "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының халыҡ-ара бүлеге" тигән проект өҫтөндә эшләнеләр һәм ул форум һөҙөмтәләре буйынса иң шәп идеялар исемлегенә инде. Шулай уҡ ойоштороусылар "Finexpertiza" халыҡ-ара аудит-консалтинг селтәре генераль директоры Илгиз Байморатов етәкселегендәге төркөмдөң "Заман башҡорто кодексы" проектын һәм "Флэтшеринг" проекты авторы Тамъян Ғәбитов етәкселегендәге "Эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итеү программаһы"н юғары баһаланы. Яңы проекттарҙың иң-индәре Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһы йөкмәткеһенә индереләсәк.

"Бөгөн алдынғы ҡарашлы, аҡыллы йәштәр йыйылды. Мин барығыҙҙы ла яҡшы беләм. Һеҙ йәмәғәт эштәре менән әүҙем шөғөлләнгән, республика һәм башҡорт халҡын үҫтереүгә тос өлөш индергән кешеләр. Беҙ төрлө йүнәлештә эшләһәк тә, маҡсатыбыҙ бер - халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыу. Нәҡ әүҙем йәштәр республиканы алға этәргән көс. Һәр осорҙа шулай булыуын Башҡортостан тарихынан беләбеҙ. Милли геройыбыҙ Салауат Юлаевтың да, Башҡортостан автономияһына нигеҙ һалыусы эшмәкәрҙәр йәше лә 35-тән уҙмаған. V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреүгә әҙерлек бара, унда мотлаҡ иң алдынғы йәштәрҙе туплаған көслө секция эшләйәсәк", - тине йәштәргә мөрәжәғәтендә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Данир Ғәйнуллин.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сараға йомғаҡ яһағанда форум директоры Илдар Кинйәбулатов V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына делегат итеп һайланған егерме йәш кешенең исемлеген тәҡдим итте, шулай уҡ йәштәр Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Йәштәр советын булдырыуҙы ла хуп күрҙе. Ойоштороусылар V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерлек сиктәрендә 7 июндә эшҡыуарҙары йыйған бизнес-ҡоролтай үтәсәге тураһында ла хәбәр итте.**

*✓ Ауыр осорҙар булыуға ҡарамаҫтан, һуғыш ваҡытында балалар йорттары илебеҙҙә меңәрләгән етем балаларҙы үлем тырнағынан ҡотҡарып ҡала алды, ҡараусыһыҙ урамда йөрөгән берәҙәк балалар булманы.*



БЕР ФОТОҺҮРӘТ ТАРИХЫ

**Быйыл 15 майҙа билдәле тарихсы-ғалим, тарих фәндәре докторы, профессор, БР фән һәм техника өлкәһендә Дәүләт премияһы лауреаты Әнүәр Әсфәндийәровтың тыуыуына 85 йыл тула. Ошо уңай менән ғалимдың ҡатыны - тарих фәндәре кандидаты Клара Әсфәндийәрова "Киске Өфө" гәзите редакцияһына Әнүәр Закир улының Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Баймаҡ районы 1-се Этҡол балалар йортонда тәрбиәләнгән осорҙа төшөрөлгән фотоһүрәте менән уның бала сағы хаҡындағы яҙмаларын алып килде. Материалды гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**



# ХЕҘМӘТКӘ ҺӨЙӨҮ...

## кеше итте уларҙы

Дәүләт һәм хөкүмәт һуғыштың тәүге көндәренән үк, хәлдең ҡатмарлы булыуына ҡарамаҫтан, балалар тураһында ҡайғыртыуҙы мөһим мәсьәлә итеп күтәрә. Ҡарауһыҙ ҡалғандарҙы балалар йорттарына һәм интернаттарға урынлаштыралар. Унда беренсе сиратта фронтовик балаларын, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең, эвакуацияланып килгән, әсәләре эштән бушамаған балаларҙы урынлаштыралар. Башҡортостанда 1941 йылдың башында 28 балалар йорто булып, унда 4103 бала йәшәһә,1945 йылда 133 йортта 16 338 бала тәрбиәләнә. Бынан тыш, 1941-1942 уҡыу йылдарында илебеҙҙең һуғыш барған өлкәләренән һәм ҡалаларынан эвакуацияланып килгән 16 балалар йортонда 1697, 20 балалар баҡсаһында, интернаттарҙа 1800 бала тәрбиәләнә.

Илебеҙгә һуғыш күп юғалтыуҙар, ауырлыҡтар килтереүгә ҡарамаҫтан, балаларҙы уҡытыу һәм тәрбиәләү эшенә ҙур иғтибар бирелә. Ул ваҡытта "Правда" гәзитендә ошондай һүҙҙәр баҫылып сыға: "Әгәр кемдер, хәҙер балалар ҡайғыһы юҡ, тип уйлай икән, тимәк, ул кеше һуҡыр. Былай уйлау - ул илдең алдағыһын уйламау һәм күрмәү, тимәк, илебеҙ тормошо менән йәшәмәү, тигән һүҙ. Беҙ барлыҡ балаларҙы ла яҡшы итеп тәрбиәләргә һәм уҡытырға тейешбеҙ. Һуғыш ваҡытына һылтанырға ярамай". Шулай итеп, партия һәм дәүләтебеҙ уҡытыусыларҙан, тәрбиәселәрҙән тырыш хеҙмәт талап итә.

1944-1945 уҡыу йылында республикала балалар йорттарының һаны тағы ла арта. Хәҙер мәктәпкә балаларҙы элекке кеүек 8 йәштән түгел, 7 йәштән ҡабул итеү башлана. Бында уларҙың өҫтө бөтөн, тамаҡтары туҡ була. Балалар йорттарында тәртип юғары кимәлдә ҡуйыла. Балаларҙың тормошо һәр ваҡыт хеҙмәт менән бәйләнгән була һәм шуға ла улар иҫ китмәле эш һөйөүсән булып үҫәләр. Уҡытыу-тәрбиә эшендә хеҙмәткә өйрәтеү беренсе урында тора. Балаларҙың 8-12 йәшкә тиклеме хеҙмәттең ябай төрө менән шөғөлләнһә, 12 йәштән өлкәндәре оҫтаханаларҙа, колхоз-совхоз баҫыуҙарында, фермаларҙа һәм үҙҙәренең ярҙамсы хужалыҡтарында шөғөлләнә. Ҡыш көндәре ир балалар мастерскойҙарҙа мебель йүнәтеү, үҙҙәренең аяҡ һәм өҫ кейемдәрен рәтләү, тегеү менән шөғөлләнә, төрлө түңәрәктерҙә киномеханик, фотограф, хисапсы эштәре менән танышып, кәрзин, сабата үреү менән мәшғүл була, ҡыҙ балалар сигеү, ойоҡбаш-бейәләй, селтәрҙәр бәйләү, матрастар, ҡурсаҡтар тегеү, йыуғыстар эшләү һ.б. шундай эштәр менән шөғөлләнә.

Тормош иптәшем - күренекле тарихсы-ғалим Әнүәр Закир улының рухын иҫкә алып, уның ошо ауыр дәүергә тура килгән бала сағы хаҡында бер нисә һүҙ әйтеп китмәксемен. Әнүәр Закир улына өс йәш кенә булғанда, әсәһе үлеп китә. Үкһеҙ етемлектең әсеһен етерлек татып, унда-бында һуғылып тигәндәй йөрөй торғас, Баймаҡ районының Беренсе Этҡол ауылында асылған балалар йортона барып эләгә. Атаһы һуғыштың тәүге көнөндә үк фронтҡа алына һәм ете йәшлек Әнүәр ҡартәсәһе ҡарамағында тороп ҡала, әммә ул да ошо йылда мәрхүм булғас, бала бөтөнләй ҡарауһыҙ ҡала. "Ауылдан ауылға ризыҡ эҙләп йөрөргә тура килде, мөмкинлеге булған кешеләр картуфтың сей ҡабығын булһа ла бирәләр ине, шуны кимерә инем. Ахырҙа, һыуыҡ ноябрь баштарында балалар йортона ялан аяҡ, йыртылып, туҙып бөткән йәйге кейемдә генә барып индем", - тип иҫкә ала торғайны Әнүәр Закир улы. Унан Баймаҡ балалар йортона күсерелә, унда 8 класты тамамлағас, 1951 йылдың көҙөндә Иркутск ҡалаһына ФЗО-ға ебәрер өсөн Өфөгә алып киләләр. Шунда нисектер Себергә китмәй тороп ҡала. Бында ул 9-сы һанлы мәктәпкә уҡырға алына, әммә йәшәргә урыны булмай, ике-өс ай буйына вокзалдарҙа, ҡайҙа етте, шунда йоҡлап йөрөй торғас, Өфөнөң 5-се һанлы балалар йортона урынлаша һәм 1953 йылда мәктәпте тамамлап, М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетына уҡырға юллана. Шулай итеп, ул ун йыл буйына балалар йортонда тәрбиәләнә. Шуға күрә ул йыш ҡына: "Рәхмәт партияға һәм хөкүмәтебеҙгә, мине аслыҡтан, үлемдән ҡотҡарып, кеше булырға ярҙам итте", - тиер ине.

...Бер саҡ уға, 75 йәшен билдәләгән осорҙа, "Башҡоростан ҡыҙы" журналы редакцияһы хәбәрсеһе "Һеҙҙең өсөн бәхет нимә?" тигән һорау менән мөрәжәғәт иткәйне. Ул былай тип яуап бирҙе: "Ғаиләмдә үҙемде бәхетле тоймаһам, хеҙмәтем дә емешле булмаҫ ине. Әлеге йәшемдә лә университетта лекциялар уҡыу, көн һайын архив-китапханаларҙа мәғлүмәттәр туплау, төнгө икеләргә-өстәргә тиклем уларҙы эшкәртеү - тиҫтәләгән йылдар буйы килгән ошондай көн тәртибе һаҡланыуы бәхет тигән ғилләә түгелме? Бала сағымда мин тешем-тырнағым менән нисек тә иҫән ҡалырға, йәшәргә ынтылдым. Әлбиттә, ул һәр кешегә хас ынтылыштыр. Әммә аслыҡтан шешенеп, хәрәкәтһеҙ ятҡан ярым һуҡыр етем малайҙың иҫән ҡалыуы үҙе үк ҙур мөғжизә - бәхет булған бит. Балалар йортона барып эләгеп, шунда йәшәп-уҡый башлауым яҙмышымда ҡырҡа боролош яһаған икенсе бәхетем ине. Артабан илдең иң ҙур уҡыу йортона уҡырға инеүемде йәнә лә бәхет тимәй, нимә тип атайһың? Һуңынан халҡымдың тарихи яҙмышын билдәләүҙә мөһим һәр асышым, уны халҡыма ҡайтарыуым, ошо хеҙмәтемдең кешеләр, дәүләт тарафынан баһаланыуы - бәхеттең дә бәхете. Әле тамамланып ятҡан китабым (һүҙ "Миңзәлә башҡорттарының ауылдары" тигән хеҙмәте тураһында бара - **К.Ә.**), уны яҙғандағы кисерештәрем дә - минең өсөн, һис шикһеҙ, оло бәхет". Шулай булды уның яуабы.

Бик тә үкенесле бер хәл тураһында ла әйтеп китәйем. Әнүәр тиҫтәләгән йылдар буйы хәбәрһеҙ юғалған тип иҫәпләнеп йөрөгән атаһының ҡәбере табылыуын белә алмайынса китеп барҙы. Ҡайным 1943 йылда ҡаты яраланып, май айында Воронеж фронтынан Өфөнөң Пушкин урамы 85-се йортонда урынлашҡан 1740-сы һанлы госпиталгә килтерелеп, 4 августа ошонда, 30 ғына йәшендә, ауыр яранан вафат булып ҡала һәм Сергиев зыяратында ерләнә. Был хаҡта Әнүәр белмәне. Уның вафатынан һуң ғына юллап йөрөп асыҡланым уны. Зыяраттағы плитәгә Закир Әлмөхәмәт улының исем-шәрифтәрен уйып, иҫтәлеген мәңгеләштереүгә өлгәштем...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ауыр осорҙар булыуға ҡарамаҫтан, һуғыш ваҡытында балалар йорттары илебеҙҙә меңәрләгән етем балаларҙы үлем тырнағынан ҡотҡарып ҡала алды, ҡараусыһыҙ урамда йөрөгән берәҙәк балалар булманы. Балалар йорттары бик күп етемдәргә илебеҙҙең күренекле шәхестәре булып үҫешергә ярҙам итте. Бына Баймак районының 1-се Эткол балалар йортонда тәрбиәләнеп, аҙаҡ халҡыбыҙҙың ҙур шәхестәре дәрәжәһенә күтәрелгән кешеләрҙең балалар йортонда төшкән фотоһы: 3-сө рәттә уңдан беренсе бала - Әнүәр Әсфәндийәров; 1-се рәттә уңдан 4-се - һуңынан үҙешмәкәр композитор булып киткән Нәбиулла Мөстәкимов; 3-сө рәт һулдан 1-се - Зәкәриә Аҡназаровтың ҡустыһы Ҡотдос Аҡназаров - урман хужалығы белгесе; 4-се рәттә һулдан 1-се - профессор Эрнест Ишбирҙин; шул уҡ рәттә 2-се - БАССР-ҙың халыҡ артисы, йырсы Рамаҙан Йәнбәков һәм башҡалар. Был фотонан ҡарап, гәзит уҡыусылар араһында үҙҙәрен йә туғандарын таныусылар ҙа булыр әле, бәлки?..**

**Клара ӘСФӘНДИЙӘРОВА,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



*Әхмәтзәки ВӘЛИДИ ТУҒАН*

# БАШҠОРТ

Башҡорт иле Сыңғыҙ улдарының йәйләү ерен тәшкил иткән, ә үҙҙәре армияларында хеҙмәт иткән. Иранда Илханиҙарға, Египетта һәм Сирияла мәмлүктәргә хеҙмәт иткән күренекле башҡорт әмирҙәре бар. Мәҫәлән, Ғазан хан заманында Анатолияла Сүләмиш болаһын баҫтырған Әмир Башҡорт, Олжайтуға хеҙмәт иткән Сарыҡан Башҡорт, Египетта Насир әл-Рукни әл-Башҡорди һәм Ғилметдин Башҡорди (һәйбәт әхләҡле бер дәүләт эшмәкәре булған, Калауын солтан тарафынан Сирияға етәксе ителгән) булған.

Алтын Урҙа тарҡалғандан һуң, башҡорттарҙың Ағиҙел һәм Кама йылғаларының көнсығышында йәшәгән бер өлөшө сыңғыҙлыларҙың Шәйбани улдары, ә көньяҡ-көнбайыштағылары нуғай мырҙаларының идараһы аҫтына ингән. Ҡаҙан ханы Ибраһимдың 1469 йылғы рустарға ҡаршы сәфәрҙәренә башҡорттар ҙа ҡатнашҡан.

XV-XVI быуаттарҙа Башҡортостанда Шәйбани-Тора хандары идара иткән. Уралдың көнсығышындағы Тора районының ҡалаларында йәшәгән был хандарҙың Башҡортостандағы урҙаларының береһе Стәрлетамаҡ эргәһендәге Тора-Тау янында, икенсеһе Өфө тирәһендә, Ҡалмаш йылғаһы буйында, "Хан урҙаһы" тигән ерҙә булған. Һуңғы замандарҙа шул тирәлә Тора хандары 1468 йылда вафат булған нәҫелдәренән береһенең зыяраты табылды (ҡарағыҙ: "Красная Башкирия", 2.10.1938); Шәйбани-Тора хандарының һуңғыһы булған Күсем хандың Башҡортостанда идара иткән улы Ғәли хандың урҙаһы ла Өфөгә яҡын булған (ҡарағыҙ: Үтәмеш хажы, Тарих-и Дуҫ Солтан, үҙемдең шәхси нөсхәм, 736 бит).

Көньяҡ-көнбайыш башҡорттар менән идара иткән нуғай мырҙаларының башында династияны башлаусы Иҙеүкәй һәм уның улы Нуретдин (башҡорт телендә Мораҙым; хәҙерге көндә лә уларҙың хаҡында дастандар һәм йырҙар башҡарыла) тора. Был мырҙа шау-шыулы тормошоноң һуңғы көндәрен башҡорттар араһында үткәрә һәм 1411 йылда вафат була.

XVI быуаттың уртаһында ҡаҙаҡ ханы Хаҡназар Башҡортостанды үҙ идараһы аҫтына ала. Был ваҡиғанан һуң табын ырыуы менән идара иткән Аҡколөмбәт һәм мең ырыуы менән идара иткән Ҡараҡолөмбәт исемле мырҙалар 1557 йылда үҙҙәренең нуғайҙары менән бергә Кубан тарафтарына күсһәләр ҙә, Иҙелдең көнсығышында ҡалған башҡа мырҙалар бынан һуң да хаким булып ҡалған. XVI быуаттың һуңғы яртыһында Тин Әхмәтулла Иштирәк мырҙа һәм Исмәғил улы Урыҫ мырҙалар эшмәкәрлектәре мөһим. Урыҫ мырҙа ғосманлы солтаны Кануни Сөләймәнгә яҙған хаттарында уны Иҙел буйын баҫып алырға өндәгән. Тик үҙе лә, Шәйбани Күсем хандың улдары Ғәли хан менән Ишем Солтан да рустарҙың Иҙелдән көнсығышҡа табан йәйелеүенә ҡамасаулай алмаған.

**(Дауамы бар).**

***✓ Бөгөн "татар" аты булып яҙылып ҡуйылған йылҡы малдары асылда башҡорт ерлегендә тыуып, башҡорт тоҡомло малдар. Татарстан уларҙы Башҡортостан хужалыҡтарынан йыйып, һатып алып ҡайтҡан.***

# АТЛЫ

## Әммә беҙҙең ошо

**Башҡорт ир-егете өсөн ат - уның уң ҡанаты ғына түгел, яуҙашы ла, дандашы ла, серҙәше лә. Булған. Әммә заманалар үҙгәреү менән быуаттар буйына дауам итеп килгән бәйләнеш яһалма рәүештә өҙөлөү сигенә килтерелеп еткерелгән. Ул ғына ла түгел, хатта башҡорт аттарына юғалыу ҡурҡынысы ла янай. Ни өсөн был мәсьәлә шундай сиккә килеп етте һәм артабан да, атлы халыҡ, тигән данлыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу өсөн нимәләр эшләргә кәрәк? Ошо һәм башҡа проблемаларҙы "Любизар" 1-се башҡорт атлы полкы" хәрби-тарихи клубы етәксеһе Илдар ШӘЙӘХМӘТОВ менән асыҡларға тырыштыҡ.**

**Башҡорттоң йылҡысылыҡ менән шөғөлләнеүе борон-борондан билдәле, улар беҙҙә ялан тултырып тигәндәй үрсей. Әммә бөгөн килеп шундай дилемма алдына килеп терәлдек: башҡорт тоҡомло аттар ҡалырмы, әллә улар, ут күршеләребеҙҙең йылғырлығы һөҙөмтәһендә, барыһы ла "татар аты" булып китерме?**

- Мал буйынса профессиональ белгес булмаһам да, 2005 йылдан башлап "Төньяҡ амурҙары", "Любизар" 1-се башҡорт атлы полкы" йәмәғәт ойошмаларын төҙөп, юридик яҡтан теркәтеп, ойоштороп йөрөгәс, был теманың ысынлап та ҙур проблема булыуын үҙ елкәмдә татыған кешемен. 2009 йылда Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығына Чапаевтың Өфөнө Колчак ғәскәренән азат итеү ваҡиғаһына арнап, Ҡыҙыл Яр ауылында ойошторолған реконструкцияла ҡатнашыу өсөн эйәрле-йүгәнле аттарҙы ҡуртымға һорап мөрәжәғәт иттек. Бер фермерҙың йылҡы өйөрөн килтерҙеләр. "Уларҙың эйәре юҡ таһа, атҡа нисек менәйек?" - тигәс, аптырап киттеләр. Өфө ат заводы директоры Николай Штенцов өйөнән үҙенең спорт эйәрен килтерҙе, тағы ла 4-5 атты инәлеп-ялбарып тигәндәй урам буйлап эҙләп таптыҡ. Уларҙың да эйәр-йүгәндәре туҙған йәки бөтөнләй юҡ ине. Ә беҙгә казактарҙыҡы һымаҡ йәки көтөүсе эйәре кәрәк. Министрлыҡҡа барып, "Һеҙ миңә ат табаһы урынға, йылҡы тәҡдим итәһегеҙ", - тигәс, "Ә нимә менән айырыла һуң ат менән йылҡы?" - тип аптыраштылар. Һуңынан беҙгә ипподромдан спорт аттары килтерҙеләр. Уларҙы оҙатып килеүсе конюх ҡыҙҙар реконструкцияла ҡатнашҡан полк егеттәренә аттарын менергә рөхсәт итмәне. Аптырағандың көнөнән шул ҡыҙҙарға егеттәр кейемдәре кейҙереп, уларҙың алдынан "Ура!" ҡысҡырып, ғәрләнә-ғәрләнә "һөжүмдәр" ойошторорға мәжбүр булдым. Башҡортостанға төрлө өлкә-ҡалаларҙан килгән дуҫтарыбыҙ башҡорт аттарын үрсетеү буйынса Башҡортостан ауыл хужалығының бөгөнгөһөн шундай хәлдә күрҙе. Ҡатнашыу шатлығы түгел, ғәрлек тойғоларын кисерҙем ул ваҡытта.

Ғөмүмән, "Ә нимә менән айырыла һуң ат менән йылҡы?" тигән һорауҙы министрлыҡтағылар түгел, ә мин бирергә тейеш инем, сөнки улар ошо тармаҡ буйынса белгес. Министрлыҡтағы малсылыҡ тармағы ит-май-һөт етештереү менән шөғөлләнә, шул маҡсатта йылҡы үрсетә, әммә аттар түгел. Ат үрсетеү (дөрөҫөн әйткәндә, ат тәрбиәләү, ат яратыу) менән шөғөлләнгәндә уларҙы эйәрләп-йүгәнләп байрамдарға әҙерләрҙәр, мәҙәниәтте үҫтерерҙәр ине, ә был осраҡта йылҡыларҙы ит өсөн генә тоталар, шул йүнәлеш буйынса отчеттар төҙөйҙәр. Бындай йылҡы малы оҙаҡ йәшәмәй, бер-ике йылдан ғүмере өҙөлә. Хужаларҙың йәйгеһен ҡымыҙ иҫтәренә төшә, һуңынан, бейәләр һыйыр кеүек ҡышын да һөт бирмәгәс, сентябрҙән майғаса уларҙы тотоу бюджеты ҡыҫҡартыла, яйлап малдарҙың һаны ла кәметелә...

**Ни өсөн бөгөн башҡорт йылҡылары "татар" аты булып китте, тигән һорауыма яуап булманы...**

- Башҡорт йылҡыһы, башҡорт аты булып нисә дәүер йәшәгәндәр бит инде улар, сөнки йылҡыны тәрбиәләп, уға мәҙәни һөнәрҙәр, инстинкттар биреп, холҡон йүнәтеп тормаһаң, тыумыштан ҡырағай йылҡы малы барыбер ҡырағай булып ҡала. Ат булып китһен өсөн кешенең бик әүҙем ҡыҫылышы кәрәк. Ат булаһы йылҡы малы гел ҡараулы тора, ул кешегә тоғро хеҙмәт итә, алыҫ походтарға сыға, үҙен менергә рөхсәт итә, аяҡтары, кәүҙәһе менән төрлө хәрәкәттәр күрһәтә, ялҡойроғо ла тараулы була, музыканы ла аңларлыҡ кимәлгә етеп, ысын ат булып яратыла. Әгәр кеше уны егеп кенә йөрөй икән, ул мал әле ат түгел. Ат булһын өсөн йылҡы малына кеше хәстәрлеге һәм юғары мәҙәниәтле, иғтибарлы хужаларса мөнәсәбәт кәрәк.

Тарихтан ҡараһаҡ, халыҡ үҙенең йылҡыһы тураһында атлы ғәскәрҙәре барлығы менән белдергән. Һуғыш, әлбиттә, аянысл ваҡиға, ул һабантуй түгел, уны тәмләп һөйләп булмай, данлап ҡына хәтергә алып була. Халҡыбыҙҙың шул данлы эштәренең береһе - ул үҙенең йылҡыларын ат итеп тәрбиәләп, үҙенең атлы яугирҙарын үҫтергән, кавалерия төҙөүгә өлгәшкән. Күп халыҡтар, хатта Татарстан да, ул заданиены үтәй алмаған. Тимәк, уларҙың ат тураһында һүҙ йөрөтөү түгел, йылҡыһы ла булмаған. Бөгөн шул фактты, йәғни "Йылҡы булмайынса, ат булмай" тигәнде күрәләтә инҡар итеп, Башҡортостандан һатып алған йылҡыларҙы "татар аты" тип иғлан итә күршеләр. Был турала китапҡа алтын хәрефтәр менән, хатта Ҡөрьәнгә яҙып ҡуйһалар ҙа, ул татар аты була алмай! Шулай уҡ сыуаш аты ла, марый аты ла була алмай! Эйе, беҙҙән һатып алынған мал мал һанын арттырып, хатта ат булып йәшәй ала, әммә тоҡомдары бер ваҡытта ла икенсе халыҡтың исеме менән атала алмай, башҡорт йылҡыһынан сыҡҡас, барыбер ҙә башҡорт аты булып иҫәпләнә улар.

Бөгөн "татар" аты булып яҙылып ҡуйылған йылҡы малдары, асылда, башҡорт ерлегендә тыуып, башҡорт тоҡомло йылҡы ҡанын йөрөтөүсе малдар. Татарстан уларҙы Иглин районындағы Оло Тәләк фермер хужалығынан, Баймаҡ, Әбйәлил, Хәйбулла райондары, Силәбе өлкәһе хужалыҡтарынан йыйып, һатып алып ҡайтҡан. Йылҡы малы менән элек тә шулай ҡан яңыртыу, тоҡом йүнәтеү өсөн алыш-биреш булып тора, ләкин быҒаса уларҙың тәбиғи атамаһын үҙгәртеп яҙырға бер кемдең дә башына килмәне. Был эш, ғәмәлдә, генетикаға ҡаршы, уны инҡар итеү тип аңлайым, ғалимдар ҙа үҙ һүҙен әйтер тип ышанам.

**Аттарҙа ла кеше яҙмыштары, тигән кеүек, уларҙың да үҙҙәренең паспорты, шәжәрәһе бар бит. Бына һеҙ ситтә, тарихи реконструкция ваҡытында аттарҙы Башҡортостандан алып бараһығыҙмы, әллә шунда йәшәгән башҡорт тоҡомлоларын эҙләп табаһығыҙмы?**

- Минең башҡорт яугиры икәнлегемде белгәс, ситтәге коллегалар, реконструкторҙар һәр ваҡыт үҙҙәрендә булған, беҙҙән алып ҡайтылған йылҡынан тәрбиәләнгән башҡорт тоҡомло аттарын биреп тора. Шуға күрә республиканан ситтә башҡорт атына менеү минең өсөн бер ваҡытта ла проблема булманы. Хатта Германияла бейеп торған, мине ултыртып, ятҡан еренән тороп баҫҡан "Илсе" атамалы башҡорт тоҡомло атҡа менеү бәхете тейҙе. Европала, донъяла, Рәсәйҙә Бородино, Мәскәү, Тверь өлкәләрендә башҡорт тоҡомло йылҡылар күп. Уларҙы матур итеп аҫрайҙар, үрсетәләр. Хужалары тап башҡорт тоҡомо икәнен белеп, ҡәҙерләп тәрбиәләй. Хатта "Ты же башкир, сейчас тебе башкира подберем", тип йүгереп йөрөйҙәр. Ситтәр башҡорт тоҡомон башҡа тоҡомдар менән ҡушып, ҡандарын яңыртып, сифаттарын яҡшыртыр өсөн һатып ала икәнен беләм. Мәҫәлән, Бородино өлкәһендәге "Мерлин" ҡушаматлы атты дүрт йыл рәттән мендем. Уны Баймаҡтан һатып алғандар. Былтыр Малоярославецта Белорет районының Шығай ауылынан барған башҡорт тоҡомло атҡа мендерҙеләр. Һәр хәлдә, ситтә мин ат эҙләп хитланмайым. Ҡуртым хаҡын ғына түләйем дә, эш тә бөттө.

Башҡортостанда ниндәйҙер байрам үткәрә башлаһаҡ, беренсенән, башҡорт тоҡомло аттарҙы бер сафҡа теҙеп ҡуя алмайбыҙ, сөнки эйәр-йүгәндәре юҡ, ул ҡаралмаған, атҡа әйләндерелмәгән, гел тибендә йөрөгәнлектән, ҡытығы килә һәм арҡаһына эйәр һалдырмай. Яҙмыштары ла аянысл - улар ит, колбаса булырға әҙерләнеп, бер һөнәр ҙә үҙләштермәйенсә, ҡырағай йылҡы малы булып ғүмер кисерә. Бейәләрен дә йәйгеһен ҡымыҙ өсөн тоталар, бер аҙ тоҡом алыу өсөн файҙаланалар һәм улар ҙа оҙаҡ йәшәмәй, иткә оҙатыла. Бына шулай башҡорт тоҡомло атҡа генетик яҡтан юғалыу хәүефе янай. Уның тоҡомо көсһөҙләнә, тарҡала, сифаты юғала. Ут күршеләр ҙә



**✓ "Аҡбуҙат", "Урал-батыр" эпостарында Аҡбуҙаттың күлдән сыҡҡан миҙгелен билдәләп, ошо ваҡытты Башҡортостанда Башҡорт аты көнө тип иғлан итеүҙе кәрәк тип табам.**



йоҡлап ятмай, беҙҙә хужаһыҙлыҡҡа дусар булғанды тиҙ генә үҙләштерергә әҙер торалар.

Башҡорттарҙың йылҡынан ат тәрбиәләүгә арналған йола-ҡағиҙәләрен атты яратыу һөнәре, сәнғәте тип тә әйтергә була. Ул - мәҙәниәт, донъяуи күренеш. Беҙҙә ат яратыу мәҙәниәте юҡҡа сыҡты - машиналарға ултырып, атты онотҡанбыҙ. Бында ҙур хужаларҙан башлап, ябай ауыл кешеләренә тиклем барыбыҙ ҙа ғәйепле, сөнки йылҡыларыбыҙ бар, уларҙы башҡа халыҡтар үрнәгенән сығып, ат хәленә тиклем тәрбиәләмәйбеҙ, башҡа халыҡтарҙың аттарын гаджеттар аша бер-беребеҙгә ебәреп, рекламалайбыҙ, ә үҙебеҙҙең брендыбыҙҙы ашап, һатып ятабыҙ.

**Башҡорт йылҡыһының, башҡорт аттарының үҙенә генә хас ниндәй үҙенсәлеге, айырмаһы бар?**

лап киткәндә лә, Хөкүмәт, дәүләт кимәлендә был мәсьәләләр ғәҙәти күренешкә әйләнеп, игтибарҙан ситтә ҡалғандыр, тип фаразларға мөмкин. Кисә йәшәп, кисә донъянан киткән кешеләрҙе бер нисек тә әрләй, уларҙы дөрөҫ эшләмәүҙә ғәйепләй алмайбыҙ. Ләкин бөгөн алдыбыҙға килеп баҫҡан мәсьәләләрҙе күрәбеҙ, таныйбыҙ, беләбеҙ икән, тимәк, иртәгә улар киләһе быуынға ауыр йөк, үкенес булып ҡалмаһын өсөн атай-олатайҙарыбыҙ нисек тырышҡан, нисек донъя көткән - беҙ ҙә, фермерҙар, эшҡыуарҙар ҙа, һәр кем үҙ урынында фиҙаҡәр рәүештә тырышып, ныҡышып, дәүләт эшмәкәрҙәре менән бер төптән берләшеп, халыҡ алдында, тарих алдында, заман алдында отчет биреп, үҙ бурыстарыбыҙҙы яуаплылыҡ тойоп атҡарырға тейеш, тип уйлайым. Башҡ-

ры" фәнен тергеҙеп, башҡорт гимназияларында факультативтарҙа булһа ла башҡорт хужалығын, йылҡысылығын, милләтебеҙгә генә хас булған башҡа шөғөлдәрен өйрәнеүҙе индерергә кәрәк. Сөнки үҙебеҙҙең үҫеш юлын заман талаптарынан сығып, үҙебеҙ билдәләргә тейешбеҙ. Әгәр шулайтмаһаҡ, йылдан-йыл ҡомартҡыларыбыҙ тирә-яҡтағы күршеләргә күсеп торасаҡ, сөнки тәбиғәт бушлыҡты яратмай, һәр нәмәнең хужаһы булырға тейеш. Үҙең хужа булмаһаң, уға хужа табыла ул.

Бөгөн беҙ йәш быуынға мал ҡарау, уны яратыу тәрбиәһенән бирмәгәс, улар икенсе нәмәгә ылыға, күҙ һала. Мәҫәлән, венгрҙар индустриаль Европаның уртаһында ҡамауҙа ҡалып йәшәүенә, күпме ерҙәрен юғалтыуына ҡарамаҫтан, барыбер Венгрия дәүләте булып һаҡла-

"Төньяҡ амурҙары" яугирҙары, атһыҙ ҡалдыҡ. Был мәсьәләне урындағы аттарҙы аҡса түләп ҡуртымға алып, саҡ хәл иттек.

Һуғыштан һуң Европала тыныслыҡ урынлашып, хорват халҡы үҙенең республикаһын төҙөп йәшәй башлағас, хужалары шундай дөрөҫ ҡарар ҡабул итә: "Беҙҙең хорват халҡын донъя кимәлендә тоҡомло аттарыбыҙ танытты, уны хатта Наполеон менеп йөрөгән", - тип, аграр индустрия белгестәренә заказ биреп, ошо тоҡомдоң пони, лилипут, карлик тоҡомдарын да барлыҡҡа килтерәләр. Уларҙы бала-сағаларҙы йөрөтөр өсөн ҡулланалар. Малдарҙың иҫәбен булдыралар, республика хужалыҡтары буйлап тараталар ҙа, һан буйынса шул бер кимәлде тоталар. Липициан тоҡомоноң легендаһын яҙалар. Һәр хорват шул ле-

# ХАЛЫҠ БЕҘ!

## даныбыҙға яҫҡыналар...

- Татарстандар Башҡортостандан һатып алынған йылҡылар хаҡында, хатта башҡорт-тоҡонан да бәләкәйерәк тоҡомдо таптыҡ, тип әйтергә маташа. Әммә уларҙың да һыртарында ҡара һыҙаттар ята бит. Һыҙаттары бар икән - ул, һис шикһеҙ, башҡорт йылҡыһы. Ә беҙҙең фермерҙар йылҡыларҙы ситкә һата икән, был инде шәхси бизнес, бөтөнләй икенсе тармаҡ һәм уларҙың быға тулы хоҡуғы бар. Ошо урында хорваттарҙы һәм төркмәндәрҙе миҫалға килтерер инем. Хорватиялағы липициан тоҡомло аттарҙы ла, Төркмәнстандағы ахалтекин тоҡомло аттарҙы ла дәүләт кимәлендә ҡурсалауға алғандар, уларҙы сит илдәргә сығарыу тыйыла. Әйткәндәй, Башҡортостанда эйәрле-йүгәнле, менергә өйрәтелгән башҡорт тоҡомло йылҡынан ат кимәленә еткерелгән аттар һаны буйынса фермер Хәсән Иҙиәтуллиндың хужалығы беренсе урында тора ине. Уның тырышлығы менән бынан 6-7 йыл элек кенә унда 30-40 өйрәтелгән, эйәрле-йүгәнле башҡорт тоҡомдары тупланды. Ул һәр ваҡыт уларҙы ярышҡа әҙерләнә, Мәскәү тарафтарына һатып, аҡса ла эшләне. Татарстанға һатылғанға тиклем беҙ ошо аттарҙы менеп, Салауат Хәмиҙуллин етәкселегендә тарихи сюжеттар, башҡорт яугирҙары тураһында тиҫтәләгән фильм төшөрөп өлгөрҙөк.

**Халҡыбыҙҙа шундай матур һәм тәрән мәғәнәле бер мәҡәл бар: урлаған бер ғәйепле, урлатҡан мең ғәйепле. Бөгөнгө хәл-торошта кем ғәйеплерәк?**

- Бер яҡтан, республикабыҙҙағы институттар ғилми-фәнни яҡтан әҙҙемләшмәйенсә, бәлки, йомшаҡлыҡ күрһәтәләр. Икенсе яҡтан, Ауыл хужалығы министрлығынан баш-

орт ерлегендә барлыҡҡа килгән ҡиммәттәребеҙҙе, ҡомартҡыларыбыҙҙы (башҡорт йылҡылары, башҡорт бал ҡорто) ниндәй замандарҙан халыҡтың ауыҙ-тел ижадынан, фәндән төшөрөп ҡалдырмай, китаплы халыҡ булараҡ, яҙып, теркәп, һаҡлап килгәнбеҙ икән, беҙҙең бөтөн байлығыбыҙҙы күршеләр ҙә, башҡалар ҙа үҙләштерергә тейеш түгел, быға юл ҡуйырға ярамай. Үткән йылдарҙа ҡурайға яҫҡындылар, былтыр башҡорт йылҡыларына...

Беҙҙең матди-мәҙәни, тарихи ҡомартҡыларыбыҙҙың, брендтарыбыҙҙың яҙмышы бары тик башҡорт халҡынан ғына тора. Уларға бөгөн хужа булабыҙмы, әллә иҫәпһеҙҙең ҡуйы теүәл, тигән кеүек, хужаһыҙлыҡ күрһәтәбеҙме - үҙебеҙгә бәйле барыһы ла. Күршеләрҙең шундай ҡылығы беҙгә тағы ла нығыраҡ тырышырға, яуаплылыҡ алыуға этәргес булырға тейеш. Халыҡта бер әйтем бар: "Арғымаҡҡа ҡушарлап менгәшмә, үҙең өйрәтеп мен". Күршеләр ҙә, үҙебеҙ ҙә шуны онотмаһаҡ ине.

**Йылҡысылыҡ тип, нисектер, тар мәғәнәлә генә ҡарарға күнеккәнбеҙ, ә бит әңгәмә барышында уның киң ҡырлы булыуы, тормошобоҙҙоң төрлө өлкәләренә ҡағылышлы булыуы асыҡлана башланы. Әле бит йылҡыларҙың төҫтәрен дә тулыһынса белеп бөтмәйбеҙ...**

- Йылҡысылыҡ үрсеһә, унан ат яратыу сәнғәте халыҡ тарафынан йылдан-йыл үҙләштерелеп торһа, уның терминдары ла йәшәй. Әле беҙ, ир уртаһы кешеләр, бәләкәй саҡта белеп ҡалғанлыбыҙҙы ғына хәтерләп һөйләйбеҙ. Ә бала саҡтан белмәй үҫкән бөгөнгө быуындар иртәгә нимә эшләргә тейеш? Тимәк, "Тормош һабаҡта-

нып ҡала алған. Улар малсы, көтөүсе булып, йылҡысылыҡты, эре малдарҙы үрсетеп, төрлө тоҡомло малдарҙы ҡарап, ошо һөнәр кешеләрен иң беренсе милли профессия тип иғлан итеп йәшәп яталар. Евросоюздың бер фастфудын да һатып алмайҙар, үҙҙәрен ит ризыҡтары менән тулыһынса үҙҙәре тәьмин итәләр. Үҙҙәрендә етештерелгән сифатлы ризыҡты ғына ашайҙар. Беҙҙең кеүек, сәхнә кейеме кейеп байрам итмәйҙәр, эшләгәндә лә ғәҙәти милли кейемдә йөрөйҙәр, милли асылдарын ҡәҙерләп һаҡлайҙар. Беҙҙә милли кейем сәхнә сыбарлығы менән боҙолоп бөттө бит хәҙер.

Милли йылҡысылыҡты тергеҙеһе, ат яратыуҙы аяҡҡа баҫтыраһы бар. Унан инде йәшелкенсәктең, ир-аттың эйәргә ултырып, сабып барышлай йәйәнән уҡ атыусы мәргәндәребеҙҙе барлыҡҡа килтереренә лә күп ҡалмай. Шуның өсөн ауылдарҙа йылҡы үрсетеүсе хужалыҡтар, фермерҙар, йылҡыларҙан ат яһаусылар, өйрәтеүселәр кәрәк.

**Башҡортостандың элекке Башлығы Рөстәм Хәмитов власҡа килеү менән, башҡорт аттарын брендҡа әйләндерәйек, тигәйне лә...**

- Әйтеү менән эшләү бер түгел шул. 2012 йылда мин дә уның менән шәхсән килешеп, ышанып, Бородинола буласаҡ 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығына арналған ҙур халыҡ-ара хәрби-тарихи фестивалгә Башҡортостандан 5 ат алып барыуҙы һөйләшеп-килешеп бөткәйнем. Ләкин ул, юл сығымдарын еңел хәл итергә уйлап, Тверь өлкәһендәге дуҫы Веремеенкоға шылтыратҡан, ә ул үҙ сиратында беҙгә унда йәшәгән башҡорт тоҡомдарын алып килергә вәғәҙә итте. Ваҡыт еткәс, Тверь өлкәһендә сир таралып, карантин иғлан ителде, ә беҙ,

гендаға йәбешеп ята. Шуның менән туристарҙы ылыҡтыралар. Наполеон менгән аттың тоҡомон күрер өсөн генә Хорватияға агротуристар ағыла. Бренд тип атағас, аттарҙың иҫәбен 2 меңдән арттырмайҙар. Бренд булғас, уны ситкә сығармайҙар, бары тик ил эсендә тоталар, сифатын яҡшырталар, өйрәтәләр. Беҙгә уларҙан үрнәк алырға кәрәк.

**Республиканың барлыҡ муниципалитеттары үҙҙәренең гербын булдырҙы. Уларҙың бер ни тиклемендә аттар һынландырылған. Әммә һеҙ күптән инде Башҡортостан Республикаһы символдарын эшләгәндә лә геральдика ҡанундары буйынса үҙ фекерегеҙҙе еткерә киләһегеҙ. Ошо муниципалитеттар геральдикаһы буйынса нимә әйтерһегеҙ?**

- Европа был ҡағиҙәләрҙе яҡшы аңлай, беҙ генә, өйрәнмәгәс, белмәгәс, һанға һуҡмағас, әлеге көндә лә интуиция менән генә йәшәйбеҙ. Башҡортостан муниципалитеттарының гербтарын рәссамдар төп принциптарҙы аңламайынса эшләне: гербҡа атты төшөргәс, уның өҫтөнә мотлаҡ рәүештә эйәр һалынырға, мотлаҡ йүгән булырға, мотлаҡ рәүештә ялы таралған, мотлаҡ рәүештә уның ҡойроғо йә төйнәлгән, йә киҫелгән булырға тейеш. Ғөмүмән, Халыҡ-ара геральдика фәнендә гербтарға йылҡы малын төшөрмәйҙәр. Ә беҙҙә күп осраҡта ҡырағай аттар төшөрөлгән. Тимәк, йылҡы ҡиәфәтендә гербта мал төшөрөлгән икән, был территория үҙләштерелмәгән, ҡаралмаған, тәрбиәләнмәгән, цивилизация килмәгән, ҡырағай хәлдә, тигәнде аңлата.

**Бөгөн беҙ, башҡорттар, башҡорт тоҡомло йылҡыларыбыҙҙы, аттарыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу өсөн нимәләр эшләй алабыҙ?**

- Йылҡыларҙан аттар тәрбиәләү өсөн башҡорт атының тыуған көнөн билдәләргә кәрәк. "Аҡбуҙат", "Урал-батыр" эпостарында Аҡбуҙаттың күлдән сыҡҡан миҙгелен билдәләп, ошо ваҡытты Башҡортостанда Башҡорт аты көнө тип иғлан итеүҙе кәрәк тип табам. Шул уҡ хорваттар ҙа апрелдең һуңғы бер көнөн, липициан - хорват аты көнө, тип киң билдәләй. Төркмәндәрҙә лә ахалтекин атының тыуған көнө билдәләнә. Халыҡ-ара йылҡы көнө тигән байрамдар бар. Ғөмүмән, беҙгә донъяла, башҡа халыҡтарҙа йылҡы һәм аттарға бәйле нимәләр бар, шуларҙы өйрәнергә кәрәк, сөнки улар ҡасандыр беҙҙә лә булған, әммә донъяларҙың шартлы үҙгәреше һөҙөмтәһендә үҙебеҙ ҙә үҙгәргәнбеҙ. Асылыбыҙға ҡайтыр өсөн үҙебеҙҙә булғандарҙы ла киренән йыйнарға тейешбеҙ.

Икенсенән, уҙған йылдарҙа Баймаҡ районында 90 меңлек Президент грантына Ат байрамы үткәрҙеләр. Был ғына суммаға Ат байрамы үткәреп булмай. Уны маҡсатлы рәүештә, дәүләт программаһын ҡабул итеп, ул оҙаҡ йылдар дауам итһен өсөн һәр милли байрамдың эсенә ат яратыу конкурстары индереп, милли йәрминкәләр, аттарҙы өйрәтеүселәрҙең конференцияларын, фестивалдәрен, ярыштарын ойоштороп үткәреү маҡсатка ярашлы булыр ине. Венгрҙар шулай эшләй: һәр кем үҙ хужалығынан килтереп, атының һөнәрен күрһәтә - кемдекелер бейей, кемдекелер тыпырлай, кемдекелер артына ултыра һ.б. Милли кейемле ир-аттар ғорурлыҡ менән көтөүсе һөнәрҙәрен күрһәтә, оҙон сыбыртҡылар менән сауҙа итәләр, уларҙы һәр малай-шалай ҡуллана белә. Беҙҙә лә шулай булырына ышанып йәшәйек: кемдер эйәре менән маҡтанырға тейеш: үҙем эшләнем, был сергетышты ҡатыным тегеп бирҙе, йүгән - олатайымдан ҡалған мираҫ; ә был юртаҡты ҡолон сағынан тәрбиәләнек, улым өйрәтте, эйәрҙә ейәнем ултыра...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Юҡҡа ғына халыҡ йырында, атым да бар, дәртем дә бар, әммә һөйгән йәрем юҡ, тип йырламағандар. Ир-егеттәр атлы булғас ҡына үҙенә йәр эҙләгән. Беҙҙең әле йылҡыбыҙ ғына бар, дәртебеҙ ҙә һүрелгән, атыбыҙ ҙа, йүгән-эйәрҙәребеҙ ҙә юҡ хәлендә. Атыбыҙ булһа, кейеҙ баҫыу, эйәр-өпсән эшләү, тимерселек кеүек кәсепселек, ошо нигеҙҙә эшҡыуарлыҡ та үҫешер ине. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, ошо барлыҡ теләктәрҙе мин Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының сираттағы йыйыны сығыштарында, ҡарарҙарында ишеткем һәм улар буйынса эш һөҙөмтәләрен күргем килә", - тип йомғаҡланы һүҙен Илдар Шәйәхмәтов. Бәлки, был теләктәр "Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһының" бер йүнәлеше булырға ла лайыҡтыр?**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ
әңгәмәләште.

Ҡалала сатан-сулаҡ та, "самауырҙар" ҙа, "танкистар" ҙа етерлек булып сыҡты. Тора-бара улар үҙҙәре кеүек башҡаларҙы ла белә, таный, йыйылышып ала, эсеп ҡаңғырыша торған булып киттеләр. Рамаҙан менән Вася һымаҡ эшләгән, ризыҡты хеҙмәт итеп тапҡандарҙан тыш, бында хәйер-саҙаҡа менән көн күргәндәр ҙә аҙ булманы. Һатып, урлатып бөтөүҙән ҡалған миҙалдарын тағып, алам-һалам кейемдә урам саттарын, вокзал-ашхана тирәләрен ҡыҙырыуҙы кәсеп итеп алған һәм шулайтып дүртәр-бишәр йыл ғүмер һөргәндәр ҙә байтаҡ ине.

Шул касафатлы кистә дуҫтарҙы аралашып йөрөгән һыңар аяҡлы ҡарт фронтовик Коля фатирына ҡунаҡҡа саҡырғайны. Бабайға нисә йәш тула булғандыр инде, уныһы мөһим дә түгел, ә унда бүлмә тултырып әллә ниҙә бер күрешә торған таныштар йыйылыуы ҡәҙерле ине. Эстеләр. Тост артынан тост күтәрҙеләр. Еңеү өсөн. Ятып ҡалған дуҫтар өсөн. Яндырылған ерҙәр өсөн. Һөйөлмәгән йәрҙәр өсөн... Василийҙың немецтар ҡулынан һәләк булған Катяһы, Яковтың Ленинград блокадаһында туңып үлгән Маргаритаһы, дядя Коляның бомба аҫтында ҡалған Женяһы, Славаның гәрип иренән баш тартҡан Аннушкаһы, Рамаҙандың уның ҡайҙалығын да белмәгән Зәлифәһе өсөн ҡабат-ҡабат сәкәштеләр. Араҡыны танауҙары, ҡуңыр сикәләре буйлап ағып төшкән йәштәренә ҡушып ғолҡолдатып эстеләр ҙә, ҡара икмәк еҫкәнеләр. Унан йырлаштылар. Унан бейергә төштөләр. Унан һуң булған хәлдәрҙең ахыры бына әлеге поезда бәүелешеп китеп барыуға килеп ялғана.

## Валаам

Утрауға пароходта килеп төштөләр. Унан тағы ла йөк машиналарына тейәлеп, яр буйлап арыуыҡ ара барҙылар ҙа, ылауҙары текә ярға үрмәләп менеп, ярым емерек таш ҡоймалар менән уратылған ҡоролмалар эргәһенә килеп етеүгә, ҡапҡаларҙы асып ҡаршы алдылар. Ҡораллы һаҡ, оҙатҡандағы кеүек һалдаттар отряды, аҡ халатлы санитарҙар төркөм-төркөм булып һәр машинаны ҡабул итте. Күтәреп, йөкмәп, носилкаға һалып, ҡултыҡлап, гәриптәрҙе эскә ташыу башланды.

Рамаҙан кеүек "танкист"ар бер-береһен төшөрөштө, ярҙамдан баш тарттылар. Кемдең арбаһы ҡуша килгән, шулар арбаларына менеп ҡунаҡланы, кемдәрҙеке киткәндәге ыҙғыш йә башҡа сәбәптәр арҡаһында юғалып ҡалған, улары ярым кәүҙәләрен ҡулдарында һикерәнләтеп алып китте. Һалҡын ҡараңғы коридорҙар буйлап йөрөтә торғас, бер-бер артлы бүлмә ишектәре асылып, яҡты төштә һәм килеүселәр бүленешеп тороп ҡала башланы. Рамаҙан менән Василий таныштары менән бер бүлмәгә урынлашырға тырышты. Бүлмә тигәндәре лә егермеләп карауат теҙелгән тәпәш түбәле, бәләкәй тәҙрәле ҡотһоҙ казарма ине. Урыҫтың христиан тарихнамәһе буйынса, борон-борон заманда, христиан динен таратып йөрөүсе апостол Андрей Первозванный Евангелиеһын һөйләй-һөйләй Төньяҡҡа табан юл ала. Днепр һәм Волхов йылғаларын үткәс, Христос шәкерте Нево күле буйына барып сығып, Валаам тауҙары үренә таш тәре ҡаҙап китә. Был хәлдән һуң туғыҙ йөҙ йылдар үткәс, Көнсығыш илдәрҙән килгән Сергий һәм Герман исемле изгеләр ошо ерҙә монахтар ойошмаһы төҙөй. Монахтар әлеге монастырҙы күтәрә лә, күрәһең. Һәр хәлдә, христиан тарихында был ҡоролмалар X - XI быуатта уҡ монастырь булараҡ телгә алына. Ә инде уның ысынбарлыҡ тарихы XIV быуаттан башлана. "Валаам монастыры хаҡында һүҙ" тигән яҙмаларҙа уның нигеҙе 1407 йылда ҡорола, тиелә. Ул заманда был архипелагта алты йөҙҙән ашыу монах йәшәй һәм утрауҙы унышлы ерҙәрҙең береһе итеп тота. Әммә күрше шведтарҙың туҡтауһыҙ һөжүм итеүенән һәм яу менән килеүенән был утрау яйлап ярлыланып, монастырҙар бушап ҡала. Артабанғы быуаттарҙа ағастан төҙөлгән ҡоролмалар янып, көлө күккә оса, ниндәйҙер батшалар тарафынан ҡабаттан тергеҙелә, храмдары күтәрелеп ултыртыла. Бер быуын Санкт-Петербург митрополиттары ҡулында ла була, ҡайһылыр йылдарҙа Финляндия епархияһына ла инә. 1940 йылда был ташландыҡ биналарҙа финдарҙың боцмандар һәм юнгалар мәктәбе эшләп ала. 1944 йылдан финдар утрауҙы ташлап киткәс, монастырь залдарында ниндәйҙер завод хужалыҡтары ла, хәрби ҡоралдар склады ла урынлашып тора. Һәм, уҡыусыларыма мәғлүм булыуынса, 1949 йылда уның тәүге йәшәүселәре булып үрҙә телгә алынған геройҙарыбыҙ килә.




* * *

Төндә өшөп уянды Рамаҙан. Шинель туҡымаһынан тегелгән бер ҡат одеял уның арыҡ тән йылыһын тотмай ине. Аҫтағы һалам түшәк тә йоҡарып, урыны-урыны менән ҡаҡланып ҡалған. Еҫе лә - ай-һай үҙенең, кемдәрҙең генә нәжес-ярауы һеңмәгәндер, күрәһең...

Бәләкәс тәҙрәләрҙән һарҡып төшөп, оло бүлмәгә юлаҡ-юлаҡ яҡтылыҡ йүгерткән ай нуры аҫтында ике тиҫтәләгән ир-егет хырылдап йоҡлай, ара-тирә һаташып һүгенгән, ыңғырашҡан, төшөндә һөйләшеп ятҡандары ла бар. Шунда ла һәр береһе тоҡос кәүҙәләрен бала биләгән кеүек итеп ҡытыршы одеялға ураған. Гөбөргәйелдәй булып баштарын эскә тыҡҡандар.

Күмәк хырлау хорын тыңлап, эсе бошоп ята Рамаҙандың. Эсе боша, тип кенә әйтеү аҙҙыр. Үлтереп түше яна уның, ялҡыны үңәсе буйлап өҫкә күтәрелә лә, уфтанғанда тамаҡ төбөнән аһына ҡушылып сыға кеүек. Был тороштан ҡотолоп та, онотолоп та булмағандай. Илағыһы килә. Тик элеккеләй һулҡылдап, түгелеп илай ҙа алмай хәҙер. Йәштәре лә сыҡмай хатта. Әммә ҡалайтыптыр эстәге яныуҙан ҡотолғо, бер аҙ булһа ла баҫып торор сара тапҡы килә. Асырғаныуҙан битен устары менән ҡаплап, һулҡып ята торғас, теленә бер йырҙың һүҙҙәре килде:

*Йөрәккәйем баҫылғандай,*
*Күңелдәрем асылғандай,*
*Бер ултырып йырлаһам...*

Мәжлес йыры был. Әсә-атаһының, ул үҫкәндәге ололарҙың табын йыры. Урындыҡта теҙелеп ултырған ҡунаҡтар, һитә балынан хисләнеп, ҡурай моңонан илһамланып, йыр башлап ебәрәләр ине. Атаһы ла моңло ине бит, уны ҡат-ҡат һорап йырлаталар ине. Рамаҙандың үҙенең дә тауышы һәпте юҡ. Балараҡ сағында апайҙары тәм-томға алдаштырып йырлатты, унан үҫә-бара, оялып, ризалашмаҫ булды. Яңғыҙ-ярпы урман-тау араһында ҡысҡырып йыр һуҙып ебәрә торғайны, атаһынан ишеткәндәрҙе унынса урын-еренә еткереп башҡара алыуын да самаланы, тик кеше араһында ауыҙын асманы. Мәктәптә уҡығанында ла моңон самалаған уҡытыусылар, аҙаҡ йәштәр күпме генә өгөтләмәһен, йырламаны Рамаҙан. Уның өсөн йыр - ул күңелеңде асып һалыу, яттарҙы эсеңә индереү кеүек тойолдо. Йырҙағы һүҙҙәр - уның әйткәндәре, хистәр уның тойғолары кеүек булып күренәләр кеүек булды. Һәм бөтөн был күренеш уны йомшаҡ, яҡлауһыҙ итә һымаҡ ине.

Әле уның йырлағыһы килде. Йырҙарҙағы бөтөн әйтелгән-һөйләнгәндәр ҙә бөгөн уның хәлен еңеләйтә алырҙай, торошон сағылдырғандай һымаҡ.

Егет башта эстән генә йырланы. Унан шыбырлап ятты. Ахырҙа, быға ғына ҡәнәғәт була алмай, япмаһын һыпыра ташлап асып атты ла, һикереп төшөп, сығып китте. Шыңғырлап торған яҙғы таң һауаһы һалҡынын да, ҡулына уралған былтырғы ҡыу үлән үрмәүестәрен дә тойманы, күҙәре күренеп ятҡан һыуға ҡараған текә яр битенә тиклем ашығып һикерәнләп барҙы. Унан диңгеҙҙәй булып йәйелгән зәңгәр бушлыҡҡа төбәлеп тора торғас, аҡрын ғына итеп йырлап ебәрҙе:

*Иртән дә томан, кистә лә томан,*
*Был томанҡайҙарға ни булған?*
*Тауға ла менеп, ташҡа баҫып,*
*Һин ҡарарһың, йәнем, мин булмам.*

Иҫенә төшкән, хәтерләгән йырҙарының барыһын да һуҙҙы, дауам итә алмаһа, икенсеһенә күсеп китте, ҡайны урындарында һүҙһеҙ генә көйләп тә ҡуйҙы, әммә туҡталманы, йырланы ла йырланы.

*Уйылып ҡына аҡҡан Уйыл һыуы*
*Уйландыра уйсан да ирҙәрҙе.*
*Уйландырып ҡалмай, моңландыра,*
*Һағындыра тыуған да ерҙәрҙе...*

Яҡтырғансы, медчасть урынлашҡан яҡтан санитарҙар сығып йөрөй башлағансы ултырҙы яр башында Рамаҙан. Артыҡ көсәнмәй генә сығарған моңо аҫҡа - күл өҫтөнә йәйелеп тарала торҙо. Ә утрауҙы тотошлайы менән уратып, күҙ ҡарауы араларҙа ла сиге күренмәй тулҡынып ятҡан күл, бәлки, былдай моңдо ла тәүге тапҡыр ишеткәндер әле? Бәлки, ҡыҙғангандыр егетте, бәлки, ҡыҙыҡ күргәндер, ә, бәлки, аңлағандыр ҙа әле - кем белә? Һәр хәлдә, уға күңелен бушатты Рамаҙан, әллә ниндәй еңеллек, рәхәтлек тойоп ҡалғандай булды.

* * *

Төн үткәргән биналарында тағы шау-шыу ҡупҡан. Санитарҙар бүлмәләр буйлап халыҡты уятып үтә, йыуыныу һәм ашау урындарына ҡайҙа барырға икәнде аңлата. Коридорҙа йыуынырға барырға теләмәгәндәр санитарҙар менән әрепләшә. Шулай ҙа битен йыуғаны-йыумағаны ла йорттоң аш еҫе килгән яғына ҡарай ҡыбырлай. Бейек түбәле оло залға буйҙан-буйға ултыртылған өҫтәлдәрҙең ике яғынан эскәмйәләр теҙелгән дә, аш-һыу йүнәткән яҡҡа был өҫтәлдәрҙең береһе арҡыры ҡуйылған ине. Шуның артында дәү бактары аша саҡ күренеп өс-дүрт ашнаҡсы тора. Залға баштарын тығып, ни барын аңғарған ир-ат ашығып килеп сиратҡа баҫа, этешә-төртөшә, ҡыҙыуыраҡтары айҡаша ла башланы. Ашнаҡсыларҙың тәртип талап итеп ҡысҡырыуы ла, өгөтләп маташыуы ла файҙаһыҙ. Ҡалай булғанда ла тимер сеүәтәләргә өйөлгән бутҡа менән икмәктәрен алып китә, ҡайҙалыр ҡунаҡлап ашай торалар. Ниһайәт, сират таралып бөтөп, һауала тимер ҡалаҡтар тыҡылдауы ғына аҫылынып ҡалғас, ашханаға хәрби кейемдәге һәм аҡ халаттағы бер төркөм инеп баҫты.

- Хәйерле иртә, иптәш фронтовиктар! - тип һүҙ башланы уларҙың урта йәштәрҙәгеһе. Уға унан-бынан "Хәйерле", "Здравия желаем", "Здорово, гражданин начальник" тигән яуаптар килеп етте.

-Нисек төн уҙғарҙығыҙ? Барығыҙға ла урындар еттеме? Өшөмәнегеҙме?- тип хәстәрле тонда төпсөндө һаман хәрби. Тик был һорауҙарына яуап биреүсе табылманы. Гәриптәр уға һынаулы ҡарап төбәлеп ҡалғайны.

- Ярай, улайһа... Мин Игнатьев Федор Васильевич булам, Советтар Союзы капитаны һәм ошо пансионаттың директоры. Ә был, - тип эргәһендәге сал сәсле оло иргә табан бороло, - Самоцветкин Тарас Соломонович, пансионаттың баш табибы һәм минең урынбаҫарым. Уның йәнәшәһендәге баш медсестра Нина Харитоновна, быныһы...

Баҫып торғандарҙың күптәре ҡатын-ҡыҙҙар ине. Кеме ашхана хужаһы, кеме хужалыҡ етәксеһе, ҡайһылары нимәләрҙелер ойоштороусы булып сыҡты. Тик тыңлап ултырыусыларға былар һис кенә лә мөһим дә, кәрәкле лә түгел. Шулай ҙа тамағы туя барған халыҡ тыныс ҡына тыңланы ла, директор һүҙен "Һорауҙар бармы?" тип тамамлағас, гөйләшеп алды. Тик уларҙың был баҙарын тағы ла хәрбиҙең бойороҡло өндәүе баҫты:

- Отставить! Ҡул күтәреп, сиратлап һорайбыҙ!

Әллә нисә кеше бер юлы ҡулын һуҙҙы. Игнатьев уларға баш ҡаҡты. Күптәрен бер үк һорау борсой ине:

- Ни өсөн беҙ бында?
- Беҙҙе нимә көтә?
- Нимәгә мине бында көсләп алып килделәр?
- Аңлашылды, - тип башланы яуабын хәрби. Унан яурындарын турайта биреп, тауышын көрәйтә төштө. - Совет иле гәрип фронтовиктарын ҡарау өсөн ил буйынса ошондай бер нисә пансионат асты. Бында һеҙҙе ашатасаҡтар һәм ҡараясаҡтар...
- Беҙ үҙебеҙҙе үҙебеҙ ашата инек!
- Мин эшләп йөрөнөм!
- Кем һораған һеҙҙән был пансионатты?
- Иптәштәр! - капитан былдай ҡаршылыҡ булыуын яҡшы белгән, күрәһең, һәм бер ҡарыш та сигенергә теләмәй, киреһенсә, һөжүмгә күсте. - Совет фронтовиктары эсеп-тәҙып йәки йорт-ереһеҙ урамда йәшәргә тейеш түгел! Һеҙ тыуған ил өсөн ҡан ҡойған ир-егеттәр! Һеҙҙе илебеҙ ташламай! Шулай булырға тейеш! Ил үҙенең батырҙарын онотмай.

Был хәбәрҙән тыңлаусылар бер аҙ уйға ҡалды. Унан тағы һорауҙар яуҙы:

- Ә нишләп көсләп алып киттеләр?
- Мин былай ҙа насар йәшәмәй инем!
- Бында бит тунып үлергә була!
- Иптәш фронтовиктар! - аҡ халатлы оло ир ҡулдарын күтәрә төшөп алғараҡ атланы, халыҡ тағы тынып ҡалды. - Мин хәрби хирург, һуғыштың башынан аҙағына тиклем госпиталдән сыҡмаған табип. Һеҙҙең кеүек яралылар минең ҡулдан күп үтте. Бәлки, кемегеҙгәлер операция ла яһағанмындыр әле. Һеҙҙең хәлде мин яҡшы аңлайым.

**(Дауамы бар).**

ЗАУЫҠ



Йомабикә ИЛЬЯСОВА

# БИТЕМДӘГЕ ҺӘР ҺЫР ҺӨЙЛӘП ТОРА

## Ниҙәр йыйылғанды йөрәгемә

### Салауат

Юҡ, башҡаса була алмай ине,
Башҡа юлдар уға юҡ ине,
Уның өсөн хаҡлыҡ яулау юлы
Йәйәһенән осор уҡ ине.

Юҡ, башҡаса була алмай ине,
Ҡырҡып алған саҡта танауын,
Тыныс ҡалыу, ғорур ҡалыу менән
Үтте халыҡ, тарих һынауын.

Юҡ, башҡаса була алмай ине,
Күрер ғазаптары, язаһы,
Диңгеҙ ҡаяһына ҡаҙаҡланғас,
Туҡтамайса һыҙлар яраһы.

Юҡ, башҡаса була алмай ине,
Һәләкәтле яуға ингәндә,
Белә ине: батырлығы хаҡы
Маяҡ булып ҡалыр иләндә.

### Вәлиди

Башҡортостан боҙлоҡ кеүек ҡатты,
Вәлидиҙең тынғас ораны.
...Бар хыялдар утлы өйөрмәлә
Батырҙарҙы итте ҡорбаны.

Башҡортостан усаҡ булып янды,
Вәлидиҙең тынғас ораны.
Шул усаҡтың ҡайнар ҡуҙҙарынан
Күтәрелде илем юғары.

Башҡортостан аҡ тирмәләр ҡорҙо,
Бөйөк килеш ҡайтҡас исеме.
Халҡы өсөн йөнен фиҙа ҡылһа,
Тик мәңгелек шәхес үлсәме!

### Башҡорт аты

Ҡандай тәрән дарьяларҙы
Имен-аман кисеп сығып,
Юлда көткән ут-ялҡынды
Буйһондороп, ярһыу сабып,
Осҡан ҡоштарҙай көйөлеп,
Ябырылып дейеү һымаҡ,
Башҡорт яугирҙары менән
Дандар яулаусы арғымаҡ
Елгән саҡта һабантуйҙа,
Еңәйем, тип етеҙлектә
Осош та бар, батырлыҡ та
Уҙышыусы был тиҙлектә.
Башҡорт аты, һинең сәмен,
Сыҙамлығың һәм гәйрәтең,
Күңдәмлегең кәрәк саҡта -
Халҡымдыҡы бар гәҙәтең!

### Хәтер

*Һәҙиә Дәүләтшина рухына*

Атлап барған кеүек, гүйә,
Тере ҡуҙҙар өҫтөнән,
Һин һаҡланың заманыңды
Ғәзелһеҙлек көсөнән.

Йәнде йотор ул һаҙлыҡта
Һин сәскә булып ҡалҡтың,
Һине шуға сәскәһеләй
Ҡәҙерләй туған халҡың.

### Ҡоштар

Беҙ күнегеп бөткән ғәҙәти хәл -
Яҙын ҡабат ҡоштар ҡайтыуы,
Ә уйлаһаң, оло мөғжизә бит
Тыуған ерҙең шулай тартыуы.

Тик елгә хас ныҡышмаллыҡ менән
Улар үтә алыҫ аралар,
Беҙ аңламаҫ тылсым менән ҡоштар
Осор юлдарын бит табалар

Ошо кескәй генә ҡоштар өсөн
Биләмә бит тотош Ер шары,
Тәбиғәттең бөйөк көсө менән
Тағы ҡайта беҙгә ҡош йыры.

...Бары һинең менән минең ара,
Ә артабан, гүйә, тормош юҡ,
Нисә йылдар инде һөйөүҙе лә
Бикләп ҡуйыр өсөн тырыштыҡ.

Ана, ҡоштар, донъя буйлап осоп,
Һөйөү моңон ихлас тарата,
Улар белә беҙ белмәгән серҙе,
Улар йәшәй, улар ярата!

### Йәшен

Кеше ғүмерен оҡшатам
Йәйге ярһыу йәшенгә,
Һөрән һалып килә лә ул,
Аҙаҡ шып-шым йәшенә.

Бар донъяны уйната ул
Дөрләп торған утында,
Һәләкәт тә ураи үтмәй,
Ҡалғас йәшен усында.

Унан ҡоя ямғыр булып,
Шифаһын бүлеп ихлас.
...Һәр ғүмер өлөш ҡалдыра,
Йәйге йәшендәй тынғас.

### Таң

Түгелгән мәк таждарылай
Таң юғалды офоҡтан,
Ошо мәлде ергә сабый
Тыуыуына оҡшатам.

Һәр яңы көн - бер ғүмерҙәй,
Ҡәҙерен белә һуң кем?
Ҡайны саҡта бушлыҡ һымаҡ,
Юҡҡа үтеп китә көн.

Аҡҡош менән ҡарағоштай
Көн менән төн уҙыша,
Был осошта артта ҡалһаң,
Үпкәләмә яҙмышҡа.

### Ер

Ғаләмдә һыуыҡ бушлыҡта
Ер һулҡый, гүйә, йөрәк,
Уның аяуһыҙ тынлығын
Боҙорға итеп йөрьәт.

Берсә кескәй ҡошсоҡ кеүек
Ул ҡанатын ҡаҡҡандай,
Тик үҙеңдә тереклекте
Һаҡлап тора ҡалҡандай.

### Икмәк

"Икмәктән оло булмағыҙ,
Төшмәһен ергә валсыҡ... "
Был нәсихәт изге ине
Кемдәр кисергән аслыҡ.

Туҡ замандарҙа үҫһәк тә,
Белдек икмәк ҡәҙерен,
Игенсе, гүйә, бал ҡорто
Тултырыусы кәрәҙен.

Хәҙер инде игенсене
Артыҡ бармайҙар данлап,
Ул баҙар иҡтисадында
Маташа урын даулап.

Икмәктең дә юҡ ҡәҙере,
Ташлайҙар бер сүп һымаҡ,
Баһаһы - тик кибет хаҡы,
Кем торһон изге һанап.

Икмәкте оло иткәндә,
Ҙурланған бит ул хеҙмәт,
Илде күтәргән быуынға
Күрһәтеү булған хөрмәт.

...Тамаҡ туҡ та, тик намыҫым
Асыҡҡан сабый кеүек
Онотолған ҡиммәттәрҙе
Һағына ҡара көйөп.

### Тамға

Егермелә генә инем әле,
Тәүге һөйөү кемгә түгел таныш,
Әммә уның әсе һабағынан
Күҙҙәремә ҡунды тәүге һағыш.

Унан көндәр, айҙар, йылдар яҙҙы
Нимә кисереүҙе йөҙҙәремә,
Битемдәге һәр һыр һөйләп тора
Ниҙәр йыйылғанды йөрәгемә.

Яҙмыш ҡына түгел, һәр беребеҙ
Ижад итә шулай йөҙөн үҙе,
Берсә ялҡындарҙа өтә битен,
Берсә һыҙа әйтә алмаҫ һүҙен.

Таштан рәссам ҡойған бер өлгөләй,
Ят та һымаҡ ҡай саҡ ошо йөҙөм,
Тик ул минә гәзиз, бар ғүмерем
Тамға итеп һалған тотош йөгөн.

* * *

Сәнскеле гөлдәр... Сәйер улар
Тик үҙҙәре белгән сер менән.
Эш бүлмәмдә тәҙрә төбөндәге
Кактус хайран итте бер мине.

Тыуған көнөм ине. Илле йәшем.
Эшкә килһәм, атҡан ал сәскә!
Ә был кактус тик бер сәскә ата
Бөтә йәшәүенә бүләккә.

Гөлдәр генә түгел, сәйер донъя:
Бына минә тулды илле йәш,
Ә ҡайҙалыр йәш ҡыҙ һөйөүенән
Түгеп ултыралыр ҡайнар йәш.

Ҡайҙарҙалыр әле һаман йәйҙәр,
Йылы елдәр унда иҫәләр,
Ә ҡайҙалыр ҡомһоҙ ҡараңғылыҡ
Бәндә ғүмерҙәрен киҫәләр.

Тик быларҙы ҡайҙан белә кактус,
Нисек тоя тормош айышын,
Нисек һиҙгән минең байрамымды,
Минең күңелемдең һағышын?

Үҙенең дә гүзәл мәле менән
Бүлешкәндә тыуған көнөмдә
Ул, моғайын, ихлас ынтылғандыр
Бәхет ҡабынһын, тип, йәнемдә.

Тик бер тапҡыр сәскә атыр кактус...
Тик бер тапҡыр булыр мәлдәр бар,
Һәр кемдең дә йөрәгендә улар
Һис бер ҡасан һүнмәҫ шәмдәлдәр.

* * *

Әсәһенең тубығында
Ултырған сабый кеүек
Тауҙар итәгенән ҡояш
Талпына сағыу көлөп.

Бына ул шаян һикереп,
Тауынан ҡуҡҡа күсә,
Кинәнеп тә өлгөрмәйһен,
Бала шулай тиҙ үҫә.

### Тамаҡ хаҡы

Бөйөк эштәр түгел, ябай хыял
Ҡала килде һәр саҡ ситтәрәк,
Көн итмешең өсөн эшләр кәрәк,
Осоштарға әле иртәрәк.

Һәр яҙ иген сәскән, көҙөн йыйған
Игенселәй мин дә йәшәнем,
Бейеклектәр менән алышырға
Теләгәндә ниндәй йәш инем...

Йылдар үтә, улар көтөп тормай
Тир түгеүҙе тамаҡ хаҡына,
Тик көндәлек бурыстарҙан азат
Ҡалыу юҡ шул минең холҡомда.

БАЛАҢА УҠЫ!

# БАТЫРҘАР ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТТӘР

## Ҡарас менән Аҡшан

Борон Яйыҡ буйында Ҡарас тигән мәргән уҡсы йәшәгән. Бер ваҡыт Ҡарас һунарға киткән саҡта ҡаҙаҡ сапҡынсылары туғайҙағы йылҡы өйөрөн ҡыуып алып киткәндәр. Ҡарас, быны ишеткәс, буҙ ҡашҡаһын менә һалып, ҡаҙаҡтар артынан япа-яңғыҙ сабып сығып киткән. Ҡыуып еткәс, ҡаҙаҡ башлығы алдына сығып баҫҡан да былай тигән:

- Мин яу килгәндә алдан сабыр Ҡарасмын, бер ваҡытта ла ал бирмәнем. Ә һин кем? Атаң кем, ырыуың кем, ҡайҙанһың? Буй-һының батырҙарса. Күргәс үк ялт әйләнеп туҡтай бирҙең. Шулай булғас, илеңдә тыуған батырһыңдыр. Әгәр ҡан түкмәй, тыуған илеңә ҡайтыр булһаң, йылҡыларымды ҡалдыр ҙа ҡайт. Ә инде алышҡың килһә, урын һайла. Мин һине хур итмәм, тәрбиәләп ерләп ҡуйырмын.

Ҡаҙаҡ батыры ла ҡурҡып тормай:

- Аҡша тигән атымдан бик күп йөрәктәр шаулай, һынашып ҡарамайынса, батырмын тип маҡтандың. Ҡулдағы малды ала алаһың икән - ал. Ҡулға төшкән малды былай ғына ҡалдырып китергә, бер истәккә баш эйергә мин һиңә ҡыҙыл яулыҡлы еңгәңдер шул. Үҙең бер йәш балаһың, уттай геүләп янаһың. Ана, күгәреп ятҡан күк арҡа - атышыр урының, һаҙаҡлы йөҙ батырҙан ҡанһыҙ нисек ҡотолмаҡ булаһың бер үҙең?

Ҡарас, быны ишетеү менән, Аҡша самалап күрһәткән арҡаға сабып барып етә лә, атышыуға яһана башлай. "Тәүҙә мин уның ҡалъяныңдағы һаҙаҡтарын ҡыра атайым. Мәргәнлегемде күреп, бәлки, ҡан түкмәйенсә генә малымды ҡалдырып кире ҡайтырҙар", - тигән ниәт менән "ҡуҙы яурын" тигән һаҙағын ала. "Ҡорос башаҡ тейгән саҡта ҡаҡлығып китһәң - һиңә хурлыҡ, ҡалъянды иҙгәнсе ата алмаһам - миңә хурлыҡ", - ти Ҡарас уғын тотоп. Шунан өҙәңгегә баҫып, кирелә биреп янын тартып ебәрә. Аҡшаның уң яҡлап асылған ҡалъяныңдағы һаҙаҡтары сыра-сыра булып, янъяҡҡа осоп барып төшә. Аҡша быға ғәжәпләнеп:

- Күрҙегеҙме был баланы, атышыуына ҡарағанда, бик яман күренә. Ҡалмыҡ батыры менән осрашҡанда ҡыймылдамаған йөрәгем һулҡ-һулҡ итеп ҡалды ғүй, - ти.

Шунан һуң үҙенең киҙәге буйынса Ҡарасҡа атырға йыйына. Ҡарас, Аҡша алышты дауам итерме-юҡмы, тип көтә. Аҡша батыр ҙа һүҙендә ныҡ тора, атып ебәрә. Ҡарас осоп килгән һаҙаҡты йәһәт кенә тотоп ала ла ҡалъянына һалып ҡуя. Хәҙер киҙәк - Ҡараста. Ул аҙ ғына уйлап тора ла, бәкеһен алып, һаҙағының башағын монап һындырып ала. Башаҡһыҙ һаҙағының осон бишкә телә лә Аҡшаға тоҫҡап атып ебәрә, һаҙаҡ тимер һауыттың биш дүңгәләгенән биш нәҙек уҡ булып үтеп, Аҡшан батырҙың күкрәген селтәр һымаҡ тишеп үтә. Аҡшан батыр, уй-бай, тип атынан йөҙтүбән ҡолап төшә. Башлыҡтарын юғалтҡан ҡыуғынсылар, йылҡы өйөрөн ҡалдырып, ҡайтып китергә мәжбүр була.

Ҡарас батыр Аҡшаны, йығылған урынында ҡәбер ҡаҙып ерләй ҙә, батырҙың баш осона бер һаҙаҡ ҡаҙап ҡуя. Шунан ҡәбер янына баҫып, былай ти:

- Заманында күп тартыш күргәнһең, күп батырҙы һөргәнһең, әммә башҡорттоң атҡыстарын тиңгә алмай, үҙеңә тиң таба алмай йөрөгәнһең. Батырҙарса түш киреп көрәштең һин, ут йөрәкле арыҫландай Аҡша батыр, шуға тәрбиәләп ҡуям һине. Таш менән ҡурған итеп ҡаҙҙым гүреңде. Үткән кеше "Батыр үткән икән борон был ерҙән" тип әйтһен. Шулай ти ҙә Ҡарас батыр йылҡыларын ҡыуып алып ҡайтып китә.

Бына шундай булған башҡорт батырҙары: ғәҙел дә, ҡыйыу ҙа.

✓ *Мейе өсөн күнегеүҙәр ҙә кәрәк. Неврологтар күберәк уҡырға кәңәш итә. Улар бында китап, гәзит уҡыуҙы, өҫтәл уйындарын, шулай уҡ ат сабыштарында ставкалар ҡуйыуҙы индергән.*

*ИНТЕРНЕТТАН*



# НИҢӘ ҮҘАЛЛЫ?

■ Росстат билдәләүенсә, кешеләрҙе үҙ аллы дауаланырға медицина учреждениеларының халыҡты ҡабул итергә тормауы этәрә. Рәсәйҙәрҙең 51 проценты ауырығанда үҙен үҙе дауалай, 12 проценты дәүләт поликлиникаһына түгел, шәхси табиптарға бара. Яуап биреүселәрҙең өстән бер өлөшө медицина учреждениеларының эше менән ҡәнәғәт түгел. Шуның өсөн улар унда йөрөмәй ҙә. 23,8 процент респонденттың дауаланырға ваҡыты юҡ. Шулай уҡ яуап биреүселәрҙең 15 проценты дауаланыу өсөн аҡса кәрәк, тигән фекерҙә. Ә 3,4 процент сирлеләр поликлиникаға үҙ аллы бара алмауына зарланған. 2 процент яуап биреүселәр халыҡ дауаһы менән шөғөлләнеүселәргә, гомеопаттарға, экстрасенстарға йөрөй. Улар араһында гүзәл заттар күберәк.

■ "Шарите" Яман шеште комплекслы дауалау үҙәге директоры Ульрих Кайльхольц билдәләүенсә, был сир менән ауырыусылар иҫәбе артыуы сәләмәт йәшәү рәүеше алып бармау менән бәйле. Яман шеш осраҡтарының өстән бер өлөшө тап алкоголизм, һимереү, тәмәке тартыуҙан барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, хәҙер тәмәке тартыусы ир-егеттәр кәмеһә, 1990-2000 йылдарҙа ҡатын-ҡыҙҙар был насар ғәҙәт менән дуҫлашты. Ә бына лейкемия ни өсөн ҙур тиҙлек менән тарала, быныһын ғалимдар һаман асыҡлай алмай. Шулай уҡ донъя халҡының ҡартайыуы ла был сирҙең артыуына килтерә. Билдәле булыуынса, өлкәнәйгәс, аномаль мутациялар хәүефе лә арта. Йәш организмда зарарлы күҙәнәктәр менән иммун системаһы үҙе лә яҡшы көрәшә. 80 йәштән һуң иммун системаһы мөмкинлектәре түбәнәйә, ә яман шеш хәүефе арта. Онкологик сирҙәрҙе дауалауҙа заман медицинаһы күпкә өлгәште. Әммә дарыуҙарҙың хаҡы ҡиммәт. Статистика буйынса, һуңғы йылдарҙа тап ошо өлкәләге дарыуҙарға хаҡтар өс тапҡырға артҡан.

■ Мейе өсөн күнегеүҙәр ҙә кәрәк. Неврологтар күберәк уҡырға кәңәш итә. Шулай уҡ төрлө уйындар ҙа ярҙам итә. Ҡытай ғалимдары 65 йәште үткән 15 меңдән ашыу кешене тикшергән. Тәүге тапҡыр табиптар уларҙың сәләмәтлек торошон 2005 йылда баһалаған. 2006-2012 йылдарҙа был тикшереүҙәр тағын ҡабатланған. Ғалимдар өлкән кешеләрҙең ниндәй интеллектуаль эшмәкәрлек менән шөғөлләнеүе тураһында ла ҡыҙыҡһынған. Улар бында китап, гәзит уҡыуҙы, өҫтәл уйындарын, шулай уҡ ат сабыштарында ставкалар ҡуйыуҙы индергән. Өлкән йәштә ниндәй ҙә булһа интеллектуаль эшмәкәрлек хәтер юғалтыу кеүек күңелһеҙлектәрҙән ҡотҡара ала.

■ Массачусетс дауаханаһы белгестәре даими рәүештә йоҡоһо туймаған үҫмерҙең һимереүе ихтимал, тип белдерә. Бынан тыш, уның ҡан баҫымы ла күтәрелә. Былар иһә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре хәүефен арттыра. Тикшеренеүҙәрҙә 829 үҫмер ҡатнашҡан. Улар 10 көн дауамында йоҡо сифаты һәм физик әүҙемлекте күҙәткән ҡоролмалар йөрөткән. Бил үлсәме, ҡан баҫымы үлсәнгән, холестерин һәм инсулинға ҡаршы тороу кимәле тикшерелгән. Үҫмерҙәрҙең яртыһы тәүлегенә 7,4 сәғәт йоҡлаған. Уларҙың 2 проценты 8 йәки 9 сәғәт йоҡлаған. Ҡатнашыусыларҙың күбеһенең йоҡо сифаты түбән булып сыҡҡан. Яҡшы йоҡлау өсөн ҡан баҫымы нормала, ә бил үлсәме, холестерин кимәле түбән булырға тейеш.

*ХӘТЕРКИТАП*

# ТОҒРОЛОҠ

**Сабый ғына сағымдан, иҫ белә башлағандан алып, өләсәйем мәрхүмәнең йыш ҡына ауыл осона сығып, алыҫ алыҫтарға текләп, нимәнелер тыңлап, кемделер көтөп торғанын иҫләйем. Оҙаҡ ҡына шулай ҡатып торғандан һуң, мине күтәреп ала ла, күҙ йәштәрен түгә-түгә, өйгә ҡайта. Бәләкәй булғанға күрә, өләсәйемдең хәлен аңламаһам да, уның биттәренән күҙ йәштәрен һөртөп, үҙемсә тынысландырырға тырышҡан булам. Ә өләсәйем бахыр ғынам, ауыр көрһөнөп, мине нығыраҡ ҡыҫып ҡосаҡлап: "Әлдә һеҙ бар әле бәпәйҙәрем, һеҙ булмаһағыҙ, нимә эшләр инем, нимә эшләр инем..."- тип, тағы үҙ алдына әллә нимәләр һөйләй-һөйләй, үҙен-үҙе йыуата, яйлап тыныслана ине.**



Үҫә, ҙурая килә мин өләсәйемә эйәреп йөрөгән өнһөҙ күҙәтеүсе генә түгел инем инде. Мин уға һорауҙар бирәм, ауыл ситенә сығып, нимә көткәнен һорайым һәм ни өсөн ошондай килгән һайын илап ҡайта икәнен белгем килә. Өләсәйем мине иркәләп һөйә лә, гел генә һүҙҙе икенсе юҫыҡҡа күсерә килә. Әлегә бәләкәй бит, аңламаҫ тип уйлағандыр инде...

Мәктәптә уҡып йөрөгәндә өләсәйем үҙенең ғүмер буйы күңел төбөндә һаҡлаған серен һөйләне. Ул шулай, йыш ҡына ауыл осона сығып, ҡартатайымды көтә икән. Эйе, эйе, 1942 йылдың көҙөндә Сталинград һуғышында хәбәрһеҙ юғалған ҡартатайымды. Өләсәйем был тарих тураһында һөйләгәндә миңә 15 йәш ине (1975 йыл), ә ҡартатайымдың хәбәрһеҙ юғалды тигән хәбәре килгәнгә 33 йыл ваҡыт үткән булған. Ул ваҡытта әле мин балалыҡ менән өләсәйемдең йөрәгендә ниндәй тәрән яра, ҡайғы-хәсрәт, ҡара һағыш ятҡанын аңлап та етмәгәнмендер. Ә шулай ҙа мин: "Өләсәй, 33 йыл үтеп киткән. Ҡартатай хәбәрһеҙ юғалған, нишләп һин уны һаман көтәһең? Ул ошоғаса ҡайтмағас, бөтөнләй ҡайтмаҫ инде", - тип аптырап һорайым. "Улай тимә балаҡайым, улай тимә! Үлгән тигән хәбәре килмәне бит ҡартатайыңдың, бәлки, ул тере ҡалғандыр, бәлки, тотҡонда булғандыр ҙа, һуңынан шул ҡалған ерендә ғаилә ҡороп йәшәп яталыр. Ҡасан да булһа бер ҡайтып инер, тыуған ер тарта бит ул! Ҡайтыр ҡартатайың, ҡайтыр! Көтәм әле балам мин уны, көтәм... " - тине өләсәйем.

Ул миңә ҡартатайымдың фотоһүрәтен күрһәтте. Был фотоны өләсәйем ҡәҙерләп кенә, ғүмере буйы түшелдерегенең кәҫәһендә һаҡлап йөрөткән икән. Оҙаҡ ваҡыттар үткәнгә, фото һарғайып, ситтәре кителеп бөткән, әммә ҡартатайымдың йөҙ-торошо ап-асыҡ һаҡланған. Фотонан ҡуйы ҡара ҡашлы, ҡара сәсле, осҡор ҡарашлы, мөһәббәт кәүҙәле, матур йөҙлө ир-егет ҡарай.

Өләсәйем һөйләүенсә, улар бер-береһенә йәшләй генә ғашиҡ булып өйләнешәләр. Бәхетле ғаиләлә бер ҡыҙ (минең әсәйем), бер малай тыуа. Икәүһе лә ут бөрсәһендәй егәрле йәштәргә донъя гөрләтеп йәшәргә лә йәшәргә ине лә һуң. Юҡ шул, ҡәһәрле һуғыш сығып, бар булған хыялдарын, һөйөү менән һуғарылған тормоштарын пыран-заран килтереп ҡуя. Ҡартатайымды һуғыш сыҡҡан йылда уҡ фронтҡа оҙатҡанда итәгендә ике бәләкәй генә бала менән тороп ҡала өләсәйем. Ил күргән михнәттәрҙе, ҡайғы-хәсрәттәрҙе, аслыҡ-яланғаслыҡты күрһә лә, ул балаларына ел-ямғыр тигеҙмәй үҫтерә. Кеше күтәрә алмаҫлыҡ эштәр башҡарырға тура килһә лә, сыҙай өләсәйем. Илгә килгән ауырлыҡты ул тулыһынса үҙ елкәһендә татый, ил менән бергә күтәрә, бергә үткәрә. Һәм һәр ваҡыт ҡартатайымды көтә, бер минутҡа ла, бер секундҡа ла уның тере булыуына, бер ваҡыт ҡайтып килеренә шикләнмәй, бының шулай булырына бөтә йөрәге менән инанып йәшәй. Өләсәйем түшелдерегендә тағы бер ҡәҙерле әйбер һаҡлап йөрөткән икән, күҙенең нуры һүнгәнсе көн дә сығарып уҡып, бөтөнләй күрмәй, уҡый алмай башлағас, түшелдерегенән сығарып, күҙҙәренә устары менән ябып, бер аҙ тотоп булһа ла кире йыйып ҡуйған әйбере - ошо хат булған: "Һаумы һөйөклө кәләшем минең, Мәрфүғам, ҡәҙерлем! Һине лә, балаларыбыҙҙы ла бик-бик һағынып хат яҙыусы мин, Сәлимйәнең. Беҙ Сталинградтан өс саҡырым ғына ерҙә окоптарҙа ятабыҙ. Тиҙҙән Сталинградты фашистарҙан азат итер өсөн һөжүмгә күсәсәкбеҙ. Беҙгә һөжүм алдынан яҡындарыбыҙға хаттар яҙырға рөхсәт иттеләр. Мәрфүға йәнем, балаларыбыҙҙы күҙ ҡараһындай һаҡла, үҙең дә ныҡ бул, бирешмә. Бик ауыр булһа ла түҙ, йәнем, һәм көт мине, мин ҡайтырмын Алла бирһә, дошманды еңеп, илгә тыныслыҡ алып ҡайтырбыҙ беҙ..."

Был юлдар ҡартатайымдың фронттан яҙған өсмөйөшлө хаттарының иң һуңғыһы. Һарғайып, яртылаш туҙып, тетелеп бөткән ҡағыҙ киҫәгенең өләсәйем өсөн ни тиклем ҡәҙерле, ғәзиз әйбер булғанын мин хәҙер генә бар булмышым менән аңлайым, иҫемә төшкән һайын йөрәгем әрнеп, күҙ йәштәремде тыя алмайым. Әле лә түгелеп илай-илай ошо юлдарҙы яҙып ултырам. Ҡураныс ҡына кәүҙәле өләсәйемдең, елдә бәүелә-бәүелә ауыл осонда ҡартатайымды көтөп торғаны иҫемә төшһә, йәнем өҙөлә. Ул һаман да алыҫтарға текләп, сабыр ғына шунда баҫып торалыр кеүек миңә...

Өләсәйем 76 йәшендә был донъянан китте, ғүмеренең аҙағына тиклем (47 йыл буйы) ҡартатайымды көттө. Уны тәрбиәләп һуңғы юлға әҙерләгән инәйҙәр: "Атайыңдың фотоһын һәм һуңғы хатын усына йомоп үлеп ҡалған әсәйегеҙ. Ғүмер буйы күкрәгендә һаҡлап йөрөткән ҡәҙерле ҡомартҡыларынан айырырға ҡыйманыҡ, ҡуша ерләйек инде", - тигәндәр, әсәйем менән ҡустыһына. Шулай эшләгәндәр ҙә, өләсәйем ҡартатайымдың фотоһын һәм хатын үҙе менән алып киткән...

Эй һәйкәлдәр ҡуйырлыҡ батырлыҡ, тоғролоҡ, сабырлыҡ, фиҙәкәрлек! Ҡайҙан килгән ул беҙҙең ҡартатайҙарыбыҙға, өләсәйҙәребеҙгә, ҡартәсәйҙәребеҙгә? Ниндәй йөрәк, ниндәй йән булған уларҙа? Тыуған илгә, тыуған ергә һөйөүҙе, тоғоролоҡто кемдәр тәрбиәләгән уларҙың күңелендә? Ниндәй һүҙҙәр әллә ниндәй ғәрәсәттәрҙе лә еңеп сығырлыҡ көс биргән уларға? Йөрәгебеҙҙә һеҙҙең турала яҡты иҫтәлек һаҡлайбыҙ, һоҡланабыҙ, ғорурланабыҙ, баш эйәбеҙ ҡәҙерле, ғәзиз кешеләребеҙ: ҡартәсәйҙәр, өләсәйҙәр, ҡартатайҙар, олатайҙар, инәйҙәр...

**Зилдә ХӘМИҘУЛЛИНА.**

*ӨСМӨЙӨШЛӨ ХАТ*



# БЕРЛИНДАН ЯҘЫЛҒАН

**Минең ҡулымда нисә йылдар буйы ҡәҙерләп һаҡланған, 1945 йылдың 19 майында фашизм ояһы булған Берлиндан яҙылған хат. Ваҡыт ағыштары дәфтәр битен бер ни тиклем һарғайтҡан, ләкин мәғәнәһе, яугир-еңеүсенең һөйөү хистәре һаман һаҡланған хат. Әйҙәгеҙ, күҙ һалайыҡ хат юлдарына.**

"Берлиндан сәләм! Рәхимә, ҡәйнәм, Сәлимйән һәм Фәриҙә, барығыҙға ла һағынышлы сәләм ебәрәм һәм сәләмәтлек теләйем. Беҙ кисә Берлиндан сығып, көнсығышҡа табан бер ергә килеп урынлаштыҡ. Бөгөн, 18 майҙа, һинең 16 һәм 19 апрелдә һәм Ямал ханымдың 9 апрелдә яҙылған хаттарығыҙҙы алып уҡып, ғәйәт шатландым. Мин дә һеҙҙе бик-бик һағындым. Иҫкә төшкәндә һыҡранып ҡуям. Ярай, күбенә түҙҙек һәм иҫән ҡалдыҡ. Һанаулы көндәр эсендә ҡауышырбыҙ, шатланышырбыҙ, йәнем! Беҙҙе тиҙҙән армиянан азат итеп, илдәребеҙгә ҡайтарыу тураһында хәстәрлек күрәләр булһа кәрәк. Көтөгөҙ! Дошманды тар-мар иттек, теләгебеҙгә ирештек. Берлин өҫтөндә беҙҙең еңеү флагы елберҙәй. Ниндәй ҙур шатлыҡ!

Мин 5 майҙа госпиталдән һауығып сығып, үҙ часыма килеп, яңынан хеҙмәт итә башланым. Иҫән-һаумын, ләкин һул яҡ түш аҫты сәнсеп ауыртҡылай, йөрәктә лә әҙерәк ауыртыу һиҙелә. Шулай ҙа тамам сәләмәтләнеүемә ышанам.

Сәләм менән, үбеп, Ғәлим. Берәй айҙан күрешеүҙе теләп ҡалам. Һәммә таныш иптәштәргә сәләм".

Бына шундай йөкмәткеле хат. Миңә уны мәктәп музейында эшләгәндә Яугилденән Ғәлиәхмәтова Лира Мәүлимбирҙе ҡыҙы тапшырғайны. Ә кем һуң ул Ғәлим? Мин үҙем ул ветеран тураһында ишетә генә беләм, уның ҡатыны Рәхимә әбей оҙаҡ йылдар Яугилде ауылында йәшәне. Уның ире Ғәлим Вәлиев һуғышҡа тиклем партия органдарында, төрлө кимәлдәге етәксе вазифаларҙа эшләгән. Данлы һуғыш юлын үтеп, Берлинғаса барып еткән. Ғәлим Ғәни улының һуғыштан һуңғы тормошо Ғафури районы һәм Сәйетбаба урта мәктәбе менән бәйле. Колхоздарҙы эреләтеү башланғас, партия райкомы уға колхозға етәкселек итеүҙе тапшыра. Ә ғүмеренең һуңғы 11 йылында Сәйетбаба урта мәктәбендә уҡыта. Бына шундай ветерандың хаты һаҡлана беҙҙең мәктәп музейында.

**Лилиә МИНӘЗОВА,**
**ветеран-уҡытыусы.**
**Ғафури районы**
**Яугилде ауылы.**

✓ ..."Ҡәйнәм, Ләлә менән Уралды Байназарҙағы детдомға бирмәй булмаҫ", - тине бер көндө әсәйем. "Ҡуй, килен, үлһәләр ҙә өйҙә ятып үлерҙәр", - тине өләсәйем, күҙенән сыҡҡан йәштәрен яулығының осо менән һөртөп.



ХӘТЕРКИТАП

# БОЛАН ТИРЕҺЕ ЛӘ АШ БУЛДЫ...

...Ул йылдарҙа беҙгә Сафин Йыһанур апам (бабайым - **Ред.**) ныҡ ярҙам итте. Утын алып килһә, бер буйын баҡса аша беҙҙең яҡҡа ырғыта торғайны. Һыйырыбыҙ иҫән саҡта ла баҡса аша бесән ырғытыр ине. Һыйыр үлгәс, Маһира инәйем гел һөт биреп торҙо. Уларҙың ике һыйыры, бер аты, ваҡ малдары булды. Улар етеш йәшәнеләр. Маһира инәйем аш бешерһә, ҡалған ашын, йәлләп, беҙгә индереп бирә ине. Беҙҙең мал булмағас, мал аҙбарҙарын да яғып бөттөк. Ҡышҡыһын аласыҡты ла яҡтыҡ. Әсәйем менән икебеҙҙең эш хаҡын көҙгөһөн шулай бирҙеләр - бер ағай 10 тары көлтәһен индереп, бәләкәс кенә урындыҡҡа һалып китте. Кем икәнен белмәйбеҙ. Өләсәйем өйҙә юҡ ине. Әсәй кисһеҙ ҡайтмай. Ашарға өйҙә бер нәмә лә юҡ. Теге тарының башын ҡулға ыуабыҙ ҙа, саңын өрөп ашайбыҙ. Өс көн шуны ыуып ашап, һыу ғына эсеп йәшәнек. Әсәйем бер көндө, ошо тарының башын өҙөп алып ыуығыҙ ҙа, берәйһененең килеһенә төйөп, өйрә итеп булһа ла эсеп алайыҡ, тине. Әсәйҙән әҙерәк ҡурҡабыҙ. Сөнки беҙ тарыны ыуып алып ашап бөттөк бит инде. Әсәй быны белмәй. Тарыһыҙ һаламды күреп ҡалды ла, әсәйем кәнсәгә китте: "Минең балаларға башы юҡ тары көлтәһен исем өсөн алып барып индереп киткәндәр. Был хәйерселәргә бара ул, тигәндәрҙер. Кем индергәнен балалар ҙа, мин дә белмәйбеҙ", - тигән. Теге көлтәне әҙләп кенә сыуалға яғып бөттөк. Теге хәлде өләсәйгә әйттек. Ярай, ҡурҡмағыҙ, берәй рәтен табып, әйтермен үҙем, тине өләсәй.

... Байғаҙынан Ситдыҡ Баязитов менән Дамулла Баязитов ағайҙарға заготконтора болан атырға план бирә торғайны. Шул боланды заготконтораға тапшырғас, үҙҙәренә он, бүтән ашамлыҡ алып ҡайта торғайнылар. Улар етеш йәшәнеләр. Бер мәл беҙҙе йәлләп, боландың тиреһен, дүрт тояғын бирҙеләр. Өләсәйем сыуалға ғына ут яҡты ла, теге тирене балта менән сабып ваҡлап, өйгә индереп өтә башланы. Беҙ ризыҡ була тип ҡыуанып, эргәһендә ҡарап торабыҙ. Хәҙер бешереп ашайбыҙ, тамаҡ туя, йәнәһе. Өләсәйем тирене өтөп бөткәс, бысаҡ менән ҡырып, таҙа итеп йыуҙы ла, уны тағы ла ваҡлап, ҡаҙанға һалды. Бына бер мәл усаҡтағы утын янып бөттө лә ҡуйҙы. Яғырға башҡа утын юҡ. Өләсәйем утын эҙләп сығып китте лә, кәртә-ҡураны яғып бөттөк шул, тип өшөп килеп инде. Беҙ усаҡ эргәһендә көлдөксәлә өләсәйемдең утын индереп, шул тирене бешергәнен түҙемһеҙлек менән көтөп торабыҙ. Өләсәй тағы ла үтмәҫ балтаһын тотоп сығып китте. Нимә дөрһөлдәй икән, тиһәк, былай ҙа ярты-йорто соландың таҡтаһын ҡутарып алып йөрөй икән. "Өләсәй, өй мөйөшөн тумырма, йәме, былай ҙа саҡ торған өй емерелеп китер", тигәс, солан таҡтаһын кире урынына сығарып һалып ҡуйҙы. Йыһанур апам урманға утынға киткән икән. Беҙгә лә бер буй утын ҡалдырып китте. Өләсәйем тағы утын ярырға сығып китте һәм балтаһының һабын төптән һындырып инде. Шунан ул өй башынан бер моҙға элекке һөйәктәрҙе алып төшөп, теге тиреләр бешкән ҡаҙанға һалып, кире ҡайнатырға булды. Әҙерәк һурпа һымаҡ тәме сыҡмаҫмы икән, исмаһам, берәй ус тары йәки һоло кәбәге лә ҡушһаҡ, үҙәк ялғарлыҡ булыр ине, ти. Әсәйем Фәйзулла апаларға сығып китте. Мәғәрифә инәйемдәр мул ғына йәшәй ине. Уларҙан бер сеүәтәләй икенсе ҡабат төйөлгән тары кәбәге алып килеп, ҡаҙанға төшөрҙө. Бер боламыҡ һымаҡ нәмә килеп сыҡты. Әсәйем, бына, исмаһам, тамаҡ ялғанып ҡалды, тип шатланды. Теге һынған балтаны тотоп, һаплатырға кеше эҙләп, Ғәлиулла ағайҙарға инеп китте. Беҙ түң тәҙрәне тыныбыҙ менән иретеп, ҡарап торабыҙ. Ғәлиулла ағайҙар юл аша ғына йәшәй ине. Әсәй балтаны һаплатып килеп тә сыҡты. Шунан Йыһанур апам биргән утынды бөткәнсе ҡырҡып ҡуйҙы...

..."Ҡәйнәм, Ләлә менән Уралды Байназарҙағы детдомға бирмәй булмаҫ", - тине бер көндө әсәйем. "Ҡуй, килен, үлһәләр ҙә өйҙә ятып үлерҙәр", - тине өләсәйем, күҙенән сыҡҡан йәштәрен яулығының осо менән һөртөп. "Ҡәйнәм, күрше килен дә өс бала менән ҡалды. Өсөнсөһө сәңгелдәктә көйөнә аслыҡтан үлгән. Юҡ, ҡәйнәм, иртәгә ат менән сана һорап алам да берәйһенән, ул килен дә ике балаһын - Сәфәрғәле менән Сәфәрбикәне алып китә, мин дә Ләләне алып китәм", - тип әсәйем сығып китеп, бер ап-аҡ ирҙәр күлдәге алып килеп, синькаға буяны ла, тиҙ генә миңә күлдәк итеп тегеп кейҙерҙе. Аҡ быйма ла биргән кемдер. Үҙемдең иҫке көпөмдө кейҙем, башыма һуғылған иҫке генә йөн шәл ябындым. Ат санаһына бесән һалып, кейемдәре булмағас, Сәфәрғәле менән Сәфәрбикәне иҫке юрғанға урап, өҫтәренә тирүгә ябып, беҙҙе Байназарға, Урал ҡустымды Брәтәктәге детдомға алып киттеләр. Өйҙә Хәсән ҡустым ғына ҡалды. Байназарға кискеһен генә барып еттек. Детдом эргәһендә Сәхипъямал тигән инәйем йәшәй ине. Шунда фатирға төштөк. Сәфәрғәле менән Сәфәрбикәне детдомға тиҙ ҡабул иттеләр. Сөнки уларҙың кейемдәре лә юҡ, үҙҙәре лә аҡ-күк кенәләр. Детдом директоры Клара апай, һинең өҫтөң бөтөн, әсәйеңдең дә өҫтө арыу күренә, һине ҡабул итә алмайым, тип, өс көн көттөрҙө. Өсөнсө көн Сәфәрғәле менән Сәфәрбикәнең әсәһен - минең әсәй тип, минең әсәйҙе теге ике баланың әсәһе иттереп яңынан документ төҙөп, саҡ алдылар...

...Башта сәсте ҡырып ташланылар. Иҫке генә бумазый ҙур күлдәк бирҙеләр. Башыма ҡуян ҡолағы һымаҡ ике яғы ла ослайып торған кәпәс, аяҡҡа аяҡ табаны күренеп торған быйма, иҫке тиренән тегелгән көс еткеһеҙ оҙон толоп кейҙерҙеләр. Мунсала үҙҙәре ҡарап тороп йыуындырҙылар. Урын булмағанлыҡтан, ишек төбөндә иҙәндә йә ҙур һандыҡ өҫтөндә бер аҙна буйы кәкерәйеп кенә йоҡлап йөрөнөм. Түшәк тә бирмәнеләр. Ашарға бер сафҡа теҙеп алып китәләр, ҡайтҡанда ла бер сафта ҡайтабыҙ. Детдом тау башында, ә беҙ тау аҫтындағы мәктәпкә төшөп уҡый торғайныҡ. Хаят тигән апай уҡытты. Ҡысҡырып уҡығыҙ, мин тыңлайым, ти ҙә, үҙе беҙгә күрһәтмәй генә бейәләй, ойоҡ бәйләй. Ручка, дәфтәр юҡ, аҡ таҡтаға күмер менән яҙабыҙ. Ҙурыраҡ дүрт ҡыҙ менән мине 5 саҡрымдағы ырҙындан түшәк өсөн һалам алып ҡайтырға ебәрҙеләр. Мин ныҡ өшөнөм. Ҡыҙҙар һалам түгел, санаға мине тейәп һөйрәп алып ҡайтҡандар. Изоляторға һалдылар. Укол һалалар, көнөнә өс тапҡыр аш ҡалағы менән балыҡ майы эсерәләр. Был бала хәҙер барыбер эшкинмәй, урын да юҡ, тип, мине дарыуҙар бүлмәһенә сығарҙылар. Унда шул хәтлем һыуыҡ ине. Бер ваҡыт Өфөнән врач килде һәм бөтәбеҙҙе лә ҡараны. Башҡорт ағайы булғас, "Мин шәбәйәмме, үлмәйемме?" тип һораным. Ул арҡамдан һөйҙө лә, "Шәбәйәһең, бер һүҙһеҙ", тине. Ул ағай Өфөнән вертолет менән килгәйне. Ул ҡайтып киткәндә мин уны атайыма оҡшатып, илап ҡарап ҡалдым...

...Яҙғыһын Байназарҙы һыу баҫты. Мине одеялға урап, тәҙрә төбөнә ултырттылар. Мин ундай һыу баҫыуҙы тәүгә күргәс, аптырауға ҡалдым. Ул өйҙәр, буралар, һыйырҙар, ваҡ малдар, таҡталар, бесәндәр аға. Ярҙан сыҡҡан ҡара һыу тотош ауылды баҫты. Ҡысҡырыш, илаш иҫ китмәле булды. Тик был хәл нисәнсе йыл булғаны хәтеремдә түгел. Шул йылды әсәйем Брәтәк детдомынан Урал ҡустымды, Байназарҙан мине Хәмит апаның ҡуян арбаһы менән һөйрәп алып ҡайтты. Ауырығас, мин бәләкәс кенә булғанмындыр инде. "Шәмсүрә еңгә балаларын детдомдан алып ҡайтҡан. Аслыҡтан үлһәләр, өйҙә үлерҙәр, ҡырҙа үлтермәйем", тигәндер инде, тип һөйләгәндәре ишетелгеләне. Өйҙә бер нәмә лә үҙгәрмәгән, барыһы ла элекке кеүек. Йәйгә лә сығып киләбеҙ. Хәмит апаға зыярат яланында һоло сәсергә ҡушҡандар. "Ләлә ҡыҙым, әйҙә, мин үгеҙ менән ер һөрәм, һин минең арттан шул ыҙанға һоло һалып йөрөрһөң", тигәс, риза булдым. Хәмит апа миңә оҙон моҙғаға һоло һалып бирҙе. Мин уны яурынға элеп алдым. Хәмит апа күрмәгәндә һолоно услап ауыҙға ла ҡаба һалам. Теге ҡарышҡыр сыбар үгеҙ ята ла ҡуя. Хәле бөтәме, әллә көн эҫе булғанғамы - белмәйем. Хәмит апа торғоҙорға теләп һуҡҡан һайын ҡарыша. Ахыры һолоно сәсеп бөтә алмай ҡайттыҡ. Сей булһа ла теге һолоно сәйнәп, һәптеюҡ туйып ҡайттым...

...Бер ағай Байғаҙыла тауышһыҙ кино күрһәтергә булды. Кино килә, тигәс, кешеләр ҡыҙыҡ күреп, түҙемһеҙлек менән көтөп йөрөйҙәр. Беҙҙең өйҙөң береһе буш тора ине, теге кеше шунда йоҡларға килде. Аяғында иҫкерәк кирза итек, йәшкелт төҫтәге галифе салбар, өҫтөндә иҫке ҡара гимнастерка, билен яҫы һалдат ҡайышы менән быуған. Бәләкәсерәк кәүҙәле, һыңар аяғын саҡ һөйрәп атлай. Халыҡ элекке мәсет, хәҙер клуб булған бинаға йыйылды. Аҡсалары булмағас, ҡайһы берәүҙәр йомортҡа, икенселәр ҡорот, ярты икмәк тотоп килгән. Ҡайһылары аҡса менән түләп инде. Ҙур ағайҙар бушҡа инде. Сөнки улар алмашлап движокты бороп торалар ине. Ә беҙ, ағай беҙҙә йоҡлағас, буш индек. Киноның тауышы юҡ, һүрәт кенә ҡарайбыҙ. Кинола гел һуғыш хәлдәре. Әсәйем шунда уҡ иларға тотондо, миңә лә бик ҡыйын булып китте. Ҡайтҡас, "Әсәй, ни эшләп гел илап ултырҙың?" тигәйнем, "Атайыңды күреп булмаҫ микән тип көтөп иланым", тине. Теге ағай икенсе ауылға кино күрһәтергә китте...

Бына шулай үтте минең бала саҡ. Был хәлдәр бала сағы һуғыш осорона тура килгән күптәргә таныштыр. Өҫ - кейемгә, тамаҡ ризыҡҡа туймаһа, ләкин үҙебеҙҙең сослоҡ, әсәйҙәребеҙҙең, өләсәйҙәребеҙҙең тырышлығы менән тере ҡалдыҡ. Бөйөк Еңеү байрамы алдынан ул йылдарҙа күргән-кисергәндәрем кино таҫмаһы һымаҡ күҙ алдымдан үтә. Эйе, һуғыш тылда ла барҙы шул...

**Ләлә ЗАМАНОВА.**
**Бөрйән районы**
**Иҫке Собханғол ауылы.**
**(Аҙағы. Башы 18-се һанда).**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Ниндәй телевизор һайларға?

Ниһайәт, иҫке телевизорығыҙҙы замансаһына алмаштырырға уйланығыҙ, ти. Сәләмәтлегегеҙҙе һаҡлау күҙлегенән ҡарағанда, әлбиттә, был дөрөҫ ҡарар. Яҫы LCD телевизорҙарҙың ғәҙәтиҙәренән өҫтөнлөгө күренеп тора. Беренсенән, был осраҡта электрон нурҙары торбаһы булмағас, тулыһынса зыянлы нурланыу юҡ. Икенсенән, күҙҙәр көсөргәнмәй. Һәм, шыйыҡ кристалл экрандар кинескоптың электрланған экраны кеүек туҙан йыймай. LCD телевизорҙы һайлағанда экран ҙурлығы менән хаталанмаҫҡа кәрәк. Аш-һыу бүлмәһенә йәки бәләкәй бүлмәгә алһағыҙ, диагонале 15-20 сантиметр булғаны ла ярай. Өй кинотеатры өсөн ҙурыраҡ моделде алырға мөмкин. Экранға тиклем арауыҡ 4-5 диагональ булырға тейеш. LCD телевизорҙарҙа яҡтылыҡ сығанағы күҙҙәр өсөн ғәҙәти булған көндөҙгө яҡтылыҡҡа оҡшаш. Ул поляролаштырылған һәм күҙҙәр өсөн файҙалы.

Әгәр ҙур компания менән ҡарарға теләһәгеҙ, модель һайлағанда күреү мөмкинлегенә иғтибар итегеҙ - ҙур телевизорҙы теләһә ҡайһы урындан ҡарарға мөмкин. Әгәр дөрөҫ ҡарарға өйрәнһәгеҙ, ул күҙҙәр өсөн насар түгел, киреһенсә, файҙалы буласаҡ.Беҙ телевизор ҡарағанда, күҙҙәр китап уҡығандағы кеүек даими түгел, ә төрлөсә хәрәкәт итә һәм күҙҙәр өсөн көсөргәнеш тыуҙыра. Был күнекмә характерына эйә булһын өсөн нимәне хәстәрләргә кәрәк? Телевизор ҡарар алдынан күҙлегегеҙҙе сисеп, пальминг эшләгеҙ. Шулай итеп уларҙы көсөргәнештең үҙгәреүенә әҙерләйһегеҙ. Телевизорҙы күҙлекһеҙ ҡараһағыҙ, бигерәк тә яҡшы. Әгәр күреүҙә проблемалар бар икән, күҙлек кейегеҙ. Телевизор ҡарағанда дөрөҫ арауыҡта һәм дөрөҫ позала ултырыу кәрәк. Мөмкин булһа, экрандың уртаһы тураһына ултырығыҙ. Әгәр икенсе урындан ҡараһағыҙ, күҙҙәрегеҙҙең бер мускулы көсөргәнә, икенсеһе әҙерәк эшләй, һөҙөмтәлә арығанлыҡ тойғоһо барлыҡҡа килә.

Телевизор алдына күҙҙәрегеҙ уңайһыҙлыҡ тоймаған арауыҡта ултырығыҙ. Башта көсөргәнмәй генә күргән арауыҡта, яҡында ултырып ҡарарғыҙ. Күҙҙәрегеҙ өйрәнеп, күренештәр асыҡ булғанға тиклем шул урында ҡалығыҙ. Һуңынан ултырғысты бер аҙ артҡа шылдырығыҙ. Телевизор экраны менән араны яйлап алыҫлаштыра бара ныҡ ҙур арауыҡтан да яҡшы күреүегеҙҙе тойорһоғоҙ. Хәйер, бында аныҡ күрһәтмәләр юҡ. Барыһы ла экрандың ҙурлығына бәйле. Стандарт экрандар өсөн оптималь ара - 3-4 метр. Әгәр фатирығыҙ бәләкәй икән, ҙур экранлы телевизор алмағыҙ - ул күҙҙәр өсөн насар. Күнекмә көсөргәнешен артыҡ көсөргәнештән уның ял менән аралашып барыуы айырып тороуын иҫегеҙҙән сығармағыҙ. Оҙайлы монологтар ваҡытында күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм уларға ял бирегеҙ. Тапшырыу барышында ваҡыты-ваҡыты менән күҙҙәрегеҙҙе йомоп, һуңынан уларҙы сылт-сылт йомоп алығыҙ һәм ҡабаттан ҡарай башлағыҙ. Шулай уҡ оҙаҡ ваҡыт хәрәкәтһеҙ ултырыуҙың зыяны хаҡында ла онотмағыҙ, урынығыҙҙан тороп, бер аҙ хәрәкәтләнеү ҙә зыян итмәҫ.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Әгәр кешеләрҙең бар теләктәре лә тормошҡа ашһа, Ер шары ысын тамуҡҡа әйләнер ине.*

*(П. Буаст).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 14 МАЙ - "БАШҠОРТТАР ТУРАҺЫНДАҒЫ ҠАҒИҘӘ" РАҪЛАНҒАН КӨН




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**18-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Күсимов. Йопар. Махорка. Шама. Дошман. Майлут. Көрҫ. Йәйләү. Рюрик. Ҡарға. Гәрәев. Мушкетёр. Вертолет. Куба. Рейд. Рәшә. Неон. Ирис. Әмер.

**Вертикаль буйынса:** Матросов. Шайморатов. Күмер. Майташ. Тәрбиә. Ҡаш. Сәйәхәтсе. Ерәнсә. Радио. Тәте. Вернадский. Граждан. Йүргәк. Миҫал. Нисәү. Ваза.

САНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ИҪКЕ ЯҢЫ СПЕКТАКЛЬ




**Милли йәштәр театры Мостай Кәримдең 100 йыллығына уның иң билдәле әҫәре буйынса премьера әҙерләй. "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" спектакле театр сәхнәһендә 23-24 майҙа күрһәтеләсәк.**

"Романдан өҙөктәр" - режиссер Мәсәлим Күлбаев уның жанрын шулай билдәләй. Уның әйтеүенсә, ижади төркөм алдында тамашасыны аптыратыу маҡсаты тормай. "Быға тиклем бер кем дә эшләмәгән инсценировка яҙырға тигән бурыс ҡуйһаҡ, уны эшләгән дә булыр инек. Тик ул саҡта әҫәрҙең мәғәнәһенән ситләшәсәкбеҙ. Беҙ бөйөк шағир, гениаль яҙыусы, фәйләсүфте булдырған ваҡиғаларҙы урап үтә алмайбыҙ. Уның кеүек шәхестәр беҙгә нимә өсөн ебәрелгән, уны нимәләр тәрбиәләгән һәм күңелен үҫтергән, ниндәй һауаны һулаған, ниндәй йырҙар тыңлаған, ниндәй усаҡтарға ҡарап уйланған - ошоларҙы аңларға тырыштыҡ. Был спектакль тормошҡа, һөйөүгә гимн булып яңғыраясаҡ". Режиссер бөгөнгө замандың ни тиклем ҙур үҙгәрештәргә дусар булыуы тураһында ла телгә алды. "Үҙ-ара мөнәсәбәттәр, донъяға ҡараш хәҙерге прагматик ваҡытта бөтөнләй башҡаса, хатта күп әйберҙәр ысынында булмаған кеүек кенә тойола, ул заманда йәшәгән кешеләр ниндәйҙер әкиәт геройы һымаҡ ҡына ҡабул ителә".

Спектакль рус телендә барасаҡ, шуға ла "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ"тың яҙыусының улы Илгиз Кәримов тәржемәһендәге тексы ҡулланыла. Әммә унда ике труппа артистары ла ҡатнаша. Кендек һәм шағирҙың йәш сағын - Ринат Фәтхиев, Оло инәйҙе - Альбина Кашанова менән Зифа Дәүләтбаева, өлкәнәйгән шағирҙы - Марат Ҡорбанғәлиев, Әсхәтте Дмитрий Гусев уйнаясаҡ.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

# ИҢ-ИҢЕ...

**Новосибирскиҙа үткән V "Рәсәй студенты - 2019" Бөтөн Рәсәй грация, спорт һәм талант конкурсында Башҡорт дәүләт аграр университетында белем алыусы Гөлшат Йәрмөхәмәтова икенсе урын яуланы.**

"Һылыуҡай Bashkirian Beauty" студияһы етәксеһе Линара Таһирова белдереүенсә, конкурс этаптары араһында ГТО нормаларын тапшырыу, ижади, интеллектуаль һәм патриотик турҙар, дефиле һәм социаль селтәрҙәрҙә тауыш биреү булған. Уларҙың барыһын да уңышлы үтеп, Гөлшат "Рәсәйҙең иң яҡшы икенсе студенты - 2019" тигән титулға лайыҡ булған. Бынан тыш, ул "Рәсәйҙең иң мәрхәмәтле студенты" тигән номинацияла ла еңеп сыҡҡан.

Гөлшат Йәрмөхәмәтова Бөрйән районынан, һайлаған һөнәре - технолог. Бейеү, өҫтәл теннисы - яратҡан шөғөлдәре, әүҙем йәмәғәт эшмәкәре.

# ҠУРАЙҘА - "BATTLE"

**Өфөлә тәүге тапҡыр йәштәр араһында "KURAI BATTLE" төбәк-ара музыка фестивале үтә. Сара Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына арнала.**

Был үҙенсәлекле тамаша республикабыҙҙың милли мәҙәниәтен үҫтереү өсөн яңы шарттар булдырыу, шулай уҡ ҡурайҙа уйнауҙың иң яҡшы традицияларын пропагандалау, һәләтле ҡурайсыларҙы асыҡлау һәм йәштәрҙе башҡорт уйын ҡоралдары фольклорына йәлеп итеү маҡсатынан уҙғарыла. Музыка фестивале бөгөнгө заманда бик популяр булған "battle" форматында һайлап алыу ярҙамында үтәсәк. Проекттың кульминацияһы булып ҙур финал торасаҡ, ул 28 майҙа Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында буласаҡ. Ҡатнашыусыларҙың оҫталығын билдәлә ҡурайсылар, фольклорсы ғалимдар баһалаясаҡ.

САНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**11 май "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

**12 май "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

**15 май "Антигона"** (Ж. Ануй), драма 12+

**16 май "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 12+

**17 май Миҙгел ябыу тантанаһы. "Урал батыр".** Үлемһеҙлек тураһында ҡобайыр. Башҡорт халыҡ эпосы буйынса 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 май "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. 12.00, 0+

**12 май "Үәт, исмаһам, ахырызаман!"** (М. Багаев), комедия. 18.00 16+

**17 май Миҙгел ябыу тантанаһы "Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), романтик драма 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**11 май "Игра в прятки"** (Н. Шувалов). 12.00, 14.00 0+

**12 май "Кот в сапогах"** (Н. Шувалов). 12.00, 14.00 0+

**15 май "Айыу бабай йоҡламай"** (С. Әлибай). 11.00 0+

✔ *Оло һүҙен тыңламаған оролған да бәрелгән.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ҺЫЛЫУҠАЙҘАР...

## һынау тотто



**"Һылыуҡай-2019" асыҡ республика башҡорт гүзәлдәре конкурсы үҙенең еңеүселәрен билдәләне. Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына арналған тамашала ун ике конкурсант һынау тотто.**

"Һылыуҡай" асыҡ республика гүзәллек бәйгеһе 27-се тапҡыр үткәрелә. Был арауыҡ эсендә ул байтаҡ үҙгәрештәр ҙә кисергән. Быйыл иһә, ойоштороусылар уның төп ҡағиҙәләренә төҙәтмәләр индергән һәм яңы шарттар буйынса 18 йәштән 27 йәшкә тиклемге ҡыҙҙарҙы ғына ярышҡа сығарырға ҡарар итәлгән. Бынан тыш, алдағы йылдарҙа ҡатнашыусыларға ҡабаттан үҙ көсөн һынап ҡарау мөмкинлеге бирелгән. Быйылғы "Һылыуҡай"ҙың үҙенсәлеге тағы шунда: ҡыҙҙар үҙҙәре менән таныштырыуҙың йөкмәткеһен үҙгәрткән һәм V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында ҡабул ителәсәк документҡа - Башҡорт халҡының үсеш стратегияһына үҙ тәкдимдәрен яңыратты. Ҡатнашыусылар республикала туризмды үҫтереү, милли кадрҙар әҙерләү, башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү, хоҡуҡ, иҡтисад, ауыл хужалығы, демография, производство өлкәләренә ҡағылышлы актуаль мәсьәләләрҙе күтәрҙе. Мәҫәлән, Әлшәй районынан Ләйлә Шәкүрова тыуған яғында этник туристик база төҙөргә, Алина Ғәзизова алкоголле эсемлектәрҙе тыйыуға ҡағылған закондарҙы ҡатырыраҡ итергә, Гөлфиә Ҡудашева республиканың бер районын IT-технологиялар етештерелгән төбәккә әйләндерергә тәкдим итте. Әйтергә кәрәк, конкурсанттарҙың башҡорт телен белеү кимәлен юғары булыуын да һынап өлгөрәҙәк был юлы. Ә бына башҡорт халыҡ ижады, әҙәбиәте, мәҙәниәте өлкәләрендәге белемдәре, ғаилә һәм тәрбиә мәсьәләләрендәге ҡараштары "Асыҡ микрофон" ваҡытында тамашасыларҙың һорауҙарына яуаптарын тыңлағанда төҫмөрләнде. Ҡыҙҙар ҡаушап ҡалманы, "Урал батыр" эпосы тураһында ла мәғлүмәтле булып сыҡты, Мостай Кәримдең шиғырҙарын һөйләп тә ишеттерҙе.

Конкурста ҡыҙҙарҙың бейеү-йырға маһирлығы ла һынала. Был юлы уларҙың сығышы буласаҡ Бөтә донъя фольклориадаһына арналғайны һәм ҡатнашыусылар төрлө милләт бейеүҙәрен башҡарҙы. "Гөлнәзирә" бейеүендә ҡыҙҙар Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернаты ансамбле егеттәре һәм "Байыҡ" телевизион конкурсы еңеүсеһе Айназ Низаметдинов менән берлектә сығыш яһаны. Йыр-моңға маһирлыҡты һынағанда ҡатнашыусылар сит илдә йәшәгән яҡташтар менән бәйләнешкә инеп, "Бер ҡайтмаһам, әсәй, бер ҡайтырмын" йырын бергә башҡарҙы.

Бер төрлө кейенгән, буйҙары бер иш, барыһы ла һылыу ҡыҙҙарҙы айырыуы, уларҙың талантын һынауы шуға күрә еңел булманы. Шулай ҙа жюри ағзалары биргән баһалар буйынса "Һылыуҡай-2019" тажын Әлшәй районынан Ләйлә Шәкүрова кейҙе. Беренсе урынға Салауат районынан Диана Шәғәйепова, икенсе урынға Баймаҡтан Зөлфиә Байбулатова һәм Әлшәйҙән Нәилә Йәнбирҙина, өсөнсө урынға Федоровканан Сәлимә Солтанғолова, Йылайырҙан Гөлфиә Ҡудашева һәм Мәскәү ҡалаһынан Зилиә Агишева лайыҡ булды.

**Камилә ҒӘЛИЕВА.**

*ХӘТЕРКИТАП*

# ЯҘЫУСЫ ҠАТЫНЫ

**"Ҡабаттан йәнләнгән фотоһүрәттәр" проекты гәзит уҡыусыларҙы "Беренсе Республика" фильмының геройҙары менән таныштырыуҙы дауам итә. Проектта шәхестәрҙең тарих архивтарынан, фәнни хеҙмәттәрҙән, музейҙарҙан тупланған фотолары һәм костюмдар буйынса рәссам Әлиә Байрамғолова тарафынан кинорежиссер Булат Йософовтың "Беренсе Республика" тарихи нәфис фильмын төшөрөү майҙансығынан яһаған фотолары тәкдим ителә.**



*Юлтыевтар, 20-се йылдар. Актриса Гөлназ Мөхәмәҙиева.*

**Фатима Ғилман ҡыҙы ЮЛТЫЕВА** (актриса Гөлназ Мөхәмәҙиева уйнай) - Ырымбур өлкәһе Бызаулыҡ ҡалаһында тыуған. Ата-әсәһе бар балаларына ла яҡшы белем бирә. Фатима иртә кейәүгә сыға, әммә йәш ғаилә тиф менән ауырып, ире үлә. Ошонан һуң ул фармацевтар курсына уҡырға инә. Дауыт Юлтый менән дә Бызаулыҡта таныша. Үҙенең хәтирәләре буйынса, беренсе тапҡыр Дауытты 1919 йылда уҡытыусылар конференцияһында күрә. Танышлыҡ ныҡлы дуҫлыҡҡа әүерелә. 1921 йылдың июлендә никахтарын теркәйҙәр. Шул мәлдә ваба эпидемияһы башлана, Фатима тағы ла ҡаты сирләп китә. Дауыттың тырышлығы менән аяҡҡа баҫа. 1921 йылда Дауыт Юлтый башҡорт делегацияһы составында 9-сы Бөтөн Рәсәй Советтар съезына бара, В. Ленин менән осраша. 1922 йылда ғаилә Өфөгә күсә, 1924 йылда - улдары Таң, 1926 йылда ҡыҙҙары Нинель донъяға килә. Бик ҡунаҡсыл булалар, яҙыусылар, музыканттар, эшселәр, уҡытыусылар, колхозсылар - барыһы ла уларҙың фатирында йыйылы тәгәм, ихлас мөнәсәбәткә тап була. Фатима фармацевтика техникумын тамамлай һәм 1929 йылдан 1937 йылға тиклем Башҡортостандың дарыуханалар идаралығы системаһында эшләй. 1937 йылда Дауыт Юлтый ялған ғәйеп менән ҡулға алына һәм хөкөм ителә. Фатима Юлтыева ла 10 йыл ғүмерен тотҡонлоҡта уҙғара - башта төрмәлә, һуңынан Мордовияның Темников лагерҙарында. Бер нисә йыл уның менән бергә Һәҙиә Дәүләтшина ла була. Бер ҡасан да балалары менән бәйләнеште өҙмәй, уларҙың хаттарын ҡәҙерләп һаҡлай. Нинель башта Ленинградтан, аҙаҡ Өфөнән һәм Ҡазандан яҙа. Таң Ырымбур өлкәһендә әсәһенең туғандарында йәшәй, һуңынан фронтҡа китә.

Фатима Юлтыева Өфөгә үҙен һәм Дауыт Юлтыйҙы аҡлағас, 1956 йылда ғына ҡайта. Ошо көндән алып бар көсөн иренең исемен аҡлауға бағышлай. Замандаштарының хәтирәләрен йыя, китаптарын сығарыуға, әҫәрҙәрен тәржемәләүгә булышлыҡ итә. Быларҙың барыһы ла еңел булмай, сөнки яҙыусының бар архивы, китаптары, ҡульяҙмалары юғалып бөткән була. Дауыт Юлтыйҙың Өфөлә һәм тыуған ягы Ырымбурҙа юбилейҙарын ойоштороуҙа ҡатнаша, Юлтый ауылы мәктәбендә музейын булдырыуға ярҙам итә.

Фатима Ғилман ҡыҙы башҡорт әҙәбиәтенә Дауыт Юлтыйҙың исемен ҡабаттан тергеҙеү өсөн күп эшләй, бары тик иренең һөйөктәре күмелгән урынды ғына таба алмай. Таң һәм Нинелдең дә был юҫыҡтағы тырышлыҡтары һөҙөмтә бирмәй... Был мәҡәлә өсөн материалдар Юлтыевтарҙың ейәнсәре - Наилә Таң ҡыҙы Юлтыеванан алынды.

**Гөлнара ЯРУЛЛИНА,**
**тарих фәндәре кандидаты,**
**проект авторы.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ОШАҠ ҺӨЙЛӘГӘНДЕҢ...

## бысағы телендә

Оло һүҙен тыңламаған оролған да бәрелгән.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әгәр кешеләрҙең бар теләктәре лә тормошҡа ашһа, Ер шары ысын тамуҡҡа әйләнер ине.

**(П. Буаст).**

Халыҡтар зарланыуҙан туҡтаһа, фекерләүҙән дә туҡтай.

**(Наполеон).**

Бөйөк аҡыл эйәһе власть биләгәндә халыҡ уның барлығын һиҙмәй ҙә; бик үк аҡыллы булмаған кеше идара иткәндә халыҡ уны хөрмәт итә һәм маҡтай; ахмаҡ кеше власть биләгәндә халыҡ унан ҡурҡа;тағы ла ахмағыраҡ әҙәм идара иткәндә халыҡ уны күрә алмай.

**(Лао-цзы).**

Власҡа ынтылыу ҡурҡыуҙан килә. Кешеләрҙән ҡурҡмағандар улар өҫтөнән идара итергә ынтылмай.

**( Б. Рассел).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ярлы ғына ғаиләлә тыуа Ғәйшә. Фәҡирлек өсөн кәмһетелеп үтә бала сағы. Үҫеп етеп, кейәүгә сыҡҡас та иренең ғаиләһендә атаәсәһенең фәҡирлеге өсөн кәмһетеүҙәр туҡталмай. Бала тапҡас ҡына уға хөрмәт күрһәтә башлайҙар. Әммә күп тә үтмәй, улы һәләк булып ҡуя. Быға саҡлы бер тапҡыр ҙа үлем менән осрашмаған Ғәйшә улының мәйете эргәһенә бөрөүҙе лә яҡын ебәрмәй. "Мин улымды терелтер дауа табасаҡмын", тигән уй менән, балаһының мәйетен күтәреп ала ла, өйҙән-өйгә дарыу һорашып йөрөй башлай. Кешеләр уны аҡылдан яҙған тип уйлай, мәйетте терелтер дарыу булмай, тип, төрлөсә ышандырырға тырышалар. Әммә Ғәйшә юлын дауам итә. Бына уға бер аҡыл эйәһе осрай. "Һин минең улымды терелтер дарыуҙы беләһеңме?" - тип һорай унан Ғәйшә. "Эйе, мин үндай дарыуҙы беләм, - ти аҡыл эйәһе. - Һин хәҙер йорттан йортҡа йөрөп сыҡ, әгәр ҙә ҡайһылыр йортта бер ваҡытта ла бер кем дә үлмәһә, уларҙан бер семтем генә гәрсис орлоғо һорап ал..." Ғәйшә ҡалалағы беренсе йортҡа инә, бер семтем гәрсис орлоғо һорай. Орлоҡто ҡулына алғас, Ғәйшә: "Һеҙҙең йортта бер ваҡытта ла бер кем дә үлмәгән, шулай бит?" - тип һорай. "Һин нимә! - тиҙәр йорт хужалары. - Беҙҙең йортта тереләргә ҡарағанда үлеләр күберәк..." Ғәйшә гәрсис орлоғон кире ҡайтарып бирә лә, артабан китә. Бөтөн ҡаланы йөрөп сыға, әммә мәйет сыҡмаған бер генә йортто ла таба алмай. Шунан ғына ул үлем бер уға ғына килгән ҡайғы түгеллеген, тотош ҡалала тереләргә ҡарағанда үлеләр күберәк икәнен, үлем тереләр өсөн мәңгелек бер ҡанун икәнен аңлай..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 8 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.



«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 370